ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

14-20 февраль (шаҡай) 2025

№6 (1150)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

***Мөхтәрәм йәмәғәт! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы баҫмабыҙға ваҡытынан алда, 1 февралдән апрелгә тиклем, 2025 йылдың икенсе яртыһы өсөн дә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Хаҡы 971 һум 70 тин. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласаҡ икәне тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Әҫәрҙәребеҙ киләсәктә лә уҡылыр,**

тик туған телебеҙ генә йәшәһен!



8-9

**Һәр образы аша...**

сәхнәнән тормош дәресе бирә ул



11

**Яулыҡ - башыбыҙ ҡалҡаны**



12

**Беҙ - лайыҡлы вариҫтар**



13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*МӘҘӘНИ МАЙҘАН*

# КРЕМЛЬ ҺАРАЙЫНДА...



**11 мартта Кремль һарайында Башҡортостандың Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбленең концерты була. Коллектив "Донъя халыҡтары бейеүҙәре" программаһын күрһәтә.**

Тап 1939 йылдың 11 марты коллективтың тыуған көнө тип иҫәпләнә. Был көндө Фәйзи Әҙеһәм улы Ғәскәров хәҙер уның исемен йөрөткән башҡорт дәүләт бейеү ансамбленең художество етәксеһе итеп тәғәйенләнгән. Бөгөнгө көндә Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле "Донъя халыҡтары бейеүҙәре" программаһы өсөн ЮНЕСКО-ның абруйлы наградаһына - "Биш ҡитға" алтын миҙалына һәм "Донъя илсеһе" дипломына лайыҡ булған. Ансамбль йыл һайын Бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара проекттарҙа ҡатнаша, милли мәҙәниәтте һәм сәнғәтте бар донъяға таныта.

Шулай итеп, Кремль һарайында ансамблдең 85 йыллыҡ юбилейына арналған сағыу тамаша күрһәтеләсәк. "Беренсе бүлектә башҡорт хореографияһы классикаһы - "Зарифа", "Ете ҡыҙ", "Төньяҡ амурҙары", "Шаян ҡыҙҙар", "Өс туған" һәм Фәйзи Ғәскәров мираҫының алтын фондына ингән башҡа шедеврҙар, шулай уҡ Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығына арналған хореография композициялары күрһәтелә, икенсе бүлектә иһә ғәскәровсылар Рәсәй һәм донъя халыҡтары: ҡаҙаҡ, хорезм, белорус, испан, ҡытай бейеүҙәре менән сығыш яһай", - тип һөйләне ансамблдең матбуғат секретары Элиза Сынбулатова.

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## ТАШЛАМА МЕНӘН...

**Рәсәйҙә күп балалы ғаиләләр һәм пенсионерҙар һалым льготалары менән файҙалана ала.**

Әйтәйек, тәүгеләр өсөн транспорт, ер һәм мөлкәт һалымдарына льгота ҡаралған. Икенселәре өсөн льготалар пенсия алды йәшендәгеләргә лә ҡағыла (йәғни 55 йәштән үткән ҡатын-ҡыҙҙарға һәм 60 йәше тулған ир-егеттәргә). Уларға бер күсемһеҙ милек объекты: йорт, фатир йәки бүлмә, гараж йәки машина урыны, хужалыҡ ҡаралтыһы өсөн мөлкәт һалымын түләмәҫкә мөмкин. Ер һалымы буйынса бер ер участкаһының дөйөм хаҡынан 600 квадрат метр кадастр хаҡы күләмендә һалым ҡайтармаһы бирелә. Льгота менән файҙаланыу өсөн 30 апрелгә тиклем һалым инспекцияһына, Күп функциялы үҙәккә йәки ситтән тороп "Физик берәмектәр өсөн һалым түләүсенең шәхси кабинеты" сервисы аша ғариза бирергә кәрәк. Уға Дәүләт хеҙмәттәре порталынан пароль менән инергә мөмкин. Хәбәр иткәнебеҙсә, социаль һалым ҡайтармаһы 30 мең һумға арттырылды.

## АҠРЫН ЙӨРӨҺӘҢ - ШТРАФ!

**Рәсәйҙә автомобилдә аҡрын йөрөгән өсөн штрафтарҙы өс мең һумға тиклем арттырыуҙары мөмкин.**

Бындай башланғыс менән Башҡортостандан Дәүләт Думаһы депутаты, ЛДПР фракцияһы вәкиле Иван Сухарев сығыш яһаны. Бында һүҙ сәғәтенә 30 км тиҙлектә йөрөгән водителдәр һәм машинаға "Аҡрын йөрөүсе транспорт сараһы" махсус ярлығы йәбештермәгән водителдәр тураһында бара. "Махсус билдә ҡуйылмаған аҡрын йөрөүсе транспорт саралары даими рәүештә ҙур аварияларға сәбәпсе була. Шулай уҡ үтә лә әкрен йөрөүселәр арҡаһында башҡа водителдәр уларҙы уҙып китергә мәжбүр була һәм штрафтарға юлыға. Был проблеманы "Таныу билдәһе"нең булыуы хәл итер ине, әммә уны ҡуйырға ашыҡмайҙар, сөнки билдә булмаған өсөн штраф күләме 500 һум ғына. Бындай вайымһыҙ водителдәр үҙҙәренең яуапһыҙлығы өсөн аҡса менән яуап бирергә тейеш", - тип аңлатма бирҙе Иван Сухарев.

*ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ҠАЛА БАШЛЫҒЫ ҺӨЙЛӘЙ



**Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев журналистар менән матбуғат конференцияһы уҙғарҙы. Мэр иң тәүҙә ҡала хакимиәте бинаһында урынлашҡан Ситуация үҙәгенең баш ҡалабыҙҙың хәл-торошон ваҡытында белеп тороп, тейешле ҡарарҙар ҡабул итә алыу өсөн яңы мөмкинлектәр асыуы хаҡында һөйләп, оло экранда сағылдырылған ҡала күренештәренә, графиктар һәм диаграммаларға аңлатмалар бирҙе.**

- Элегерәк был ябай ултырыштар залы булһа, хәҙер ошо үҙәктә ҡалабыҙҙың төрлө системаларынан реаль ваҡыт арауығында алынған мәғлүмәттәр ағымын туплау һәм анализлау ойоштоорола. Уның төп маҡсаты - ҡалала килеп тыуған ситуацияларҙы һәм хәл-ваҡиғаларҙы оператив рәүештә теркәү, ҡала инфраструктураһы менән идара итеүҙең һөҙөмтәлелегенә өлгәшеү. Әйткәндәй, көтөлмәгән хәл-ваҡиғалар була ҡалһа, граждандар шәхсән ошо үҙәккә мөрәжәғәт итә ала, - тине ҡала башлығы.

**(Дауамы 5-се биттә).**

12+

***✓ Ауыл ерҙәрендә йорт ихатаһы һайын тип әйтерлек эт бар, сөнки ул йорт-ҡураны һаҡлай, ниндәйҙер файҙа килтерә. Был инде ҡалалағы кеүек эт һулаған һауаны һулап, эт менән бергә ашап, бергә йоҡлау түгел.***



БЫНАҒАЙЫШ!

**Был турала бик күп яҙҙыҡ инде, әйтерһең дә, бөгөн башҡа мөһим проблемалар юҡ: эт темаһы менән ҡасандан бирле эт була әҙәм балалары. Ул ғына ла етмәй, хатта ки быйыл ғинуар урталарында Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай һынлы Ҡоролтайҙа фатирҙа эт аҫрау буйынса… брифинг үткәрергә мәжбүр булдылар. Ғәҙәттә, көнүҙәк, мөһим мәсьәләләр буйынса ғына була торған был сараға эт мәсьәләһе менән мөрәжәғәт итергә нимә сәбәпсе булды һуң?**



# ЭТ ЙӘНЛЕ ИКӘНҺЕҢ...

Республика Хөкүмәтенең йорт хайуандары аҫрау һәм уларҙы урамда йөрөтөүгә алып сығыу ҡағиҙәләренә ҡарата ҡабул иткән өҫтәмә талаптары халыҡта шаушыу тыуҙырған, имеш. Дөрөҫөн әйткәндә, бөгөн халыҡта эт ҡайғыһы - төштән һуң. Ә бына бөгөн ил сигендә ҡоторонған эткә тиң нацист бандалары енәйәт артынан енәйәт ҡылғанда, уларға ҡаршы аяуһыҙ һәм ҡаты көрәш барғанда, ҡайһы бер ҡатлам кешеләренең фатирҙарында бер генә түгел, ике, өс, бәлки, унан да күберәк эт тотоу өсөн дәүләт һәм хоҡуҡ органдары менән яғалашыуы ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та. Тормоштарын эт менән бергә ашап, бергә йоҡлап үткәрергә ғәҙәтләнгән ҡала халҡының ҡайһы берҙәренән депутаттарға 500-ләп ялыу һәм мөрәжәғәт алынған, имеш. Эт эйәләренә фатирҙарҙа һәм шәхси секторҙа аҫралыусы йорт хайуандары һанын сикләү оҡшап етмәгән икән. Яңы ҡағиҙә буйынса хәҙер һәр бер ҙур, уртаса йәки ике бәләкәй эт йә бесәйгә торлаҡ майҙанының 18 кв метры тура килергә тейеш. Ә шәхси йорттарҙа һәр бер ҙур эткә 200 кв м майҙан талап ителә. БР Дәүләт Йыйылышының әлеге брифингыһында ошо нормаларҙы танырға теләмәгән эт хужаларына депутаттар, власть органдары һәм БР Ветеринария буйынса дәүләт комитеты вәкилдәре аңлатма биргән.

Ошо Дәүләт комитетының хоҡуҡ бүлеге начальнигы Руслан Ниғмәтуллиндың аңлатмаһы буйынса, әлеге мәсьәләгә ҡағылышлы Хөкүмәт ҡарарын ҡабул итерҙән алда башҡа төбәктәр тәжрибәһе өйрәнелгән һәм федераль закондарға ярашлы һандар алынған: "18 квадратты беҙ түшәмдән алмаһыҡ. РФ Торлаҡ кодексы буйынса, фатир унда кешеләр йәшәү өсөн тәғәйенләнгән һәм бер кешегә 18 кв м майҙан тейеш. Был норма эт хужалары хоҡуҡтарын сикләү түгел, ә күпселектә йорт хайуандары хаҡында ла хәстәрлек. Был, тимәк, 45 кв.м майҙанлы уртаса фатирҙа ике ҙур йәки 4 бәләкәй эт торорға мөмкин, тигән һүҙ. Ошо аҙмы ни? Фатирҙы приютҡа әйләндереү кәрәкмәй",- тип һүҙен тамамлай Руслан Ниғмәтуллин.

Әйе, оҡшаймы был кемгәлер, юҡмы - чиновник дөрөҫ әйтә: фатир эттәр өсөн түгел, кешеләр йәшәһен өсөн төҙөлә. Әйткәндәй, шуныһына мең шөкөр, иманға инанған мосолман халҡында үҙең йәшәгән өй эсендә эт тотоу - ул гонаһ, яҙыҡ ғәмәл һанала. Был этте яратмағандан түгел, әлбиттә. Ауыл ерҙәрендә йорт ихатаһы һайын тип әйтерлек эт бар, сөнки ул йорт-ҡураны һаҡлай, хужаһы менән һунарға йөрөй - ниндәйҙер файҙа килтерә, ҡыҫҡаһы, кешенең тоғро дуҫы. Был инде ҡалалағы кеүек эт һулаған һауаны һулап, эт менән бергә ашап, бергә йоҡлау түгел. Бигерәк тә бындай ғаиләләрҙәге балалар йәл, сөнки эт һәм бесәйҙәр менән уйнап үҫкәндә, уларға был хайуандарҙан глистар, лептоспироз, токсоплазмоз, гельминттар, туляремия кеүек паразиттар, хатта ҡотороҡ сире лә йоғоуы ихтимал, сөнки йорт хайуандарын күпме генә ветеринар ҡарауында тотма, тышҡа сығарып йөрөткән арала ла улар башҡа хайуандарҙан, уларҙың экскременттарынан зарарланырға мөмкиндәр.

БР Ветеринария буйынса дәүләт комитеты рәйесе Азат Йыһаншин әйтеүенсә, Хөкүмәт ҡарары әле эштең башы ғына, сөнки киләсәктә йорт хайуандарын иҫәпкә алыу һәм уларҙы идентификациялау тураһында закон ҡабул итеү мәсьәләһе лә тора. "Бөгөн беҙҙә фатирҙарҙа аҫралған 152 мең бесәй һәм 156 мең эт тураһында мәғлүмәт бар: уларҙың эйәләре ветеринария хеҙмәтенә мөрәжәғәт иткән. Ләкин ысынында йорт хайуандары һаны әлеге һандарҙан байтаҡҡа күберәк һәм уларҙың бөтәһе лә берҙәм иҫәп системаһына инергә тейеш. Был беҙгә кемдең эте урамда йөрөп ята һәм сығарып ташланған, йорт хайуандарына вакцинация яһалғанмы, улар дөрөҫ һәм тейешле шарттарҙа тотоламы - шуны контролгә алыр өсөн кәрәк", - ти Азат Йыһаншин. Ул тағы ла быйыл йорт хайуандарын чиплау тураһында закон ҡабул ителәсәге һәм план буйынса тәүге өс йылда чиплау ҡаҙна иҫәбенә башҡарыласағы хаҡында хәбәр итте.

Тик шуныһы аптырата: ниңә эт-бесәй хужаларының яратҡан хайуандары мәнфәғәтенә бөтөн сығымдары ла уларҙың үҙҙәренең шәхси эше булырға тейеш түгел һуң әле? Үҙҙәренең шәхси теләктәрен ҡәнәғәтләндереү хаҡына улар йәмғиәтебеҙҙең башҡа ағзаларына күпме уңайһыҙлыҡтар

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# МӨХӘББӘТЛЕ ЙӘШЛЕК...

## заяға уҙмаһын

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



***Әминә ЯХИНА, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, яҙыусы драматург, Р. Өмөтбаев исемендәге премия лауреаты:*** Йәштәрҙең хәҙер ғаилә ҡорорға ашыҡмауы хәүефкә һала. Беҙҙең заманда 25 йәшлектәрҙең икешәр балаһы үҫер ине. Ултырып киткән "ҡарт ҡыҙ" мөһөрөнән ҡурҡтыҡ беҙ. Әле 30-35-те үтеп киткәндәр парһыҙ йөрөй бирә. Бының сәбәбе ниҙә?

Йәштәрҙең күбеһе беренсе сиратта белем ала һәм иғтибарын карьера үҫешенә йүнәлтә. Шулай уҡ тормошта үҙаллы булыу өсөн, аҡса эшләп, машина, фатир алыу бик мөһим, тип баралар. Бының өсөн күптәр Себер яҡтарына юллана, ҙур ҡалаларҙа эш таба. Йәштәр, шартына килтереп йәшәр өсөн, күңел асыу урындарына йөрөүҙе, сәйәхәттәр ҡылыуҙы, сит илдәрҙе күреүҙе лә маҡсат итеп ҡуя. Мин уларҙы аңлайым, тормош ҡороп, балалар тыуып, ғаилә мәшәҡәттәре баҫа башлаһа, бындай мөмкинлектәр һәр ваҡыт булмаясаҡ.

Икенсе яҡтан, йәштәр араһындағы мөнәсәбәттәр ҙә үҙгәреш кисерә - улар ирекле һәм бойондороҡһоҙ йәшәүҙе хуп күрә. Шуға ла партнерҙар араһында ваҡытлы осрашыуҙар ғәйепкә алынмай. Граждандлыҡ никахы менән йәшәүселәр йылдан-йыл ишәйә. Был осорҙа улар үҙҙәренең партнерҙарына юғары талаптар ҙа ҡуймай, әгәр бергә йәшәү ялыҡтырһа, тиҙ генә айырылышалар, икенсе пар эҙләйҙәр. Оло быуын вәкилдәре өсөн был - сәйер, ауыр ҡабул ителгән күренеш.

Йәштәрҙең ғаилә ҡорорға ашыҡмауының тағы бер сәбәбе - бала саҡта ата-әсәләренең айырылышыу трагедияһын кисереүе, йәки үҙ тиҫтерҙәренең, яратышып өйләнешеүенә ҡарамаҫтан, тиҙ генә айырылышыуы.

Интернет киңлектәренә күҙ һалһаң, "димселәр", "танышайыҡ" тигән сайттарҙа 30, хатта йәштәре 40-тан ашҡан ир-егеттәрҙең үҙҙәренә пар эҙләүен күрәһең. Яратҡан эше, машинаһы, йәшәргә йорто бар, тик тормош иптәше юҡ. Уның инде өйләнеп, балалар үҫтереп йәшәгеһе килә лә ул... Бындай сайттарҙа ҡатын-ҡыҙҙар ҙа осрай,

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың рәсми делегацияһы вәкилдәре менән бергә, Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булғандарҙы иҫкә алып, Минскиҙағы Еңеү монументына венок һалды. Еңеү монументы 1954 йылда Еңеү майҙанында Икенсе донъя һуғышы йылдарында алышҡан Ҡыҙыл Армия яугирҙары һәм партизандар батырлығы иҫтәлегенә ҡуйылған.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан ике яҡташыбыҙҙы генерал Шайморатов миҙалы менән бүләкләне. "Башҡортостан" мотоуҡсылар полкы яугиры Радмир Байегетов һәм Доставалов исемендәге батальондың медицина взводы командиры Арыҫлан Мырҙағолов дәүләт наградаһы менән билдәләнде. Яугирҙарға миҙал республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә тапшырылды.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров беренсе курс студенттары өсөн күләмле фестиваль тураһында белдерҙе. Республика етәксеһе һүҙҙәренсә, сара сентябрҙә Өфөнөң Көрәш һарайында була. "Республиканың мәҙәни тормошона инһендәр, студент тормошоноң үҙенсәлектәре менән танышһындар өсөн беренсе курс студенттарына ла шундай сара ойоштороға булдыҡ", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓"Африка" позывнойлы яҡташыбыҙ, Миңлеғәле Шайморатов исемендәге батальондың пилотһыҙ осоу аппараттары взводы расчеты начальнигы Антон Иванов МХО биләмәһендә ВСУ-ның 350-нән ашыу һалдат һәм офицерын, шулай уҡ дошмандың тиҫтәләгән нығытылған позицияларын юҡ иткән. Кесе сержант Иванов БПЛА взводы ойошторолған көндән алып дрон операторы булып эшләй. Донецк Халыҡ Республикаһы башлығы Денис Пушилин уға Донецк Халыҡ Республикаһы Геройы йондоҙон тапшырған.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин яҡташтарыбыҙҙы дәүләт наградалары һәм маҡтаулы исемдәр менән бүләкләне. Документҡа ярашлы, Республика йоғошло сирҙәр клиник дауаханаһының шәфҡәт туташы Эльвира Төлкөбаева Лука Крымский миҙалына лайыҡ булды. Республика кардиология үҙәге табибы Юлиә Рәхмәтуллина һәм ошо уҡ медицина ойошмаһының бүлек мөдире Тимур Тимербулатов та шундай уҡ награда алды. Республика йоғошло сирҙәр клиник дауаханаһының баш табибы Азат Мөхәмәтйәновҡа "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған һаулыҡ һаҡлау хеҙмәткәре" тигән исем бирелде.

✓"Башинформ" мәғлүмәт агентлығы Махсус хәрби операция биләмәһенә оҙатыу өсөн махсус ҡорамал әҙерләне. "Башҡортостан" мотоуҡсылар полкы яугирҙары өсөн гуманитар йөк Өфөнөң Киров районынан 24-се гуманитар ылау менән бергә китә. "Башинформ"дан яугирҙарға ике Wi-Fi-роутер, өс коммутатор һәм башҡалар оҙатыла. Улар тепловизорҙар, дрондар һәм радиоэлектрон көрәш саралары кеүек үк, хәрби бурыстарҙы үтәгәндә алғы һыҙыҡта бик мөһим.

✔ ***Совет осоронда эшселәр, йәш белгестәр өсөн ятаҡтар булыуы ҡайһылай ҙа яҡшы ине. Бер ойошмала эшләп, сиратҡа торһаң, бер нисә йылдан фатирлы ла булаһың.***



килтерә! Фатирында эт тотҡан кешеләрҙең күршеләренә Хоҙай түҙем бирһен. Бына әле яҙ яҡынлаша. Тиҙҙән тирә-яҡ: урам буйҙары, тротуар һәм балалар майҙансыҡтары шул эттәр өйҙән алып сыҡкан "күстәнәс"тәр менән "ашлана" һәм аяҡ баҫыр таҙа урын ҡалмай башлар. Өлкәндәр һаҡ йөрөргә тырышһа ла, балалар бындай нәмәгә иғтибар итмәүе бар. Был ытырғаныс һәм йәмһеҙ күренеш кенә түгел, ә кешеләр һаулығына хәүеф янаусы ла, сөнки һаҡһыҙҙан әлеге "күстәнәс"кә баҫып, аяҡ кейемен бысратырға, өйгә инфекция, паразит эйәртеп индерергә мөмкин. Ниңә һуң беҙҙең закон сығарыусылар иң тәүҙә ана шул эттәрҙе тотоуҙың санитар-гигиена шарттарына талапты көсәйтмәй? Әлеге шул брифингта ла был хаҡта һүҙ булырға тейеш ине түгелме?

Эт хужалары власть органдары ҡарарҙарына ризаһыҙлыҡ белдерергә белһә лә, үҙҙәре алдына ҡуйылған талаптарҙы һанға ла һуҡмай. Мәҫәлән, Өфө ҡалаһы Сипайлово биҫтәһендәге 130-сы мәктәптең физкультура дәрестәре үткәрелә торған спорт уйындары һәм ял комплексы кәртәләнеп алыуға ҡарамаҫтан, был урын иртәле-кисле эттәр йөрөтөү майҙанына әүерелә. Ә бит "Хайуандар менән яуаплы мөғәмәлә итеү һәм РФ закон акттарының ҡайһыларына үҙгәрештәр индереү хаҡында"ғы законда әйтелеүенсә, күп ҡатлы йорттарҙың лифттарында һәм дөйөм ҡулланыу урындарында, йорттар алдында, балалар майҙансыҡтарында һәм спорт майҙандарында эттәрҙе йөрөтөү тыйыла, шул уҡ ваҡытта ошо уҡ законға ярашлы, дөйөм файҙаланыу биләмәләрендә хужалары эттәренең экскременттарын йыйыштырып, таҙартып йөрөргә тейеш, тип тә әйтелә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ваҡ тема түгел был шулай ҙа - эт яратыусыларҙың кешелек дәрәжәһе, әхлаҡ кимәле һәм тәртип күрһәткесе лә. Тик ҡайҙа инде ул беҙҙә ундай мәҙәнилек өлгөһө! Төшөңдә лә күрмәҫһең! Ә бына был турист күҙәтеүенә шулай уҡ ышаныуы ҡыйын, ләкин был хаҡ: "Сит илдәрҙән килеүселәр япондарҙың итәғәтлегенә ғәжәп ҡыла: эттәрен йөрөтөргә алып сығыусы япондар үҙҙәре менән бер шешә һыу һәм моҡсай ҙа ала, сөнки эттәре асфальт өҫтөнә "эштәрен" ҡылһа, уны моҡсайға төрөп ала, ә тротуарҙы һыу менән йыуып, таҙартып китә..." Беҙҙең зооһөйөүселәргә шулай тип әйтке килә: этеңде яратаһың икән, бысрағын да таҙарт һәм уны, ҡартайҙы йә баланы сапсыны-тешләне тип, кәрәкмәгән әйберҙәй, урамға сығарып ташлама, хайуандар менән дуҫлығыңа тоғро ҡал!**

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ҡайһыларының ике-өс балаһы ла бар. Бына ошоларҙы күрһәм, "Сиңерткә менән ҡырмыҫҡа" басняһы иҫкә килеп төшә. Нисек кенә әйтһәң дә, һәр нәмәнең үҙ ваҡыты шул.

Тормош бер урында тормай, элекке йолалар, ҡараштар үҙгәреп кенә ҡалмай, кешеләр ҙә хәҙер бит икенсе. Ҡалаларҙа ғына түгел, һәр ауылда йортҡа газ үткән, һыу индерелгән, компьютерҙар, смартфондар йәштәрҙең генә түгел, һәр баланың, шулай уҡ ололарҙың ҡулында. Кер һәм һауыт-һаба йыуыу машиналары, аҡыллы саң һурҙырғыстар менән ҡулланыусылар бик күп йорт мәшәҡәттәренән азат. Ҡала ерлегендә йәшәгән ир-аттар өсөн был бик уңайлы, элек ҡатын елкәһенә һалынған эштәрҙе уңайлы машиналар башҡара, ә инде йортта кран эшләмәһә, унитаз тығылһа, кер машинаһы боҙолһа, ир-егеттәрҙең кәрәге юҡ: телефондан шылтыратһаң, ундай эштәрҙе башҡарыусылар һә тигәнсе килеп етә, аҡсаң ғына булһын.

Хөкүмәт тарафынан йәш ғаиләләрҙе яҡлау өсөн бик күп программалар, проекттар ҡабул ителә. Улар күберәк декреттағы ҡатын-ҡыҙҙарға, беренсе, икенсе тыуған балаларға Әсәлек капиталы кеүек матди ярҙамдарҙан тора. Әлбиттә, бала тыуғас, һәр ғаиләнең сығымдары арта, уныһы инде - икенсе мәсьәлә. Яңы өйләнешкән йәштәрҙең төп проблемаһы иһә - бергә йәшәргә фатир булмауы. Ата-әсәһе хәллеләр - бәхетле, туйға уларға, ғәҙәттә, бүләккә фатир төшә. Өйләнешкән йәштәрҙең күберәге ҡуртымға алынған фатирҙа көн күрә. Ә инде бала тыуһасы?.. Әле тормошҡа күнегеп етмәгән йәштәр өсөн был - иң ауыр һынау. Башҡортостанда яҡшы түләүле эш урындары әҙ, ирҙең генә эш хаҡына өс кешене аҫырауы еңелдән түгел, ҡуртым өсөн ваҡытында иҫәпләшергә, ашарға, кейенергә кәрәк, баланың да сығымдары байтаҡ. Шул уҡ ваҡытта ял итке лә килә, уңайлылыҡ өсөн машинаһы ла булһын.

Совет осоронда эшселәр, йәш белгестәр өсөн ятаҡтар булыуы ҡайһылай ҙа яҡшы ине. Бер ойошмала эшләп, сиратҡа торһаң, бер нисә йылдан фатирлы ла булаһың. Хәҙер завод-фабрикалар, эшсе көстәр етешмәй, тип зарлана. Ниңә йәштәр өсөн элекке ятаҡтарҙы булдырмаҫҡа? Был уларҙың ҡулынан килә бит. Тыуған ерендә эш урындары булһа, ваҡытлыса торлаҡ мәсьәләһе хәл ителһә, йәштәр Себер яҡтарына, йәки ҙур ҡалаларға юлланмаҫ ине, бәлки, ваҡытында ғаилә ҡороп, балалар үҫтереп, бәхеткә сумып йәшәрҙәр ине.

Бөтә йәштәрҙе лә бер ҡалыпҡа һалып булмай, уларҙың араһында төрлөләре бар: ихтиярлылары, ихтыярһыҙҙары, үҙһүҙлеләре, маҡсатлылары, ваҡыт ағышына буйһонғандары, кеше һүҙенә ҡолаҡ һалыусылары, ата-әсәһенең әйткәненән үтмәгәндәре. Йәш саҡ - иң матур ваҡыт, мөхәббәтле, һөйөү-һөйөлөүгә сорналған осор, шуны иҫтә тоторға кәрәк, тип әйтер инем. Тик ул бик тиҙ үтә. Ана шул ваҡытта ғаилә ҡорған йәштәр бәхетлерәктер тип уйлайым.

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ЗЕЛЕНСКИЙҒА "ПЕРӘНИК" ЭЛӘГЕРМЕ?

● Йәкшәмбе - 9 февраль көнөнөң төп яңылығы Владимир Путин менән Дональд Трамптың телефондан һөйләшеү факты булды. Дөрөҫ, "Интерфакс"ҡа һылтанып, Коммерсант.ру яҙып сығыуынса, Рәсәй Президентының матбуғат секретары Д.Песков ике ил президентының телефондан һөйләшеүен "булды" тип тә, "юҡ" тип тә әйтмәне. Һәр ваҡыттағыса, аныҡ ҡына аңлатма биреүҙән ялтанды. Дональд Трамп New York Post гәзитенә белдереүенсә иһә, Путин менән һөйләшеү булған һәм һүҙ Украина конфликтын көйләү хаҡында барған. Журналистарҙың аныҡлауҙы талап иткән һорауҙарына Трамп шулай уҡ өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күргән. 10 февралдә Луизианаға эш сәфәрендә Трамп Рәсәй лидеры Владимир Путин менән "уңайлы бер ваҡытта" осрашыуға иҫәп тотоуын әйткән. РФ Дәүләт Думаһының халыҡ-ара эштәр буйынса комитеты рәйесе урынбаҫары Алексей Чепа белдереүенсә, ике президенттың телефон аша аралашыуына нигеҙләнеп, Трамп Зеленскийҙы Вашингтонға саҡыртып һөйләшергә ниәтләй, имеш.

Әйткәндәй, Трамп хакимиәтенең яңы ғына төҙөлгән составы Украина конфликтын тамамлау мәсьәләһе буйынса төрлө ҡараштағы ике төркөмгә бүленде: беренселәре Рәсәйгә баҫымды көсәйтеү яҡлы булһа, икенселәре Киевҡа ярҙамды сикләү яғында. АҠШ тыныслыҡ килешеүе төҙөгәндә Киев яғына хәүефһеҙлек гарантиялап, шуның иҫәбенә Украинаның һирәк осрай торған ҡаҙылма минералдарына һәм газға өмөт итә, имеш. Бизнесмен Трамп быының өсөн Украинаға 500 млн доллар вәғәҙәләй. Яңылыҡтар Рәсәй мәғлүмәт агентлығы күҙәтеүсеһе яҙып сығыуынса, АҠШ Рәсәйгә хәрби хәрәкәттәрҙе һәм ут асыуҙы туҡтатырға, Украина менән Рәсәй араһындағы зонала Евросоюз һәм Британия ғәскәрҙәре тороуға ризалыҡ бирергә тәҡдим итә һәм шуның иҫәбенә Киевтың "яулап алынған Рәсәй территорияларын" таныуына йоғонто яһарға әҙер булыуын белдерә. Трамп Киевҡа ла "перәник" вәғәҙәләй: берәй биш йылдан Евросоюзға ағзалыҡ, шуға өҫтәп, хәрби һәм финанс ярҙамы күрһәтеүҙе дауам итеү.

Эйе, Трамптың Украина конфликтын "көйләү" теләге артында тап АҠШ-тың үҙ мәнфәғәттәре хаҡына иҫәп-хисап һәм бизнес ҡыҙыҡһыныуы йәшеренгәнлеге билдәле. Тик бына сәйәсмән Иван Мезюхо РЕН ТВ каналы менән әңгәмәһендә белдереүенсә, Украина ҡаҙылма байлыҡтарына ҡағылышлы Трамп үҙенең белекһеҙлеген, йә булмаһа алдашыуын күрһәтте. Ысынында иһә, Украина территорияһындағы һирәк осрай торған минералдар хаҡындағы мәғлүмәт ҡабартылып күрһәтелә һәм ул, асылда, АҠШ өсөн, бәлки, мөһим дә түгелдер. Өҫтәүенә, был ятҡылыҡтарҙың күпмелер өлөшө Рәсәй Федерацияһы территорияһында һәм тиҙҙән беҙҙең ғәскәр тарафынан азат ителәсәк ерҙәрҙә урынлашҡан.

● Күпте күргән данлы һәм шанлы Курск ерендә быйыл Бөйөк Ватан һуғышы тарихында совет һалдаттарының тиңһеҙ ҡаһарманлыҡ өлгөһөнә әүерелгән Курск дуғаһы һуғышына (1943 йылдың 5 июленән 23 августына тиклем) 82 йыл туласаҡ. Курскиҙа был күренекле дата йыл һайын тантаналы билдәләнә. Ошо һуғышта ғына ла 180 совет һалдаты һәм офицеры Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була. Был алыш Бөйөк Ватан һуғышы барышында мөһим һынылыш булды һәм ошо еңеүҙән һуң фашистар армияһының кикереге шиңә. Курскиҙағы бөгөнгө хәлдәр менән ниндәйҙер оҡшашлыҡ бар түгелме бында?

РФ Оборона министрлығы хәбәр итеүенсә, "Төньяҡ" ғәскәр төркөмө тарафынан 9 февралгә ҡарата Украина Ҡораллы көстәренең өс контрһөжүме кире ҡағыла. Рәсәй Ҡораллы көстәре 16 тораҡ пункты райондарында, шул иҫәптән, Колмаков, Суджа һәм Көньяҡ пункттарында дошмандың 12 бригадаһы төркөмөн юҡ итеүгә өлгәшә. Бынан тыш, беҙҙең авиация менән артиллерия Курск өлкәһенең 15 тораҡ пуктында һәм Сумы районындағы 8 ауылда нацистарҙың тере көстәрен һәм техникаһын ҡыйрата. РФ Оборона министрлығы хәбәренә ҡарағанда, Рәсәй Ҡораллы көстәре Курск өлкәһендәге Украина ғәскәре төркөмдәрен эҙәрлекләүҙе дауам итә. Тәүлек эсендә дошман 320 һалдатын, ә ошо йүнәлештәге хәрби бәрелештәрҙә бөтәһе 58 870 кешеһен юғалтты. Ләкин әлегә хәл ҡатмарлы ҡала. ФедералПресс мәғлүмәтенә ҡарағанда, дошман Суджа районындағы хәрби төркөмдәрен резервистар менән нығытыу сараһын күрә, ләкин беҙҙең егеттәр уларҙың ҡыҫымына ныҡлы ҡаршы тора һәм Суджаның бер нисә тораҡ пункты тулыһынса нацистарҙан таҙартылған. Көсөргәнешле алыштар дауам итә, шулай ҙа ҡасандыр фашистик Германия вермахтының баштан-аяҡ ҡоралланған 50 дивизияһы - миллиондан ашыу һайланма һалдаты, 19 мең орудие һәм миномеtы, 2 мең 758 танкы, 2 мең самолеты менән Курскиға ташланған немец фашистарын ҡыйратҡан шанлы Курск ере укрофашистарға ғына бирешмәҫ, тигән ышаныс егеттәребеҙгә көс бирә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостанда М-7 һәм Р-240 автомобиль трассалары 2025 йылда тулыһынса кесә телефоны бәйләнеше менән тәьмин ителә. Республика дәүләт идаралығының һанлы үҫеш министры Геннадий Разумикин Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә ошо хаҡта хәбәр итте. Бынан алда "Башинформ" Белорет трассаһы участкаһында сымһыҙ телефон бәйләнеше барлыҡҡа килеүе тураһында яҙғайны.

✔2023 йылдың 13 февралендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың хәтерен мәңгеләштереү тураһында указға ҡул ҡуйғайны. Өфөлә Башҡортостандың Беренсе Президентына һәйкәл асыу тантанаһы уҙы, ул йәшәгән һәм эшләгән ике йортта (Энгельс һәм Беренсе май урамдарында) мемориаль таҡтаташтар ҡуйылды. Башҡортостандың Фәндәр академияһы республиканың Беренсе Президенты тураһында биографик энциклопедия сығарҙы. Ә Өфөлә Радий Хәбировтың шәхси ҡарары менән Мортаза Рәхимов төҙөй башлаған "Әр-Рәхим" мәсете төҙөлөшө тергеҙелде.

✔Башҡортостанда насар ишеткән кешеләр өсөн "Беҙ бергә. Спорт" Бөтә Рәсәй ҡышҡы спартакиадаһы үтте. Сарала илдең 30 төбәгенән 800-ҙән ашыу иң көслө спортсы ҡатнашты. Ярыштарҙың төп өлөшө Өфөлә үтһә, айырым йүнәлештәр буйынса ярыштар Ишембайҙа һәм Әбйәлил районында ойошторолдо.

✔2024 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостанда 3 миллион 348 мең "квадрат" торлаҡ файҙаланыуға тапшырылған. Был хаҡта РБК-Өфө Росстатҡа һылтанма менән хәбәр итә. Баҫма мәғлүмәттәре буйынса, был 2023 йылғы күрһәткестәрҙән 1 процентҡа юғарыраҡ. Уҙған йылдың декабрендә генә республикала 534,7 мең м2 торлаҡ сафҡа индерелгән, уларҙың 115 меңе - шәхси төҙөүселәргә, ә дөйөм күләмдән 2,3 миллион м2 халыҡҡа тура килә. Башҡортостан Рәсәй субъекттары араһында торлаҡты сафҡа индереү буйынса илдә - һигеҙенсе, Волга буйы федераль округында икенсе урынды биләй.

✔Башҡортостанда 2024 йылдың ғинуарынан декабренә тиклем сәнәғәт етештереүе күләме 2023 йылға ҡарата 5,4 процентҡа артҡан, тип хәбәр итә Башстат. Уҙған йылда иң яҡшы динамика эшкәртеү секторында 8,1 процент булһа, энергетикала үҫеш 1,3 процент тәшкил иткән. Производство тармаҡтары араһында аҙыҡ-түлек (2023 йылға ҡарата +38,4 процент), башҡа транспорт саралары һәм ҡорамалдар (+28,4 процент), шулай уҡ электр ҡорамалдары (+23 процент) етештереүҙә иң юғары үҫеш билдәләнгән. Күн һәм күн әйберҙәр етештереү кәмегән (-27,9 процент).

***✓ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров делегацияны йылы ҡабул итеүҙәре өсөн Белоруссия Президентына рәхмәт белдерҙе, шулай уҡ дәүләт етәксеһен 2025 йылдың ғинуарында үткән һайлауҙарҙа еңеүе менән ҡотланы.***

ҠЫҪҠАСА

# АҠНАЗАРОВТЫ ХӨРМӘТЛӘП...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Баймаҡта күренекле дәүләт эшмәкәре, 1962-1986 йылдарҙа Башҡорт АССР-ның Министрҙар советы рәйесе Зекериә Аҡназаровҡа бюст асыу тантанаһында ҡатнашты.** "Бөгөн беҙ сағыу шәхес, Башҡортостандың һоҡланғыс улы Зәкәриә Шәрәфетдин улы Аҡназаровты хөрмәтләп иҫкә алабыҙ. Ул бик күркәм яҙмышлы кеше булды. Сирек быуат тиерлек Башҡорт АССР-ның Министрҙар советына етәкселек итте. Был осор республикабыҙҙың Рәсәйҙең алдынғы ауыл хужалығы, сәнәғәт төбәге булараҡ формалашыуының иң ҡатмарлы йылдарына тура килде. Был ваҡытта ҡатмарлы ҡарарҙар ҡабул итергә кәрәк ине, етәкселек һәләте, граждандарлыҡ, кешелекле ҡаһарманлыҡ талап ителде. Колледж етәкселегенә уҡыу йортона Аҡназаров Зәкәриә Шәрәфетдин улы исемен биреү инициативаһы өсөн рәхмәт белдерәм. Ошондай арҙаҡлы шәхестәр тураһында хәтерҙе һаҡлау бик мөһим. Уларҙың нисек йәшәгәнен белеү беҙҙе көслөрәк итә, йәштәребеҙҙе рухландыра", - тине Радий Хәбиров.

✓**Һуңғы йылдарҙа республика социаль өлкәлә хеҙмәт күрһәтеү буйынса Рәсәй төбәктәре араһында өс лидер иҫәбенә инә.** "Социаль хеҙмәтләндереү системаһында 5 дәүләт учреждениеһы, уларҙың филиалы бар. Шулай уҡ дәүләт-шәхси партнерлыҡ сиктәрендә ойошторолған дәүләткә ҡарамаған 5 пансионат эшмәкәрлек алып бара. Улар ярҙамында 61 эш урыны булдырылған. Йыл һайын был пансионаттарҙа 170-кә тиклем өлкән йәштәге граждандар хеҙмәтләндерелә, - тип белдерҙе республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә республиканың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрының беренсе урынбаҫары Юрий Мельников. - Шәхси пансионаттар дәүләт һәм дәүләткә ҡарамаған ойошмалар араһында конкуренцияны үҫтереүгә булышлыҡ итә, һөҙөмтәлә был хеҙмәтләндереү сифатын күтәреүгә, шулай уҡ социаль хеҙмәтләндереү системаһында сиратты кәметеүгә һәм ғәмәлдәге дәүләт учреждениеларында халыҡтың артыуына килтерә".

✓**2024 йылда рәсәйҙәрҙең күпме ҡымыҙ эскәне билдәле булды. Ҡулланыусылар араһында Волга буйы федераль округы лидер булып тора: ярты миллион литр самаһы.** Былтыр Волга буйы федераль округында йәшәүселәр 483 мең литрға яҡын ҡымыҙ эскән. Был иһә тотош илдәге күләмдең (900 мең литрға яҡын) яртыһынан ашыуырағы, тип хәбәр итә РИА Новости "Намыҫлы билдә" тамғалау системаһы операторына һылтанма менән. Волга буйы федераль округының беренсе урынды биләүенә ғәжәпләнәһе түгел, сөнки унын составында күп ҡымыҙ етештергән Башҡортостан бар. Уҙған йылдың 9 айында ғына бейә һөтөнән 800 мең литрҙан ашыу эсемлек әҙерләнгән. Продукция республикабыҙҙан ситкә, шул иҫәптән экспортҡа сығарыла. Илдә ҡымыҙ ҡулланыу арта: 2024 йылдың декабрендә рәсәйҙәр 95 мең литр ҡымыҙ һатып алған - 2023 йылдың декабренә ҡарағанда был 67 процентҡа күберәк.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БЕЛАРУСТАР ИЛЕНДӘ...



**Республика етәксеһе Радий Хәбиров етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһы Беларусь Республикаһында булып ҡайтты.**

Минскиҙа Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Беларусь Республикаһы Президенты Александр Лукашенко, Рәсәй Федерацияһының Беларусь Республикаһындағы Ғәҙәттән тыш һәм тулы хоҡуҡлы Илсеһе Борис Грызлов, Беларусь Премьер-министры Роман Головченко менән эшлекле осрашыуҙар үткәрҙе.

Александр Лукашенко билдәләүенсә, Белоруссия менән Башҡортостан араһында яҡшы мөнәсәбәттәр булдырылған, бер нисә берлектәге технологик проект ғәмәлдә. Улар иҫәбендә - берлектә тракторҙар, троллейбустар, трамвайҙар һәм башҡа техника етештереү. Александр Лукашенко шулай уҡ тауар әйләнешен артабан үҫтереү потенциалын юғары баһаланы, был осраҡта аҙыҡ-түлек тауарҙары һәм еңел сәнәғәт изделиелары сегменты күҙ уңында тотола. "Башҡортостан - беҙҙең өсөн Рәсәйҙең бик мөһим төбәге, унын менән хеҙмәттәшлек итергә теләйбеҙ. Беренсенән, ул бик үҫешкән, алдынғы. Икенсенән, был Рәсәйҙең Европа биләмәһендәге үҙәге һәм, әгәр һеҙҙә эшләйбеҙ икән, күрше төбәктәрҙә лә эшләйәсәкбеҙ, тип иҫәпләргә мөмкин. Әгәр ниндәйҙер мәсьәләләр буйынса килешһәк, беҙҙең үҙ йөкләмәләребеҙҙе мотлаҡ үтәребеҙҙә шикләнмәгеҙ", - тине Александр Лукашенко.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров делегацияны йылы ҡабул итеүҙәре өсөн Белоруссия Президентына рәхмәт белдерҙе, шулай уҡ дәүләт етәксеһен 2025 йылдың ғинуарында үткән һайлауҙарҙа еңеүе менән ҡотланы. "Был бик мөһим ваҡиға, тип иҫәпләйбеҙ - Белоруссия өсөн генә түгел, ә дөйөм алғанда ике дәүләтебеҙ өсөн дә", - тине Радий Хәбиров.

# ТӨП МАҠСАТЫБЫҘ...

**Башҡортостан Башлығы республикабыҙҙың Белоруссия менән хеҙмәттәшлегенең төп маҡсаты сәнәғәт кооперацияһы булыуын әйтте.**

Беларусь Республикаһы - төп тышҡы иҡтисади партнер ғына түгел, сөнки мәҙәниәт, гуманитар, социаль өлкәләрҙә лә төрлө яҡлы хеҙмәттәшлек үҫешкән, тип билдәләне ул. Шунан сығып, мөнәсәбәттәрҙе үҫтереүгә етди иғтибар бирелә. " Һис шикһеҙ, беренсеһе - тауар әйләнеше, һәм беҙ унын үҫеше өҫтөндә әүҙем эшләйбеҙ. Уңыштар һәм бурыстар бар. Атап әйткәндә, һуңғы йылдарҙа Белоруссиянан Башҡортостанға импорттың артыуын теркәйбеҙ, һәм был бик ҡыуаныслы", - тине Башҡортостан Башлығы.

Санкциялар оппоненттарға көтөлмәгән рәүештә йоғонто яһаны: республикалар тағы ла яҡынайҙы, тағы ла һөҙөмтәлерәк хеҙмәттәшлек башланды, тип билдәләне ул. Сәнәғәт кооперацияһы сиктәрендә 350-нән ашыу төрлө изделиелар барлыҡҡа килде. Был продукция Башҡортостан менән Беларусь предприятиеларының берлектәге хеҙмәте иҫәбенә формалаша - импортты алмаштырыу буйынса бурыс шулай тыныс һәм ышаныслы үтәлә. Рәсәй Федерацияһының Федераль таможня хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса, 2024 йылдың ғинуар-ноябрь айҙарында Беларусь Башҡортостандың тышҡы сауҙа әйләнешендә 5,4 процент өлөшө булған контрагент илдәрҙең тәүге унау иҫәбенә инә. Башҡортостан менән тышҡы сауҙа әйләнешенең дөйөм күләмендә Беларусь Республикаһы менән экспорт өлөшө - 46,9 процент, импорт өлөшө - 53,1 процент. "Беҙ Белоруссиялағы коллегаларыбыҙ менән 2022-2024 йылдарға төҙөгән юл картаһы сиктәрендә эшләйбеҙ. Хәҙер 2025-2027 йылдарҙа хеҙмәттәшлек итеүгә иҫәпләнгән яңы юл картаһы бар", - тип билдәләне республика Башлығы.

# СПОРТҠА!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәйҙең спорт министры Михаил Дегтярёв менән осрашты һәм унын менән Башҡортостанда спортты үҫтереү мөмкинлектәрен тикшерҙе. Был хаҡта Радий Хәбиров социаль селтәрҙә хәбәр итте.**

"Беҙ ысынлап та спортты үҫтерәбеҙ, яҡшы уңыштарыбыҙ бар. Ил Президенты Владимир Путин 2030 йылға республикала спорт менән даими шөғөлләнгән граждандарҙың өлөшөн 70 процентҡа еткереү бурысын ҡуйҙы. Әле беҙҙә был күрһәткес - 61,8 процент. Ошо бурысты үтәү өсөн яңы спорт ҡоролмаларын төҙөү эшен дауам итеү мөһим. Әлбиттә, бында Рәсәйҙең спорт министры ярҙамы кәрәк", - тип билдәләне республика етәксеһе.

Хәҙерге ваҡытта Башҡортостанда 16 ҙур спорт объекты төҙөлөшө бара, тип өҫтәне ул. Тиҙҙән был исемлеккә еңел атлетика манежы һәм олимпия резервындағы училище индерелергә тейеш. "Рәсәй - спорт державаһы" форумы барышында мин ил Президентына Өфөлә еңел атлетика манежын һәм олимпия резервындағы училище төҙөүҙә ярҙам күрһәтеүен һорап мөрәжәғәт иттем. Владимир Владимирович беҙҙе хупланы. Шуға күрә әле алдыбыҙҙа ғәйәт ҙур эш тора. Дөйөм көс менән уны төҙөп бөтөрбөҙ тип ышанабыҙ", - тип пландары менән уртаҡлашты Радий Хәбиров.

# УРҒАҘАЛА...

**Баймаҡ районының Урғаҙа ауылында социаль-мәҙәни үҙәк асылды. Уны асыу тантанаһында Башҡортостан Башлығы ла ҡатнашты.**

"Минеңсә, ҙур, күркәм мәҙәниәт йорто ҡалҡып сыҡты. Балаларға художестволы үҙешмәкәрлек, сәнғәт менән шөғөлләнеү өсөн мөмкинлектәр бар. Тамаша залы ла ҙур, мәҙәниәт министры беҙҙең театрҙар һәм филармония артистары концерттар, спектаклдәр менән гастролгә килер тип вәғәҙәләне. Бында тормош ҡайнап торорға тейеш. Урғаҙала һыу менән тәьмин итеү мәсьәләһен хәл итергә кәрәк әле. Баймаҡ районында егәрле халыҡ йәшәй, беҙ районға үҫешергә ярҙам итәсәкбеҙ", - тине Радий Хәбиров.

Республика етәксеһе социаль-мәҙәни үҙәкте лә ҡараны, үҙәк хеҙмәткәрҙәре менән аралашты, улар Радий Хәбировҡа күптән көтөлгән бүләк өсөн рәхмәт белдерҙе. "Бында балалар өсөн бөтә шарттар ҙа бар, улар беҙҙең түңәрәктәргә ҙур теләк менән йөрөй, өлкәндәр ҙә шөғөлләнергә килә", - тип билдәләне хеҙмәткәрҙәр. "Ауыл ҙур, өс меңгә яҡын кеше йәшәй, шуға күрә, әлбиттә, бында клубһыҙ тормош юҡ. Был, асылда, ауыл клубы түгел, ә социаль-мәҙәни үҙәк, бында балалар музыка мәктәбе, художество мәктәбе, спорт зонаһы бар. Халыҡҡа йөрөүе уңайлы булһын өсөн бына шундайҙарҙы төҙөргә кәрәк. Эргәлә генә мәктәп, иң мөһиме - методистар ҙа, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре лә бар", - тип яуап бирҙе Радий Хәбиров "Башинформ" журналисының һорауына.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Урғаҙа ауылында Махсус хәрби операцияла һәләк булған Ринат Сәйфетдинов, Рәсүл Һибәтуллин, Ғәҙел Иҫәнгилдин, Булат Буранғолов, Айса Сәлимов, Илмар Муралиевтың ғаиләләре менән осрашты. Республика етәксеһе һәләк булған хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең ата-әсәләре, хәләл ефеттәре һәм балаларының ҡайғыһын уртаҡлашты һәм уларға яугирҙар үлгәндән һуң бүләкләнгән генерал Шайморатов орденын тапшырҙы.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Белорет районының тау саңғыһы спорты буйынса олимпия резервында шөғөлләнеүсе Башҡортостан фристайлсыһы Святослав Белянский Рәсәй кубогының беренсе этабында көмөш миҙал яуланы. Хәбәр итеүҙәренсә, йәш спортсы слоуп-стайл дисциплинаһында һөҙөмтәгә өлгәште. Фристайл буйынса Рәсәй кубогының беренсе этабы Силәбе өлкәһенең Солнечная Долина ҡалаһында уҙҙы, тип билдәләнеләр министрлыҡта.

✓Урал аръяғында быйыл тәүге "батша игеҙәктәре" тыуған. Был хаҡта Сибайҙың үҙәк ҡала дауаханаһынан хәбәр иттеләр. Баймаҡ районының Ғүмәр ауылынан 23 йәшлек Айгизә Юлыеваның улы һәм ҡыҙы донъяға килгән. "Йәш әсә һәм унын тормош иптәше игеҙәктәр көтөүе тураһында ярты йыл элек үк белгән. Планға ярашлы ультратауыш менән тикшереү барышында ата-әсәгә ике бала буласағын әйткәндәр. Сабыйҙар тәбиғи юл менән тыуған, күп бала көткәндә бындай күренеш һирәк осрай", - тип билдәләнеләр Сибай дауаханаһында. Юлыевтар өсөнсө һәм дүртенсе тапҡыр ата-әсә булған. Бәләкәстәрҙе өйҙә Ғәзиз ағаһы һәм Айгүзәл апаһы көтә.

✓Ил эсендә Башҡортостан игенен һатыу өс тапҡырҙан ашыуға артҡан. Әгәр 2024 йылдың ғинуарында Рәсәйҙең 13 төбәгенә 20 мең тонна иген һәм уны эшкәртеү продукттары оҙатылһа, быйыл ғинуарҙа илдең 18 субъектына яҡынса 72 мең тонна ебәрелгән. Республикабыҙ игенен Краснодар һәм Ставрополь крайҙары, Ленинград, Мәскәү, Ростов, Белгород, Курск өлкәләре предприятиелары, Үҙәк Рәсәй һәм күрше төбәктәр һатып алған. Йыл башынан Башҡортостандан 30 мең тонна иген экспортҡа оҙатылған.

✓Ғаиләләр һәм ауырлы ҡатындар февралдән арттырылған берҙәм пособие ала башлай, тип иҫкә төшөрҙөләр Соцфондта. Ғинуар өсөн пособие "Мир" карталарына 3 февралдә күсте. Рәсәй почтаһы курьерҙары 3 февралдән 25-енә тиклем тарата. 2025 йылдың 1 ғинуарынан Рәсәйҙә йәшәү минимумы дәүмәле 15 процентҡа арттырылды. Берҙәм пособие күләме лә шуға бәйле - 50 процент, 75 процент йәки 100 процент. Индексациянан һуң пособие, төбәккә ҡарап, уртаса 1 меңдән 2 мең һумға тиклем артты. Бынан алда Соцфонд берҙәм пособиены иҫәпләү схемаһын аңлатҡайны. Дөйөм алғанда, социаль түләүҙәр инфляция кимәлендә арттырыла.

✓Башҡортостанда "Рәсәйҙең почетлы донорҙары" исеменә лайыҡ булған 11,2 меңдән ашыу кешегә 18 мең һумдан ашыу аҡса түләнә. Башҡортостандың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова һүҙҙәренсә, түләүгә "Рәсәйҙең почетлы доноры" һәм "СССР-ҙың почетлы доноры" исеменә лайыҡ булған граждандар иҫәп тота ала. Аҡса 2025 йылдың 1 апреленә тиклем күсерелә. Хәбәр иткәнебеҙсә, Башҡортостанда донорҙар бер йылда 73 мең тапҡыр ҡан тапшырған.

✓ Өфөлә "Кеше эҙләйем" тигән акцияны ике тапҡыр ойоштороҙоҡ. Өфө кешеләре хужаһыҙ ҡалған йорт хайуандары өсөн ике тонна аҙыҡ йыя алды, өс тиҫтәгә яҡын эт яңы хужаларын тапты.



ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ҠАЛА БАШЛЫҒЫ ҺӨЙЛӘЙ

(Башы 1-се биттә).

Ратмир Мәүлиев билдәләүенсә, былтыр республикабыҙ баш ҡалаһында байтаҡ ҡына социаль объекттар төҙәлә йә иһә реконструкциялана, парк һәм скверҙарҙың яртыһынан күберәге төҙөкләндерелә, Көнсығыш сығыу юлы, Зинино юл үткәргесе сифҡа индерелә, Шакша күпере ремонтлана. Шулай уҡ оҙонлоғо 117 саҡрым (уның 35-е урман аша үтә) булған "Өфө муйынсағы" проекты буйынса күләмле эштәр башҡарыла. Был эштәр баш ҡаланы тағы ла күркәмерәк итә.

Былтыр, мәҫәлән, Өфөгә килеүсе туристар һаны 50 процентҡа артҡан. Баш ҡалабыҙ ваҡиғалы туризм ҡалаһы булып танылыу тапһа, 2025 йылда уға "Балалар туризмы баш ҡалаһы" исеме бирелә. "Меморандум" граффити фестивале сиктәрендә ҡалабыҙға һәм уның тарихына бәйле 78 граффити төшөрөлә. Салауат Юлаев проспекты аша һалынған күперҙәрҙә һәм юл үткәргестәрҙә махсус архитектура-нәфис яҡтыртҡыстар монтажлана.

Ҡала хакимиәте башлығы артабан журналистарҙы 2025 йылда 17 программа буйынса ниндәй эштәр башҡарыласағы хаҡында ҡыҫҡаса белешмә менән таныштырҙы. Улар ошолай исемләнгән: "Өфө 450", "Өфө - балалар өсөн", "Туристик Өфө", "Сәләмәт Өфө", "Йәшел Өфө", "Тарихи Өфө", "Ҡаршылыҡһыҙ Өфө", "Асыҡ Өфө", "Спортлы Өфө", "Өфө - бизнес өсөн", "Яҡты Өфө", "Игелекле Өфө", "Таҙа Өфө", "Комфортлы Өфө", "Мәҙәни Өфө", "Өфө - МХО өсөн" һәм "Цифрлы Өфө". Ошо программаларҙың ҡайһы берҙәре буйынса ҡала башлығы уның фекерҙәре менән таныштырып китәбеҙ.

***"Ҡаланы тик ҡул менән генә йыйыштырһаҡ, ул бер ваҡытта ла таҙармаҫ".*** Яңы технологиялар заманында бар нәмәне лә эшсе ҡулдары менән генә ваҡытында башҡарып булмай. Мәҫәлән, биналар эргәһендәге территорияларҙы таҙартыуымы, уларҙың фасадтарының тышҡы күренешен яңыртыуымы, төҙөкләндереү эштәренең барышын күҙәтеүме, уларҙағы етешһеҙлектәрҙе теркәүме - быларҙы яһалма интеллект технологияларын ҡулланып эшләп була. Әлегә ҡайһы бер нәмәләр ҡул режимында башҡарыла, әммә беҙ ағымдағы йыл дауамында



күҙәтеү һәм контролдә тотоуҙы автоматик режимға күсерергә тейешбеҙ.

***"Йәшел Өфө" - был трендты үҫтерәбеҙ һәм киләсәктә лә үҫтерәсәкбеҙ".*** Өфөнөң 450 йыллығына ҡалабыҙҙа 45 мең ҙур ағас һәм ҡыуаҡтар ултыртыу күҙаллана, уларҙың һаны 49 меңгә етте. Тағы ла бер сағыштырыу: 2024 йылда 264 серей башлаған һәм күркәкһеҙ ағас киҫеп алынһа, улар урынына 382 йүкә ағасы ултыртылды, уларҙың сифатын ил кимәлендә иң яҡшыларҙан тип әйтеп була. Мобиль (күсереп йөрөтеп булған) йәшелләндереүгә иғтибарҙы арттырасаҡбыҙ, аҡрынлап бер йыллыҡ сәскәләрҙе күп йыллыҡтары менән алмаштырыуҙы күҙаллайбыҙ. Ҡалабыҙҙың һәр районында яңы аллеялар, йәшелләндерелгән яңы территориялар хасил буласаҡ.

***"Беҙҙең команда өсөн электр транспорты - үҫештең мөһим векторы. Беҙ уны һаҡлайбыҙ. Беҙ уны үҫтерәбеҙ. Беҙ уға инвестициялар һалабыҙ".*** Өфөлә электр транспорты потенциалы - бик ҙур. Әле линияларға сығарылған трамвайҙар хаҡында ыңғай баһа бирәләр. Техника яңы һәм уны көйләп алырға ла кәрәк, әммә сентябрҙә ҡала линияларына 69 яңы трамвайҙың барыһы ла сығарыласаҡ. Ҡалабыҙҙың көньяҡ өлөшөндә эштең нисек барыуына ҡарап, уның төньяғында ла шундай уҡ эштәрҙе башҡарыу күҙаллана.

***"Беҙҙең бурысыбыҙ - балаларыбыҙ өсөн шарттар булдырыу. Улар ошо ҡалала йәшәйәсәк, эшләйәсәк һәм уның менән идара итәсәк".*** Хәҙер Өфөлә балалар өсөн яңы социаль объекттар төҙәлә, өҫтәмә белем биреү үҙәктәре асыла. Әлеге көнгә буш торған йә иһә һәҙәмтәһеҙ ҡулланылған биналарҙа 7 яңы өҫтәмә белем биреү үҙәге эшләй башланы. Балаларға үҙҙәрен төрлө өлкәләрҙә һынап ҡарау, үҙҙәре оҡшатҡан төп түңәрәккә йөрөй алыу мөмкинлеген бирергә кәрәк. Бәләкәй саҡтарында яңылыша бирһәләр ҙә, улар киләсәктә дөрөҫ юл һайлай аласаҡ.

***"Өфөнөң тарихи үҙәге беҙҙең һәм ҡалабыҙға килгән ҡунаҡтарыбыҙҙың өмөттәрен аҡлай алырға тейеш".*** Баш ҡалабыҙҙа ошо мәсьәлә буйынса әүҙем эш алып барыла, һәм беҙ туҡталып ҡалмаясаҡбыҙ. Иң беренсе бурыс - "ҡунаҡ" урамдары маршруттарын берҙәм сылбырға тоташтырыу, бында балалар коляскалары менән йәйәү йөрөү, йә иһә велосипедта йөрөү өсөн комфортлы шарттар булдырыу. Әлбиттә, ҡала үҙәгендәге йорттарҙың фасадтарын яңыртыу талап ителә. Әле мәҙәни мираҫ объекттары иҫәбенә ингән биналарҙың фасадтарын ремонтлау буйынса ҡала программаһы раҫлауға ҡуйылған.

***"Игелекле Өфө" - ҙур һәм күләмле социаль проект, беҙ уны тормошҡа ашыра башланыҡ та инде".*** Программаның иң мөһим өлөшө - ауыр тормош шарттарына дусар булған, торлаҡһыҙ ҡалған граждандарға ярҙам итеү. Беҙ уларҙы ташлап ҡуя алмайбыҙ. Әлеге көнгә улар өсөн туҡландырыу, йыйыныу, сәстәрен алыу, документтарын тергеҙеү, аҙыҡ-түлек, кейем-һалым, "Алға" транспорт картаһы менән тәьмин итеү пункттары булдырылған. Торлаҡһыҙ ҡалған һәм ярҙамға мохтаж кешеләр менән эшләү өсөн ҡалабыҙҙа махсус үҙәк булдырыу тураһында уйлайбыҙ.

Йәнә, физик мөмкинлектәре сикләнгән балалар өсөн коворкинг үҙәген булдырыу идеяһын ғәмәлгә ашыраcаҡбыҙ. Был уларҙы социалләштереү, реабилитациялау һәм социаль мөхиткә яраҡлаштырыу йәһәтенән бик мөһим, сөнки бындай үҫмерҙәрҙә үҙҙәренә, киләсәк тормоштарына ыңғай ҡараш формалаштырыу өсөн тейешле шарттар булдырырға кәрәк.

Өфөлә "Кеше эҙләйем" тигән акцияны ике тапҡыр ойоштороҙоҡ. Өфө кешеләре хужаһыҙ ҡалған йорт хайуандары өсөн ике тонна аҙыҡ йыя алды, өс тиҫтәгә яҡын эт яңы хужаларын тапты.

"Игелекле Өфө" программаһының тағы ла бер йүнәлеше - ай һайын изге эштәр марафонын уҙғарыу. Ул йәрминкәләр форматында ойоштороhа. Балалар ҡулдары менән эшләнгән төрлө әйберҙәр: сувенирҙар, открыткалар, башҡа нәмәләр менән балалар баҡсалары, мәктәптәр һатыу итәсәк, йыйылған аҡсалар хәйриә ярҙамы өсөн ҡулланыласаҡ. Марафон 1 мартта Ленин исемендәге майҙанда старт ала.

ҠЫҪҠАСА

# ҠАРГИҘӘРҘӘ ЙӨРӨЙҺӨҢМЕ?

**Өфөлә Үҙйөрөшлө машиналарҙың һәм башҡа төр техниканың техник торошон күҙәтеү буйынса дәүләт комитеты бүлеге Дәүләт автоинспекцияһы, республиканың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы, Урман хужалығы министрлығы, Һунарсылар һәм балыҡсылар ассоциацияһы хеҙмәткәрҙәре менән берлектә ҡаргиҙәрҙе һәм мотовездеходтарҙы эксплуатациялауҙы тикшерә.** "Өфөлә генә 1938 ҡаргиҙәр теркәлгән, шуларҙың 1110-ы - граждандарҙыҡы, 838-е - ойошмаларҙыҡы. Тикшереүҙәр ваҡытында айырыуса теркәү ҡағыҙәләрен үтәүгә, ошо транспорт төрө менән идара итеү өсөн рөхсәткә һәм техник тикшереүгә иғтибар бирелә. Шулай уҡ ял итеү урындарында: коттедж ҡасабаларында, прокат пункттарында, спорт базаларында ҡаргиҙәрҙе дөрөҫ файҙаланыу мөһим", - тип хәбәр итә ҡала хакимиәте. "Ҡаргиҙәр" операцияһы ошондай юлһыҙ ерҙән йөрөй алған транспортты техник тикшереү ваҡыты менән тап килә. Уны ваҡытында үткәреү өсөн Өфө ҡалаһы, Дим урамы, 2 адресы буйынса дәүләт техник күҙәтеү комитеты бүлегенә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Телефон: 7 (34-72) 15-11-12.

✓ **Льготалы ер участкаларына иң ҙур сират - Өфөлә.** Өфөләрҙең ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү өсөн Башҡортостандың Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығы һуңғы өс йылда 4,3 мең участка булдырған. Республиканың Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры етәксеһе урынбаҫары Фәниә Нафиҡова Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа белдереүенсә, 2011 йылдан республикала льгота алыу өсөн бөтәһе 96,5 мең ғариза килгән. Уларҙың 73,5 меңе ер менән тәьмин ителгән йәки 250 мең һум компенсация алған. Бындай ярҙам сараһын индереү сиратты кәметкән: күптәр тап аҡсаға өҫтөнлөк бирә, өҫтәүенә 2022 йылдың июленән был аҡсаны ипотека буйынса түүгә иғәнә өсөн тотонорға мөмкин. Уҙған йылда бөтәһе 1216 ғаиләгә аҡса түләнгән, был 2021 йылға ҡарағанда өс тапҡырға күберәк (398). Башҡортостан льготалыларҙы ер участкалары менән тәьмин итеү кұрһәткесе буйынса Волга буйы федераль округында беренсе урынды биләй - 81 процент.

✓ **Һанлы янсыҡты (һанлы һумды ҡулланыу өсөн иҫәп) кеше үҙ теләге менән һәм цифрлы һум платформаһына тоташтырылған банктың мобиль ҡушымтаһы аша ғына аса ала.** Бер кем дә бындай янсыҡтарҙы автоматик рәүештә асмай. Әгәр кеше кәрәк тип тапмаһа, ул һанлы һум иҫәбен асмаҫҡа мөмкин. Был хаҡта Рәсәй банкының рәсми сайтында хәбәр ителә. Үҙәк банк һанлы һумды ҡулланыуҙан баш тартҡан өсөн күп функциялы үҙәккә ғариза менән мөрәжәғәт итергә кәрәк тигән мәғлүмәткә шундай аңлатма бирҙе. "Цифрлы һумдар менән файҙаланыуҙан баш тартыу тураһында бер ниндәй ҙә махсус ғариза тултырырға һәм күп функциялы үҙәккә илтергә кәрәкмәй. Күп функциялы үҙәктең һанлы һум иҫәптәрен асыуға бер мөнәсәбәте лә юҡ", - тиелә Рәсәй банкы белдереүендә. Билдәле булыуынса, һанлы һум 2025 йылда киң ҡулланылышҡа индерелергә тейеш.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Һуңғы аҙнала Башҡортостанда респиратор инфекциялар менән ауырыусыларҙың 13 процентҡа артыуы күҙәтелә. Һан яғынан ҡарағанда, был 23 меңдән ашыу осраҡ, шуларҙың яртыһы - 14 йәшкә тиклемге балалар. "Республикала дүрт балалар баҡсаһы карантинға ябылды, шулай уҡ ун ете мәктәптә егерме ете класс һәм ете балалар баҡсаһында ете төркөм эшләмәй, - тип белдерҙеләр Роспотребнадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығынан. - Башҡа респиратор вирустар араһында грипп вирустарының өлөшө артыуын дауам итә һәм осраҡтарҙың дөйөм һанынан 50 процентҡа етте".

✓Үҙ ҡарамағында "Киске Өфө", "Вечерняя Уфа", "Уфимские ведомости", "Уфимская неделя" гәзиттәре һәм "Уфа" журналы, шулай уҡ "Бөтөн Өфө" телевидениеһы (Продюсерский центр "Вся Уфа") булған "Өфө" Нәшриәт йорто" атамаһын үҙгәртте. Хәҙер ул "Бөтөн Өфө" медиа йорто" ("Медиадом "Вся Уфа") тип аталасаҡ. Өфө гәзиттәрен һәм телевидениеһын берләштереү тураһындағы ҡарар былтыр октябрҙә баш ҡала тормошо тураһындағы мәғлүмәттәрҙе яҡшыртыу һәм киңерәк таратыу маҡсатында ҡабул ителде.

✓3 марттан Өфө - Минск маршруты буйынса аҙнаһына икенсе тура авиарейс асыу планлаштырыла. Радий Хәбиров етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһының Беларусь Республикаһына сәфәре барышында тура авиабәйләнеште үҫтереү тураһында килешеүҙәр төҙөлдө. Яңы тура авиарейсты асыу "Башҡортостан-Белоруссия оҙон ғүмерлелеге" проектын артабан үҫтереүгә булышлыҡ итергә тейеш, уның сиктәрендә ике йыл эсендә республикабыҙҙан өлкән йәштәге 3 меңгә яҡын кеше Белоруссияға барып ҡайтты.

✓Өфөлә пассажир транспортын тикшерәләр. Баш ҡаланың дәүләт автоинспекцияһы мәғлүмәттәре буйынса, төп маҡсат - аварияларҙы кәметеү, автобус водителдәренең юл ҡағыҙәләрен боҙоуын иҫкәртеү һәм ҡала транспортында пассажирҙар ташыу хәүефһеҙлеген арттырыу. "Автобустарҙың техник торошона, водителдәрҙең рейс алдынан табиптар һәм техник тикшереү үтеүенә, уларҙың хеҙмәт һәм ял режимына айырым иғтибар бирелә", - тип белдерҙеләр Өфө дәүләт автоинспекцияһында.

✓Башҡортостанда юл киҫелештәрендә 56 яңы юл хәрәкәте ҡағыҙәләрен боҙоуҙы фотовидеотеркәү комплексын ҡуйыу планлаштырыла. Улар биш йылға ҡуртымға бирелә. Башҡортостан Республикаһының Юл хәрәкәтен ойоштороу үҙәге мәғлүмәттәре буйынса, системаны 2025 йылдың 1 июненән сафҡа индереү күҙаллана, әле түүгә һынау комплексы Зәки Вәлиди һәм Цюрупа урамдары киҫелешендә эшләй. Комплекстар "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" милли проекты сиктәрендә ҡуйыла.

"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.

✓ "Киске Өфө" менән бергә үҫтем" тип әйтәм мин, "үҙемдең тиҫтерем", хатта уҡытыусым тип тә әйтергә тартынмайым. Илен, милләтен, телен һөйгән яҡташтарымды ошо баҫманан бер ҡасан да өҙөлмәҫкә саҡырам.



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ҙырҡыуыт**
**(Дупель)**



Һаралйынан ҙурыраҡ, тәҫе лә аҡһылыраҡ. Ҡабырғалары, ҡорһағы буй һыҙатлы, ҡанатының һым ҡойроғоноң осо аҡ, ҡайһы саҡта шулай уҡ буй һыҙатлы. Суҡышы ярайһы уҡ ҡалын, башы ҙур.

Шым ғына осоп китә, бөтөнләй сайҡалмай тиерлек тура оса. Ҡош туйы мәлендә ата ҙырҡыуыттар ерҙә генә һайрай, һауаға күтәрелмәй. Бының өсөн улар ҡояш байығас, ҙур ғына төркөмгә йыйыла, әммә кеше күҙенән йырағыраҡ булыуҙы хуп күрә.

Көнбайыш Европанан Енисейға тиклем таралған. Беҙҙең төбәктә - урман зонаһында.

XX быуаттың икенсе яртыһында әле Урал алдының бөтөн территорияһында тиерлек осраһа, әлеге мәлдә Ағиҙел, Тиҙ Танып һәм Кама йылғалары үҙәндәре буйлап бик аҙ һанда һаҡланған. Көньяҡ Уралда оя ҡороп йәшәүсе һирәк осрай торған ҡош. Урал аръяғында урмандарҙың "утраулы зона"ларында оя ҡора ине, шулай уҡ Йайыҡ йылғаһының урта ағымында йыш осрай. Кесе Ҡыҙыл йылғаһында, Һаҡмарҙың башланған ерендә, Ирәмәл тауында һәм Ямантау урмандарында осрағаны булды. Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш райондарында оя ҡороуы билдәле. 1962 йылдың 21 апрелендә Саҡмағош районы Байбулат ауылы эргәһендәге Кеүәш йылғаһының батҡыл ярында ҙырҡыуытҡа тап булдыҡ. 1963 йылдың 12 майында Учалы һаҙлығында бер нисә ҙырҡыуытты осратып, береһен өйрәнеү өсөн тотоп алдыҡ. Шулай уҡ Өфө-Нуғай трассаһы буйындағы ҙур булмаған һаҙлыҡта ла ҙырҡыуыт осраны.

Апрелдең икенсе яртыһында ҡайта. Еүешерәк һаҙлыҡтарҙы, ҡыйы булмаған урмандарҙы, ваҡ ҡыуаҡлы ерҙәрҙе үҙ итһә лә, ояһын ҡороуҡ урынға ҡора. 3 аҙналыҡ бәпкәләр осорлоҡ була.

Ҡышлау ерҙәргә август аҙағында йыйыла, ҡайһы берҙәре октябрь башына тиклем бында ҡала. Әнерҙә һәм төнөн әүҙем, йылы яҡҡа ла төнөн оса - башта көнбайышҡа, Европаға, һуңынан Африкаға.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ХӘТЕРЛӘП...

**"Әҙәбиәткә һөйөүегеҙ ҡасаныраҡ уянды, бала саҡтан яҙышаһығыҙмы, Хәлил ағай?" тип һорашҡылай бөгөнләр. Мәктәп балалары менән осрашыу мәлдәрендә, гәҙиттә, өлкәнерәк синыф балалары шундайыраҡ һорау биреүсән. "Картайып килгәндә генә яҙа башланым", тип, тураһын әйтһәң, бер аҙ уңайһыҙыраҡ та һымаҡ. Шуға күрә лә, бала саҡтан әҙәби әҫәрҙәр уҡырға яратҡаным хаҡында оҙағыраҡ итеп бәйәнләп, шунан ғына, инде бишенсе тиҫтәмә аяҡ баҫҡас, иң тәүге хикәйәмде, дөрөҫөрәге, повесымды ижад иткәнем тураһында һөйләп бирергә тырышам.**

# МИН НИСЕК ЯҘА БАШЛАНЫМ,

## йәки Гәзит-журналдар уҡырға яратыуым мине әҙәбиәткә алып килде



Атайым мәрхүм һәр саҡ "Ағиҙел" журналы, "Совет Башҡортостаны" һәм Баймаҡ районында сыҡҡан "Октябрь байрағы" гәзиттәрен алдыра ине. Уларҙы йә үҙе беҙгә тауышланып уҡый, йә иһә, беҙҙән - балаларынан уҡытып, үҙе тыңларға ярата торғайны. Хатта үҙенең күңеленә ятҡан ҡайһы берәй шиғыр-мәҡәләһе ҡабат-ҡабат уҡып, бөгөлдәрен ятлап та ала ине. Почтальон Иҫәнов Исмәғил еҙнәне күрше Аҡморон почтаһынан (совхоз үҙәгенән) гәзиттәр тейәп беҙгә килеп еткәнен түҙемһеҙлек менән көтөп алған мәлдәрем бөгөнгөләй хәтеремдә.

Ә инде сит өлкәләрҙә оҙайлы хәрби хеҙмәтем башланғас, "Башҡортостан ҡыҙы", "Ағиҙел" журналдарын алдырҙыҡ. Бер ҡыҙығы хәтеремдә ҡалған: гарнизоныбыҙҙа ана шул журналдарҙың бер аҙ ғына тауышлап килеүенә ғәжәпләнә инем. Ысынлап та, уларҙы кемдер уҡығанға оҡшай... Һуңынараҡ, почтала эшләүсе бер ҡатындың беҙҙең яҡташ икәнен белеп, уның менән танышып та алдыҡ.

Офицер булып хеҙмәт итә башлағас, һалдатҡа алынған яҡташтарым, хатта ауылдаштарым да беҙҙең ракета дивизияһына йыш ҡына килеп эләккеләй торғайны. Яҡташ һалдаттарыбыҙҙың хәрби хеҙмәткә ғәйәт яҡшы ҡарашы, уларҙың тәртипле, тыңлаулы, эшһөйәр булыуы күңеләмә ята ине. Быны шул егеттәр өсөн горурланып, һирәк-һаяҡ ҡына булһа ла улар хаҡында үҙебеҙҙең район гәзитенә, Сибайҙа сыҡҡан "Атайсал" гәзитенә һалдатты маҡтаусы мәҡәләләр яҙғыланым. Ялға ҡайтҡан арала һалдаттан ата-әсәһенә сәләм тапшырыу, уларҙың шат йөҙөн күреүе күңелле ине.

Гәзит мөхәррирҙәренең - яҡташтарымдың (буласаҡ ҡәләмдәштәремдең тип әйтәйем) үҙемә ҡарата ихтирамын тойҙом, минең сейле-бешле яҙмаларымды матурлап, гәзиткә баҫып сығарыуҙары, әлбиттә, оло һөйөнөс булды. Ә хикәйә-маҙар яҙыу башыма ла килмәй ине әле...

Бер мәл, сираттағы ялыма ҡайтҡанымда, егерме йылдар элек гүр әйәһе булған яҡташым хаҡында бик сәйер хәбәр ишеттем. Беҙҙең Баймаҡ районы Аҡтау ауылынан Йәрмөхәмәтов Абдрахман исемле егет тураһында. Һикһәненсе йылдар башында уҡ Демократик Афғанстанда интернациональ бурысын үтәгәндә һәләк булған ине. Ауылына цинк табутында алып килеп ерләгәйнеләр. Әлеге хәбәргә ярашлы, имеш, ауыл зыяратына күмелгән табутта ул түгел, ә бөтөнләйгә икенсе кеше булған икән... Егерме йыл тирәһе "дошмандарҙа" әсирҙә булған да, өйөнә һау-сәләмәт ҡайтып төшкән, имеш. Шунда Ислам динен өйрәнеп, хатта намаҙға ла баҫҡан. Биш намаҙын ҡалдырмай уҡый икән...

Туғандарына барып һорарға ҡыйманым, әммә Баймаҡ военкоматына барып, шундағы офицерҙарҙан ошо хәлде белештем. "Бер имеш-мимеште беҙ ҙә ишеттек, иптәш подполковник, - тине бер майор мине тыңлап бөткәс. - Буш хәбәр ул..."

Шул турала ишеткәндән алып, военкоматта дөрөҫлөктө асыҡлағанға тиклем уйланып йөрөгән арала башыма төрлө һорауҙар килеүе - тәбиғи бит инде. Афғанда нисек тере ҡалыуынан да бигерәк, инде әллә ҡасан уҡ төнөлөп бөткән әсәһенә ҡайһылайыраҡ ҡиәфәттә, нисегерәк ҡайтып күренгән икән, үҙенең тере булыуын әсәһенә белдереүе Абдрахманға ла еңелдән булмағандыр, тигән һорау борсоно. Кинәт кенә өйөнә ҡайтып индеме, бәлки, башта берәү аша хәбәр иткәндер. Әсәһенең ни йөрәге ҡалды икән?.. Аһын юғалтып йығылыуы ла бар бит, шундай стрестан, тип, Хөмәйрә апайҙы ла йәлләйем...

Ә инде был хәбәрҙең дөрөҫлөккә тап килмәүе хаҡында белгәс, үҙемсә фантазиялай башланым... Яҡташым афғанлыларҙа әсирлектә булған, имеш, тип яҙырға күңелем тартманы. Әммә "йәшәү өсөн бөтә шарттар булдырылған берәй "секретный" ер аҫты ҡоролмаһына барып ингән хәлдә, шунда әҙәм балаһы ысынлап та йылдар буйы йәшәй алыр ине, мөғайын", тигән уйҙар башымда уралды. Ниһәйәт, "Тау тотҡоно" исемле бер повесым тыуҙы. Дошман утынан йәшенеп, тау ҡаяһы аҫтындағы бер мәмерйә эсенә барып инеү менән, сираттағы снаряд шартлап, һалдат ингән тишекте ҡаплауы һәм был егеттең (Марат тип исем бирҙем) шунда бикләнеп ҡалыуы хаҡында яҙып алып киттем. Ана шул мәмерйәнең "йәҙрә һуғышы була ҡалһа" тип, йәшеренеү ниәте менән ҡасандыр төҙөлгән ҙур ҡоролмаға барып тоташҡан булыуы хаҡында үҙемсә хикәйәләп, яҙҙым да яҙҙым. Егерме йылға яҡын НЗ (неприкосновенный запас) консервалар, сухариҙар ашап, тау эсендәге шишмәнән һыу эсеп көн күргән, инде ҡырҡ йәштәргә барып еткән был һалдатты һуңынан нисек табып алыуҙары, уның нисек өйөнә - әсәһенә ҡайтып инеүе хаҡында... Яҡташыбыҙ тураһындағы шул имеш-мимештәрҙең килеп сығыуының төп сәбәбе - уны ерләр алдынан цинк табутын асырға рөхсәт итмәүҙәре булғандыр, тип тә уйлайым.

Ул саҡ миндә, әлбиттә, компьютер һымаҡ нәмә юҡ ине әле. Әҫәремде ҡулдан яҙҙым да, Өфөгә сираттағы командировкаға һалдат алырға килгәндә мөхәрриттәребеҙҙең береһенә алып индем. Ике мен дә өсөнсө йыл ине. Баш мөхәррир, ҡулъяҙмамды тыштан ғына тотоп ҡараны ла: "Ағай, был әйберегеҙ бик ҡүләмле күренә, уны "Шоңҡарға" биреп ҡарағыҙ", - тип кәңәш итте. "Шоңҡар"ҙың баш мөхәррире Әмир ағай Әминев мине бик йылы ҡаршыланы. "Ярай, ҡалдырығыҙ, уҡып сығырмын", - тине. Гарнизонға ҡайтҡас, оҙаҡ та тормай, хат килде. "Повесығыҙҙы уҡып сыҡтым. Бер аҙ мөхәррирләргә тура килер. Журналда сығарырға ҡарар иттем", - тигән яуабын уҡығас, һөйөнөсөмдөң сиге булманы. Бер-ике айҙан, ниһайәт, әҫәрем "Шоңҡар"ҙа донъя күрҙе. Ул ғына ла түгел, шул уҡ йылдың аҙағында (Әмир ағай Әминевты Иршат Теләүембәтов алыштырған мәл ине) мине журналдың "йыл лауреаты" итеп тә билдәләнеләр.

Шул осорҙары, сираттағы ялға ҡайтҡанымда, бер ауылда туйҙа ҡатнашырға тура килде. Тәнәфескә сыҡҡан мәлдә, ни өсөндөр, ҡунаҡтар менән Афған һуғышы тураһында һөйләшеп алып киттек. Шундағы ҡоҙаларҙың береһе: "Беҙҙең Башҡортостандан Марат исемле егет Афғанстанда егерме йыл мәмерйәлә бикләнеп йәшәгән. Уны тере килеш тапҡандар, хәҙер өйөнә ҡайтҡан", - тип әйтеп һалды. "Ҡайһы районда булған ул?" - тип һорашҡан булам. "Белорет буғай..." "Булмаған хәл бит ул, ҡоҙа", - тим тегегә. Ул: "Ысын булған хәл. Үҙем журналдан уҡыным. Ышанмаһаң, ана "Шоңҡар журналының фәләнсә һанын алып уҡы", - тип, минең менән бәхәсләшеп алып китмәкенме...

Тап ана шул осорҙары сыға башлаған (2002 йыл), үҙемдең артабанғы ижади эштәрем менән туранан-тура бәйләнгән "Киске Өфө" гәзите хаҡында айырып әйтмәй булмай. Был баҫманы ойоштороусы һәм бөгөнгәсә уны уңышлы етәкләп килеүсе Гөлфиә Янбаева, шунда эшләп йөрөгән яҙыусы Әхмәр Үтәбай һәм башҡа ҡәләмдәштәр менән яҡындан танышып, дуҫлашып киттем, улар менән аралашыу шунда уҡ күңелемә ятты. Баштан уҡ минең яҙмаларыма мөхәрририәттең битараф булмауы артабан да яҙыуымды дауам итеүгә ҡанатландырҙы. "Шәүрә" ҡиссаһы, "Әрме яҙмалары" һәм башҡа әҫәрҙәрем берҙәр артлы донъя күрә башланы. "Настоящий яҙыусы" халҡы менән яҡындан аралаша башлағас, уларҙың кешеләрҙә ғәжәп йылы ҡарашын үҙемә булған мөнәсәбәт буйынса баһаланым. Хәрби кешене айырыуса ныҡ ихтирам итәләр һымаҡ тойолдо. Мәлендә, тейешенсә күрһәтмәләр биреп, иҫкәрмәләр әйтеп, кәрәк саҡта бер аҙ дәртләндереп, тел ғилемена бөтөнләйгә алыҫ торған кешенең "кәзимге яҙыусы"ға әйләнеүендә "Киске Өфө" менән дуҫ булыуым ҙур ғына роль уйнағандыр, тип һанайым. Уҡыусыларҙың тәрән һөйөүен һәм ихтирамын тиҙ арала яулап алған ошо гәзитебеҙҙең йыл лауреаты итеп тә танылғас, артабан да ҙур илһам менән яҙырға тотондом. "Киске Өфө" менән бергә үҫтем" тип әйтәм мин йыш ҡына таныштарыма. "Үҙемдең тиҫтерем", хатта уҡытыусым тип тә әйтергә тартынмайым ошо баҫмабыҙ хаҡында.

Бөгөнгө көндә халҡыбыҙҙың яратҡан баҫмаһына әйләнгән был гәзит үҙенең тирәһенә меңәрләгән дуҫтарын йыйҙы. Ул донъя яңылыҡтары булһынмы, республикабыҙҙағы хәлдәр, илебеҙ, айырыуса, Башҡортостаныбыҙ тарихы даими сағылған баҫманы алдырып уҡымаған кеше күп кенә нәмәнән мәхрүм тип һанайым. Йәш быуынды тәрбиәләүгә, ғаилә мөнәсәбәттәренә, динебеҙ мәсьәләләренә лә ҙур иғтибар бирелгән, балаларҙы илһөйәрлек рухында тәрбиәләүгә күп урын бүленгән ошо баҫмабыҙҙы интернет селтәренән дә уҡырға була. Тик ни өсөндөр экран аша гәзит уҡыуҙы һис кенә лә мөхәтһәмәйем. Бәлки оло быуын вәкиле булараҡтыр ҙа, "тере гәзитте" ҡулға алып уҡып ҡына ысын ҡәнәғәтлек табам. Илен, милләтен, телен һөйгән яҡташтарымды ошо баҫманан бер ҡасан да өҙөлмәҫкә саҡырам. Республикабыҙҙа сыҡҡан башҡа күп гәзиттәрҙе лә ныҡ хөрмәт итәм һәм уларҙа ла әүҙем сығыш яһайым. Әммә, "Киске Өфө"-нөң штаттан тыш авторы булараҡ (баш мөхәррир мине бер мәл шулай тип атап һөйөндөргәйне), үҙемдең ана шул бурысымды намыҫ менән үтәргә тырышып йөрөгән көн әле ул, хөрмәтле дуҫтар.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**хәрби хеҙмәт ветераны.**

*✓ Был яҙмалар Өфө-II ҡаласығын ҡаҙығанда яһалған асыштарҙы раҫлай: бында ҡара һәм төҫлө металлургия эҙҙәре табыла. Ҡаласыҡта боронғо мейес эҙҙәре, бронза ҡойолмалары, шулай уҡ металл иретеү һауыттары табыла.*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Граф В.А. Перовский**

**(1833-1842 йылдарҙа Ырымбур губернаторы булған).**

Казактарҙы ошолай итеп бер-береһенән алыҫта ятҡан пункттарҙа урынлаштырыуҙың сәйәси һәм хәрби сәбәптәре бар ине: Башҡортостанда уҙған быуат дауамында һәм хатта 1803 - 1805 йылдарҙа хөкүмәткә ҡаршы ихтилалдар йыш сығып тора. Уларҙы баҫтырыу өсөн их ихтилалсыларҙан йыраҡ булмаған ерҙәрҙә ғәскәр тотоу талап ителә; әгәр ҙә улар баш күтәрергә ниәт итһә, уларҙы шундуҡ баҫтыра һалып, ихтилалдың киңәйеп, таралып китеүен иҫкәртеп була. Бындай саралар башҡорттарға ихтилалдарының файҙаһыҙ икәнен үҙенән-үҙе күрһәтеп тора. Башҡортостандың үҙәгендә һәм уларҙың ҡырғыҙҙар (ҡаҙаҡтар. - **Тәрж. Иҫк.**) менән сиктәрендә торған ғәскәрҙәр уларға рустарға бергәләп ҡаршы сығыу мөмкинлеген бирмәй. 1840 йылға тиклемге 50 йыл дауамында башҡорттар тыныс һәм тоғро подданныйҙарға әйләнде, үҙ кешеләрен Ырымбур линияһына уны казактар менән бергә ҡырғыҙҙарҙың һөжүм итеүенән һаҡларға ебәрҙеләр, һуңғыларын, үҙҙәренең дошманы һанап, күрә алмайҙар ине. Уларҙы далаларға ебәрелгән хәрби отрядтар составына индерәләр. Башҡорттар һәр саҡта ла рус батшаһына тоғро ҡалды, иҫтәлекле 1812 йылда уның күрһәтмәһе буйынса бишәр йөҙлөк 20 полк төҙөнө, французлар менән Бородино яланында, Мәскәү янында, ил сигенән ситтәге төрлө ерҙәрҙә алыштылар һәм башҡа ғәскәрҙәр менән бергә Парижды алдылар.

Башҡорттарҙың тынысланыуы һөҙөмтәһендә Башҡортостан эсендә казак ҡәлғәләрен тотоу ихтыяжы бөтә, һәм был барса эске станицаларҙа йәшәгән казактарҙы Ырымбур линияһына күсереп, уны көсәйтеү фекеренә ерлек бирә. 20-се йылдарҙа, төбәк менән генерал Эссен идара иткән саҡта, идара итеү үҙәгенән бик алыҫта йәшәгән Красноуфимск казактарын Ырымбурға күсереү хаҡында ҡарар ҡабул ителә. Уларҙы урынлаштырыу маҡсатында һул яҡтан Урал йылғаһы, уң яҡтан Ҡоралы йылғасығының Илек йылғаһына ҡойған еренә тиклем арауыҡта Илек районы тип аталған ерҙәр ҡырғыҙҙарҙан тартып алына. Бында төҙөлгән станицалар ҡырғыҙҙарға хәүеф тыуҙыра, һәм улар, үҙҙәренең ерҙәрен юғалтыу менән риза булмайынса, оҙаҡ йылдар буйына бунт күтәреп, һөжүм итеп тора.

Генерал Перовский килеү менән эске станицалар казактары мәсьәләһе уның айырым бер эшенә әйләнә. Уның уйлауынса, империяның көнсығыш сиктәрен азиаттарҙың бөткөһөҙ яуҙарынан һаҡлау өсөн дәүләт оборонаһы мәнфәғәттәрендә Ырымбур линияһын көсәйтеү талап ителә. Перовский эске станицалар казактарының ҡайһыларын, теләктәренә ярашлы, линия станицаларына күсерергә, башҡаларын, Чугуев казактары өлгөһөндә, яңынан төҙөләсәк хәрби тораҡтарҙа урынлаштырырға ҡарар итә. Перовский ошо маҡсатта, Орск ҡәлғәһенән башлап, Ур һәм Ҡомаҡ йылғалары үрҙәре буйлап, Уй йылғаһы буйындағы станицаларға тиклемге ҡырғыҙ ерҙәренә эске станицалар казактарын, аҙ ерле губерналарҙа йәшәгән крәҫтиәндәрҙе һәм линия ҡәлғәләре гарнизондарының 4 батальон һалдаттарын күсереү планын ғәмәлгә ашыра. Ҡырғыҙҙар менән сиктәш яңы станицаларға күсерелеүселәр казак сословиеһы составына индерелә. Был эштәр 1835-1836 йылдарҙа башҡарыла.



**Генерал Владимир Афанасьевич Обручев**

**(1842 - 1851 йылдарҙа Ырымбур губернаторы булған)**

Генерал В.А. Обручев 1842 йылда Ырымбур төбәгенең төп начальнигы вазифаһына тәғәйенләнгә тиклем Новгородта дивизия командиры була. Әйтеүҙәренсә, ул Перовский менән дуҫтарса мөнәсәбәттә булмаған граф Клейнмихелдең кешеһе булараҡ, барыһын да үҙгәртә: элекке губернатор йәйләүе ташландыҡ хәлгә килә, ул башлаған эштәрҙең күбеһе юҡҡа сыға, хатта Перовский ваҡытында хеҙмәттә булғандар, ситтә яҡшыраҡ урындарға өмөт итеп, Ырымбурҙы ташлап китә.

Обручев, үҙенең бер адъютанты, гвардия капитаны Николаевтан башҡа, үҙе менән бер кемде лә алып килмәй. Буш ҡалған урындарҙы бындағы дәрәжәһеҙ чиновниктар, йә иһә осраҡлы рәүештә кемдәрҙер тәҡдим иткән кешеләр ала. Обручевтың, күрәһең, вазифаларға тәғәйенләр өсөн һәләтле һәм уҡымышлы кешеләре булмай. Ырымбурҙа яраҡлы кешеләр табылмаһа, министерлыҡҡа яҙып, яҡшы кешеләрҙе ебәреүҙәрен үтенә, әммә Обручев кешеләр мәнән һәйбәт мөғәләмә итеп, үҙенә ылыҡтыра алырлыҡ идарасы булмай.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы бар).**

*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

# ӨФӨ-II ҠАЛАСЫҒЫНА - 1500 ЙЫЛ

## Боронғо башҡорттарҙың биш ҡалаһы



Башҡортостандың Урта быуат ҡалалары тураһында үҙенең яҙмаларында XII быуаттың ғәрәп географы Мөхәммәд әл-Иҙриси: "...Эске башҡорттарҙың ҡалалары араһында Масра һәм Касра бар. Ике ҡала ла ҙур түгел, һәм сауҙагәрҙәр унда һирәк була. Унда ерҙәренә һәм илдәренә килеп аяҡ баҫҡан сит ил кешеләрен үлтерәләр, шуға берәү ҙә килергә атлығып тормай. Ике ҡала ла Атил йылғаһына ҡойған йылға буйында урынлашҡан..." - тип яҙа.

Иҙрисиҙең картаһында Атил йылғаһы (йәғни Иҙел йәки Волга) Урал тауҙарынан ағып сыға, ә Касра һәм Масра ҡалалары уның уң яҡ ҡушылдығы ярында урынлашҡан. Эш шунда: боронғо грек географы Клавдий Птоломей заманынан Волганың башы тип Ағиҙел йылғаһы иҫәпләнгән. Тимәк, Ағиҙелдең уң ҡушылдығы - Ҡариҙел була.

"Эске башҡорттар"ҙан тыш, Иҙриси "тышҡы башҡорттар"ҙың өс ҡалаһын иҫкә ала: "Тышҡы башҡорттар"ға килгәндә, улар араһында Ҡараҡая, Намджан һәм Гурхан бар. Улар - халҡы күп булған һәм үҙҙәрен-үҙҙәре тәьмин иткән ҡалалар. Уларҙа сауҙа һәм һөнәрселек ныҡ үҫешкән. Уларҙың ҡайһы берҙәре башҡаларҙың ерҙәренә килеп, үҙҙәренә кәрәкле нәмәләрҙе ала. Был ундырышлы ил, унда үлән дә, мал да күп..."

Атап үтелгән ҡалаларҙың ҡайһыһы Өфөгә тап килеүе билдәһеҙ. Иң мөһиме, был яҙмалар Өфө-II ҡаласығын ҡаҙығанда яһалған асыштарҙы раҫлай: бында ҡара һәм төҫлө металлургия эҙҙәре табыла. Ҡаласыҡта боронғо мейес эҙҙәре, бронза ҡойолмалары, шулай уҡ металл иретеү һауыттары табыла. Боронғо башҡорт ҡалаларында металлургияның киң үҫешеүе әл-Иҙрисиҙең яҙмаларына тап килә: "...Намджан - ҡала ҡоролошо булған бәләкәй генә ҡала, уның менән төрки ҡәбиләһенән булған ир кеше етәкселек итә. Был ҡала Сукан тип аталған йылға ярында урынлашҡан. Ҡаланан көнсығышҡа табан Арджика тауы урынлашҡан, унда меңдәрсә кеше эшләгән баҡыр копиҙары (рудник йәки карьер - **Ред.**) бар..."

**Салауат ХӘМИҘУЛЛИН.**

**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Берлин стратегик һөжүм итеү операцияһында

Дивизия частары дошманды ҙур юғалтыуҙарға дусар итте. Юҡ ителде: һалдат һәм офицерҙар - 2,9 мең, орудиелар - 13, төрлө пулеметтар - 93, автомат һәм винтовкалар - 732, боеприпастар һәм яғыулыҡ-майлау материалдары келәттәре - 3. Емертелгән һәм зарарланған: танкылар һәм үҙйөрөшлө установкалар - 10, бронетранспортерҙар - 2, автомашиналар - 5, баржалар һәм йөк тейәлгән кәмәләр - 8, 11 самолет бәреп төшөрөлгән. Алынған трофейҙар: самолеттар - 189, төрлө орудиелар - 51, автомат һәм винтовкалар - 700, фаустпатрондар - 100, паровоздар - 29, вагондар, платформалар һәм цистерналар - 1075, автомашиналар - 4,3 мең, мотоциклдар - 1,2 мең, тракторҙар - 54, авиация моторҙары - 139, төрлө станктар - 630, күтәреү крандары - 62, автодрезиналар - 4, велосипедтар - 239, мөлкәт, боеприпас һәм аҙыҡ-түлек келәттәре - 65. 4327 һалдат һәм офицер, бер генерал әсиргә алынған. Концлагерҙарҙан, төрмәләрҙән һәм башҡа урындарҙан төрлө милләтле 54,5 мең тотҡон азат ителгән. 16-сы гв. атлылар дивизияһының юғалтыуҙары: шәхси составта - 211 кеше һәләк булған, 607 кеше яраланған. 2,5 мең рядовой, сержант һәм офицер хөкүмәт наградаларына тәҡдим ителгән. 16-сы гв. атлылар дивизияһының штаб начальнигы, гв. подполковнигы И. Ф. Костанда. Штабтың оператив бүлеге начальнигы, гв. майоры Н. С. Бочко".

1945 йылдың 1 майында Мәскәү Бранденбург ҡалаһын алған өсөн 1-се Белорус фронты ғәскәрҙәренә салют бирә. Юғары Баш командующий бойороғонда гв. генерал-лейтенанты М. П. Константиновтың 7-се гв. атлы корпусы тағы ла бер тапҡыр билдәләнеп үтелә. Совет хөкүмәте атлыларҙың боевой уңыштарына юғары баһа бирә. 7-се гв. атлы корпусы Ленин ордены менән наградлана. Өс орденлы 16-сы Чернигов гв. атлылар дивизияһы II дәрәжә Кутузов орденына, уның 58-се һәм 60-сы гв. атлы полктары - III дәрәжә Суворов ордендарына, 62-се гв. атлы полкы - Александр Невский орденына, 148-се гв. артиллерия-миномет полкы - III дәрәжә Богдан Хмельницкий орденына лайыҡ була.

СССР Юғары Советы Президиумының 1945 йылдың 31 майындағы Указы менән 58-се гв. атлы полкының эскадрон командиры, гв. капитаны Корсун Николай Нестеровичҡа, 60-сы гв. атлы полкының 3-сө эскадроны пулеметсыһы, рядовой Панов Александр Семеновичҡа, 60-сы гв. атлы полкының 3-сө эскадроны пулемет расчеты командиры, гв. өлкән сержанты Черненко Николай Власовичҡа Советтар Союзы Геройы исеме бирелә.

Гв. капитаны Н. Н. Корсун ошо юғары исемгә ул командалыҡ иткән эскадрондың Бранденбург ҡалаһын алғанда күрһәткән батырлыҡтары өсөн лайыҡ була. Уның эскадроны, Зило-канал аша сығып, дошман окоптарына бәрәп инә һәм ҡала ҡырыйындағы өйҙәрҙе биләүгә өлгәшә. Корсундың яугирҙары артынан 2-се эскадрон да икенсе ярға сыға, әммә уның командиры сафтан сыға. Гвардия капитаны Николай Корсун, бер юлы ике эскадрон менән командалыҡ итеп, яугирҙарын дошмандың авиамастерскойҙарына табан әйҙәй. Атлылар, йыйыу цехына бәреп инеп, ундағы 100-ҙән ашыу бомбардировщикты ҡулға төшөрә, шулай уҡ хәрби мөлкәте менән 10 келәт һәм 6 вагон трофейға алына. Н. Н. Корсун 1911 йылда Полтава өлкәһенең Миргород районында тыуған, милләте буйынса - украин. 1941 йылдың авгусынан бирле фронтта була. Һуғыштан аҙаҡ Донецк өлкәһенең Константиновка ҡалаһында йәшәй.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

✓ *Тарихи хәҡиҡәтте белеү беҙҙең милләткә донъяла үҙ урынын тойорға, ғөмүмән, үҙен тойорға ныҡ ярҙам итте. Үҙгәртеп ҡороу осоронда башланған ҙур эштәрҙең емештәрен татыныҡ һәм әле лә беҙ уны тәләфләп бөтмәгәнбеҙҙер.*



# ӘҪӘРҘӘРЕБЕҘ тик туған телебеҙ генә

**Танылған шағир Рәйес Түләк, үҙенең исемһеҙ бер шиғырын 1958-ҙә, 1959-ҙа, 1960-та тыуыусыларға бағышлап, шулай ти:**

*- Быуындаштар! - Илле һигеҙҙәр һәм*
*Илле туғыҙҙар һәм алтмыштар!*
*Заман бүлде беҙҙең яҙмыштарҙы,*
*Ҡап урталай бүлде, яртышар.*
*Теге(не)һенә күнеп бөткәйнек тә,*
*Быныһына күнеп булмай һис.*

*Беҙ яртышар социалистар хәҙер,*
*Беҙ яртышар хәҙер капиталист.*
*Һәр кемебеҙ барыбыҙ өсөн тинек,*
*Барыбыҙ берәү өсөн тинек беҙ,-*
*Алмаштырҙыҡ, гүйә, илебеҙҙе,*
*Һәм алмашты, гүйә, динебеҙ...*

**Ошо уҡ шиғырында Рәйестең:**

*Беҙҙең быуын тәңгәленән һынды*
*Тотош ҡоролош ил эсендә,*

**тигән юлдары ла бар. Бөгөн беҙ ошондай заман һынылыштары осоронда тыуған тағы бер әҙибә - танылған прозаик, журналист, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат хеҙмәткәре, Ш. Бабич исемендәге Дәүләт йәштәр премияһы лауреаты, Мәхмүт Ҡашғари исемендәге хикәйәләр конкурсы лауреаты, Халыҡтар дуҫлығы ордены кавалеры Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА менән әңгәмә ҡорабыҙ.**

**Бер интервьюһында Рәйес прозаиктарҙың тыныс халыҡ булыуҙары хаҡында фекер йөрөтә. Ә шулай ҙа һин ике ҡоролош алмашынған, донъя түңкәрелгән осорҙо нисек кисерҙең?**

- Ҡоролоштар алмашынған ваҡытта беҙ үҙебеҙ ҙә йәш инек бит. Ә йәшлеккә һәр саҡ хәрәкәт хас. Ул үҙе үҙгәрештәр теләй. Шуға күрә миндә оптимистик рух еңгәндер тип уйлайым. Советтар Союзы бик ҡыбырлай алмаған, хәле ауырлашҡан бер кейек халәтенә ингәйне бит инде. Шуға ла "торғонлоҡ осоро" тигән термин да барлыҡҡа килгәйне. Үҙгәртеп ҡороуҙар осоро беҙҙең халыҡта ла ҙур өмөттәр уятты. Күпме тарих биттәре асылды. Мин быны бик мөһим тип уйлайым. Тарихи хәҡиҡәтте белеү беҙҙең милләткә донъяла үҙ урынын тойорға, ғөмүмән, үҙен тойорға ныҡ ярҙам итте. Юғиһә, беҙ бер төрлө генә идеологияла тәрбиәләнгән быуын инек бит. Үҙгәртеп ҡороу осоронда башланған ҙур эштәрҙең емештәрен татыныҡ һәм әле лә беҙ уны тәләфләп бөткәнбеҙҙер, тип уйламайым. Шул саҡта тиңдәр араһында тиңдәр булып йәшәү тигән лозунг ҡалҡып сыҡты. Элекке союздаш республикалар был мөмкинлек менән файҙаланды, хәҙер күрәбеҙ - һәр республиканың үҙ юлы бар. Мин Союз тарҡалғас та үҙем менән бергә Мәскәүҙә уҡыған курсташтарыма ҡунаҡҡа барып йөрөнөм. Ил сиктәре асыҡ ине. Күп нәмә күрҙем, аҡыл тупланым. Был минең өсөн донъя байлығынан ҡиммәтерәк ине. Үҙебеҙҙең ижадта ла ошо азатлыҡ рухы ныҡ тойолдо. Тап шул әҫәрҙәр киләсәктә лә уҡылыр тип уйлайым. Тик телебеҙ генә йәшәһен, ысын дәүләт теле булып ҡеүәтләнһен.

**Нимә генә тимәйек, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары, ғөмүмән, ҡатын-ҡыҙҙар көслөрәк, нығыраҡ шул. Аллаһҡа шөкөр, барығыҙ ҙа бөгөн ныҡҡа арҡа терәгән. Ошо йәһәттән үҙеңдең ҡәләмдәш әхирәттәрең тураһында нимә әйтер инең?**

- Ҡәләмдәш әхирәттәремдең һәр береһенең үҙ багажы бар, шуға ла уларҙың үҙҙәре һайлаған юлдан барыуы ҡиммәт, тип кенә әйтер инем. Дуҫтарымдың күпселеге һүҙ сәнғәтенең юғары стилендә ижад итә, йәғни шиғриәттә. Һоҡланам мин уларға. Шиғри һүҙ фекер тупланмаһы, уның үҙенсәлекле ҡуйыртмаһы - быңдай оҫталыҡҡа һәр кем өлгәшә алмай. Һәр шағирәнең үҙ образдар йондоҙлоғо. Шуның ярҙамында беҙгә донъяны асалар, күңелебеҙгә тәьҫир итәләр, дауалайҙар. Береһенең дә исемен атап тормайым, сиратҡа теҙгем килмәй.

**"Атай икмәге" хикәйәһе һәм китабың менән әҙәбиәт донъяһына килеп индең. Әгәр ҙә ошо хикәйәңде бөгөн, хәҙерге заман ысынбарлығы күҙлегенән яҙырға тура килһә, ул әҫәреңдең сюжеты, идея-тематик йөкмәткеһе нисегерәк булыр ине тип уйлайһың? Ул хикәйәңде мәктәп программаһына ингән классик әҫәр тип беләм.**

- "Атай икмәге" - минең студент саҡта яҙылған тәүге хикәйәләремдең береһе. Әле әҙәби телгә тәрән итеп инеп китмәгән, тимәк, ҡалыплашмаған бер осором. Ябай, аңлайышлы халыҡсан тел менән яҙылған ул. Ә образдарҙы яҙған саҡта күҙ алдымда барыбер үҙемдең яҡын кешеләрем торҙо. Улар персонаждарҙың характерын тыуҙырырға ярҙам итте, тип әйтә алам. Фронттан ҡайтҡан Ғәләм минең атайымдың образынан яҙылды. Бәләкәй Мотаһарҙы тасуирлаған саҡта кинйә Фәттәх ҡустым күҙ алдында ине. Хикәйәне үҙгәртеү, хәҙерге заман ысынбарлығы күҙлегенән яҙыуҙы күҙ алдына килтерә алмайымсы... Ул минең ҡулымдан осоп киткән бер ҡошсоҡ бит инде. Бер нәмәне генә әйтә алам, хәҙер яҙһам, шундай уҡ ихласлыҡ менән ижад итә алыр инемме икән? Бер үк йылғаға ике тапҡыр инеп булмай бит, мин йырған теге һыу күптән инде ағып киткән.



*Бөгөнгө көндә фантастика, фэнтези - минең иң яратҡан жанрым. Быға бәләкәйҙән әкиәттәр ятыуым да сәбәпселер. Һәр әкиәт хыял осошона саҡыра ине бит, әкиәттең тәьҫир итеү көсө бөтөнләй икенсе. Бөтә кешенең күңелендә лә бәләкәй бала йәшәй. Беҙ уны онотորға хаҡыбыҙ юҡ. Мөғжизәләр беҙҙе һәр саҡ үҙенә әйҙәй. Мин Йәннәтте әкиәт һымаҡ мөғжизәле тип уйлайым, йәғни мөғжизәле ысынбарлыҡ. Әкиәткә һөйөүҙә лә Йәннәткә ынтылыш ятмаймы икән?..*

**Фәрзәнә, беҙ һинең менән бер үк йылда, бер үк йондоҙлоҡ аҫтында донъяға килгәнбеҙ. Дини инаныу буйынса йондоҙҙарға ҡарап эш итеү хилафтыр, шулай ҙа сыҡҡан йылының һыуғоярҙары китаптарҙа "яҙыусы фантастар" тип нарыҡланған һәм икебеҙ ҙә фантастик әҫәрҙәр яҙабыҙ. Был осраҡлы тап килеүме, әллә бында ниндәйҙер аңлатма бармы, нисек уйлайһың?**

- Мин ғүмерҙә лә фантастик әҫәрҙәр яҙырмын, тип уйламай инем, хатта башыма ла инеп сыҡҡаны булманы. Сөнки башҡорт традицион әҙәбиәтендә ул бөтөнләй юҡ ине, тиерлек. Һин, Әхмәр, үҙең "ғәйепле". Бер мәл ниндәйҙер фантастик әҫәрең донъя күрҙе. Шунан Матбуғат йортонда фойела күрештек, теге әҫәр тураһында фекеремде еткерҙем. Ә һин тот та: "Фәрзәнә, әйҙә һин дә фантастика яҙ әле", - тинең. Минең яуап асыҡ: "Юҡ, минән булмай!" Тәҡдимең шаҡ ҡатырғыс тойолдо. Әммә күңелгә шик инеп ултырҙы бит. Үҙемде һынап ҡарамаҡсы булдым. Шул рәүешле "Остаз менән Нәркәс, йәки фанилыҡтағы хыял" тигән фэнтези яҙылды. Йылы ҡабул иттеләр, мин дә инде фантастик әҫәрҙәр яҙыу һәләтенән мәхрүм түгеллегемде аңланым. Бөгөнгө көндә фантастика, фэнтези - минең иң яратҡан жанрым. Быға бәләкәйҙән әкиәттәр ятыуым да сәбәпселер. Һәр әкиәт хыял осошона саҡыра ине бит, әкиәттең тәьҫир итеү көсө бөтөнләй икенсе. Бөтә кешенең күңелендә лә бәләкәй бала йәшәй. Беҙ уны онотորға хаҡыбыҙ юҡ. Мөғжизәләр беҙҙе һәр саҡ үҙенә әйҙәй. Мин Йәннәтте әкиәт һымаҡ мөғжизәле тип уйлайым, йәғни мөғжизәле ысынбарлыҡ. Әкиәткә һөйөүҙә лә Йәннәткә ынтылыш ятмаймы икән?..

**"Ҡорбанлыҡ йәки былай ғына алыш-биреш", "Тәгәрмәс ҡала йәки донъя кендеге" тигән фантастик повестарыңдың да ысынбарлыҡ менән хыял араауығын ялғарға тырышаһың? Ә тормошта һин үҙең хыялдар ҡороп йәшәйһеңме, әллә "Барыһы ла Аллаһ ҡулында, Ул нисек теләһә, шулай буласаҡ" тип күңеленде йыуатаһыңмы?**

- Күбеһенсә, Аллаһ ҡушҡанса, тием. Хәҙистә әйтелгәнсә, һәр кемгә ризыҡ алдан уҡ яҙылған бит. Тәҡдиргә ышанам. Мин булмышым менән прозаик, ғәҙәттә, шағирҙәр - хыялға бирелеүсән хисле кешеләр. Шиғыр яҙа алмауым хисләнеп китеп хыялға бик бирелеп бармауымдан, моғайын.

**Хәйбуллала, Урал аръяғында, Башҡортостанда һинең атайың менән әсәйеңде, башҡа туғандарыңды алдынғы ҡарашлы зыялы заттар итеп беләләр. Уларҙың һиңә ниндәй йоғонтоһо булды?**

- Эйе, атай-әсәй уҡытыусы булғас, уларҙың тәрбиәһе лә көслө булды. Беҙҙе артыҡ иркәләүсе булманы, һәр ауыл балаһы кеүек, эш-хеҙмәт менән үҫтек. Әсәй - ғаилә усағын дөрләтеүсе. Беҙ ғаиләлә алты бала үҫтек. Баш бала Әлмира апайым атай-әсәйгә ныҡлы терәк булды. Һәм, әлбиттә, беҙгә шәп апай. Әле лә яҡлаусы ла, ҡурсалаусы ла, ярҙам итеп ебәреүсе лә.

Ҡәрсәйем Камила тураһында айырым әйтергә кәрәк. Көслө ихтыярлы, тәүәккәл, эшһөйәр ҡәрсәйемдән күп нәмәгә өйрәндек беҙ. Ул Бүребай атлы байҙың иң өлкән ҡыҙы булған, һәм хужалыҡты алып барыуҙа атаһына ныҡ ярҙамсы була. Йәш сағында бәйгеләрҙә, ат сабыштарында ярышҡан, алдынғылыҡты бирмәгән. Ҡәрсәйем һәр саҡ беҙҙең эргәлә булды (атай-әсәй көнө буйы эштә). Сит йоғонтоларға бирешмәгән, милләтте һаҡлаған боронғо башҡорт ҡатын-ҡыҙының символы һәм ҡаҡшамаҫ ысын ҡалҡаны тип күҙ алдына килтерәм мин уны.

***✓ Дәһрилек, унан инде сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе үҙләштереү, ауылдарҙы эреләтеү кеүек йылдар халыҡ менталитетына ниндәйҙер үҙгәреш индергәндер, был бигерәк тә башҡорт мәктәптәренең кәмеүенә килтергән.***



Бәләкәй саҡта мәңгелек төшөнсәһе менән генә эш итәһең бит инде. Беҙ - туғыҙ кешенән торған ғаилә, мин уны тулы бер бөтөнлөк, тип ҡабул иттем, һәм һәр саҡ шулай булыр һымаҡ ине. Минең өсөн әле лә "туғыҙ" һаны тылсымлы бер көскә эйә кеүек.

Беҙҙең өйҙә иң ҙур урын биләгән китаптар булғандыр, моғайын. Атайым химиянан уҡытһа ла, күңел талабы буйынса ул тарихсы ине. Бик эҙләнеүсән журналист та сығыр ине унан. Сөнки ҡиммәтле, заманға кәрәк материалдарҙы таба белә ине. 1921 йылда "Вокруг света" журналында баҫылған Лизюковтың "Комбриг Мортазин" тигән очеркын да ул иң беренсе булып тапты. Артабан уны Ғ. Шафиҡовҡа, Д. Мәһәҙиевҡа ебәрҙе. Шулай яйлап комбриг тураһында материалдар донъя күрә башланы. Атайым миңә лә ҡыҙыҡ факттар, кешеләр комод тартмаһы тулып китте. Ә бит атай-әсәй уларға яуап яҙғаны ла булманы. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы буларaҡ, әсәйем Ғәлиәхмәт мәктәбендә түңәрәк алып барҙы, Йомабикә Аҡъюлова ла, мин дә тәүге иждад емештәрен шунда яҙҙыҡ. Бер уҡытыусыла белем алған буласаҡ ике профессиональ яҙыусы - был һасар күрһәткес түгел. Һәр хәлдә, минең әҙәбиәткә килеүемдә осраҡлылыҡ юҡ, тип әйтәм.

Әсәйем вафат булғас, төрлө тарафта йәшәгән уҡыусылары оҙатырға килде. Олпат ағайҙар. Ә беҙ әсәйҙең вафатын хәбәр ҙә итмәгәйнек. Бына шундай һөйөү һалып киттеләр улар уҡыусылары күңеленә, бындай һөйөүҙе бер нәмә менән һатып алып булмай.

Кесе туғандарым һәр береһе тормошта үҙ урынын тапҡан. Беҙ уҡытыусы ғаиләһенән булғас, уның ауыр хеҙмәт икәнен белеп-күреп үҫтек. мәл Ғәрәфә тауы менән бәйле. Мөхәммәт (с.ғ.с.) бәйғәмбәрҙең һуңғы хажы тураһында мин тетрәнеп уҡығайным. Шул мәлдәрҙе үҙемсә күҙ алдына килтереп баҫып торҙом. Бәйғәмбәребеҙҙең юлынан ошонда килеп етеүем менән сикһеҙ бәхет тойғоһо кисерҙем, һәм уның үҙе өсөн һуңғы хаж икәнен белеп вәғәз әйтеүен иҫкә төшөрөп, тәрән һағыш кисерҙем. Дөйөмләп әйткәндә, Ғәрәфә тауында баҫып тороуым - иң бәхетле мәлдәремдең береһе.

**▸ Яҡташтарың хәйбуллаларҙың йомшаҡ мөғәмәле, эскерһеҙ һәм ярҙамсыл булыуының тамырҙары нимәлә тип уйлайһың?**

- Үҫәргәндәр борон-борондан халҡыбыҙҙың йоларына тоғролоҡ һаҡлаған, ата-бабаларының аманатын тотҡан. Мотлаҡ үтәлә торған яҙылмаған ҡанундар ҙа бар бит. Би- әҙерләнем, уларҙың күпселеге радионың алтын фондында һаҡлана. Барлыҡ китаптарым ошонда эшләгән мәлдәремдә тыуҙы, нәшер ителде. Әле лә фондты байытыу өҫтөндә тырышлыҡ һалабыҙ. Эфирҙы тыңлаусылар кәмегәне юҡ - заман менән ҡуша атлайбыҙ, шул уҡ ваҡытта, тарихыбыҙҙы тауыштар аша һаҡлауға өлгәшәбеҙ.

**▸ Журналистикаға арналған ғүмер, тигәндә, нимәләр иң элек күҙ алдына баҫа?**

- Дипломымда яҙылғанса, мин журналист. Һәм ошо һөнәргә тоғролоҡ һаҡлайым. Мәскәү дәүләт университетының журналистика факультетында ниндәй генә милләт вәкилдәре уҡыманы! Үҙемдең дуҫтарым араһында журналист булып эш башлап, аҙаҡ һөнәрҙәрен алмаштырғандар ла байтаҡ. Төркмәнстандағы Гөлсөн дуҫым заманында ҡа- штаблы фекер йөрөткән баш мөхәррирҙе "идеялар генераторы" тип атанылар. Шул саҡта әллә күпме тарихтың билдәһеҙ биттәре асылды. Александр Матросовтың кем булыуы тураһында ҙур мәҡәләләр "Башҡортостан"да баҫылды, ә быларҙы эшләргә Рәүф Насыровты Мансур Әйүпов рухландырҙы, көс биреп торҙо. Барлай башлаһаң, ундай мәлдәр бихисап булды. Ул саҡта командировкаларға ла йыш сыға инек. Хаттар эҙенән миңә лә йөрөргә тура килде. "Йәшмен, аңлап бөтмәйем", тигән аҡланыу юҡ. Һин журналист, тикшерергә, проблеманы өйрәнергә, анализ, һығымта яһарға тейешһең - бына шундай сынығыу мәктәбен үттем мин. Ойоштороусы, киң фекер эйәһе Мансур Әнүәр улын артабан Аҡ йортҡа алдылар. Шул саҡта редакцияла эшләгән апайҙарҙың нисек итеп илағанына шаһит булырға тура килде. Мансур Әнүәр улы үҙенең ҡул аҫтында эшләгәндәрҙе онотманы. 1996 йылда миңә Ш. Бабич исемендәге Дәүләт йәштәр премияһы бирелгәс, Башҡортостан Республикаһының Дәүләт секретары М. Әйүповтан ҡотлау телеграммаһы килеп төштө. Мин уны

# КИЛӘСӘКТӘ ЛӘ УҠЫЛЫР,

## йәшәһен!

табып бирә ине. Өй китапханаһында атайымдың тарихҡа, тарихи шәхестәргә арналған китаптары күп булды. Белемле кеше буларaҡ, уға аралашыр кеше етмәүен дә беҙ тоя инек. Ләкин ул ата-бабаларының күп быуындар йәшәп, ҡаны тамған ерҙә ташлап китмәне. Улар аманатына тоғро ҡалам, тип ҡысҡырып әйтмәһә лә, үҙенең тормош принцибы шулай ине.

Әсәйем башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән уҡытҡас, тәбиғи, башҡорт әҙәбиәтенә бай инек. Ғилми хеҙмәттәр ҙә ҙур урын биләне. Мин бишенсе класта уҡығанда Ә. Харисовтың "Башҡорт әҙәбиәте тарихы"н йотлоғоп уҡып сыҡтым. Ул миңә беҙҙең фолклорҙың, рухи ҡомартҡыларҙың шул тиклем күп һәм бай булыуын асты. Бынан ары үҙ тарихыңа битараф ҡалыу мөмкин түгел ине. Атай-әсәй менән ҡуша беҙҙе китаптар ҙа тәрбиәләне.

Шуны ла әйтергә кәрәк, минең әсәйем - Ишембай районы ҡыҙы. Үҙенең тыуған ауылы Аҙнайға мөкиббән киткән кеше булды. Ауылын, ауылдаштарын, туғандарын һағынмаған, һөйләмәгән көнө булмағандыр. Ул яҡтың үҙенсәлеген, матурлығын беҙ ҙә күңелебеҙгә һеңдереп үҫтек, тип раҫлай алам. Мин бәләкәй саҡта, әлбиттә, бөтә ғаиләләрҙең дә китапханалары бар, һәм тиңдәштәрем минең шикелле үк унда ҡаҙына, тип уйлай торғайным. Йылдар күҙлегенән генә тормош кимәленең төрлө булғанын аңлайһың.

Беҙ Тураттан күсеп киткәс, атай менән әсәйҙең уҡыусылары йылдар буйы уларға хат яҙып, открыткалар ебәреп торҙо. Килгән хаттар менән Бәлки шуғалыр ҙа, беребеҙ ҙә ул юлдан китмәнек. Ә бына атай-әсәйҙең ейәндәре араһында династияны дауам итеүселәр бар. Һөнәр һайлағандан һуң, атайымдың иғтибары мине үҫтерҙе. Атайым минең өсөн бөтәһе лә - остаз ҙа, арҡа терәр кешем дә, ғорурлығым да, алға әйҙәр рухташым да, кәңәшсем дә, идеолог та булды. Уның тураһында мин сәғәттәр буйы һөйләй алам. Ул ысын мәғәнәһендә атай булып ҡалды. Атайым был донъянан киткәс, минең өсөн ер шары яртылай кителеп төшкәндәй тойолдо.

**▸ Хажға сәфәр ҡылыуың тормошҡа, йәшәйешкә ҡарашыңды ниндәй кимәлдә үҙгәртте? Барырҙан алда күҙ алдына килтерелгән хаж менән ысынбарлыҡтағыһы араһында ниндәй айырма бар?**

- Хаж менән томошҡа булған ҡарашымды ҡырҡа үҙгәртте, тип әйтә алмайым. Ә инаныуымды нығытты, ниндәйҙер икеләнеүҙәргә урын ҡалдырманы. Хажға әҙерлек, ғәҙәттә, алдан башлана, шул уҡ ваҡытта күңелдә шик ҡорто ла кимерә ине: миңә хажға юл асылырмы-юҡмы? Сөнки юлдың асылыуы Хаҡ Тәғәләнең ихтыярынан бит. Аллаһыма шөкөр, оло хажға юл асылды. Еңел түгел оҙон юл үтеүҙәре, унда ла һынауҙар көтөп кенә тора.

Әхмәр, был һорауҙы юҡҡа бирмәгәнһеңдер, һинең атайың Ғүмәр хәҙрәт менән бер сәфәрҙә булдыҡ бит. Баймаҡтар күп кенә ине ул йылды. Һуңынан да ошо хажиәләр менән күрешеп торҙоҡ. Кисерештәргә килгәндә, минең өсөн иң тулҡынландырғыс герәк тә урман яғы башҡорттарының шул ҡанундарға тоғролоҡ һаҡлауын әйтергә кәрәк. Сәйәсәт йоғонто яһамай ҡалмаған. Дәһрилек, унан инде сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе үҙләштереү, ауылдарҙы эреләтеү кеүек йылдар халыҡ менталитетына ниндәйҙер үҙгәреш индергәндер, был бигерәк тә башҡорт мәктәптәренең кәмеүенә килтергән. Әлбиттә, хәҙер ҙә туған тел мәсьәләһендә шаҡтай ҡатмарлыҡтар бар. Ләкин иманын һаҡлаған, үҙ тарихын белгән халыҡ бөтмәҫ, тип, үҙебеҙҙе йыуатабыҙ.

**▸ Һин 1991 йылдан алып Башҡортостан радиоһына тоғролоҡ һаҡлайһың. Һине был эштә нимә тота, әллә комфорт зонаһына сығырға ҡурҡаһыңмы?**

- Бында ла яҙмыш ҡушыу буйынса эшкә килдем. Университетты тамамлағас, мине бит туп-тура "Башҡортостан" гәзитенә эшкә алғайнылар. Гәзиттең ул саҡтағы баш мөхәррире Мансур Әйүпов практика үткәндә үк әле: "Һине эшкә алам", - тип әйткәйне. Яратҡан гәзитемдә биш йыл эшләнем. Бер тапҡыр телестудияның генераль директоры Салауат Килдиндан интервью алырға ебәрҙеләр. Һөйләшеп-әңгәмәләшеп ултырғандан һуң Салауат Әмирхан улы мине компанияға эшкә саҡырҙы. Бына шулай радиоға барып индем. Унда ла, Аллаһы Тәғәлә шулай ҡушалыр, тип уйлағайным. Әлхәмдүлилләһ, өс тиҫтәнән ашыу осор һөҙөмтәле булды - күпме зыялы заттарыбыҙ менән тапшырыуҙар һарманлыҡ күрһәтте. Афғанстанда алыштар барған ерҙәрҙән репортаждар эшләне. "Танк өҫтөндә лә ултырып йөрөргә тура килде", тине миңә. Шул командировка өсөн Төркмәнбашы уға фатир бүләк иткәйне. Бөгөн Гөлсөн үҙе йәш журналистарҙы әҙерләй, университетта уҡыта. Һирәкһаяҡ булһа ла мәҡәләләрен ебәрә, улар беҙҙең матбуғатта баҫылып сығып тора. Бына шулай, элекке төркөмдәштәр менән аралашып торабыҙ.

Алда әйткәнемсә, практика үткән саҡта уҡ Мансур Әнүәр улы мине төрлө жанрҙа еңел эшләй алған, аналитик фекер йөрөтә белгән журналист тип таныны һәм мине эшкә алып ҡаласағын әйткәйне. Ысынлап та, һүҙендә торҙо. Университетты тамамлап ҡайтыу менән "Башҡортостан" гәзите редакцияһында эшкә сумдым. Мансур Әнүәр улы үҙе лә был гәзиттә сағыштырмаса яңы эш башлаған мөхәррир ине. Үҙгәртеп ҡороу менән бәйле илдә, республиканы төрлө яҡҡа тартҡылаған бер осорға тура килде ул һәм бына шундай ҡатмарлы ваҡытта үҙенең ысын лидер икәнен күрһәтте. Республика матбуғатында ла "Башҡортостан" гәзитен лидер итеп күтәрҙе. Гәзит "Совет Башҡортостаны"нан "Башҡортостан"ға әйләнде. Уға исем үйлау тарихы ла бик бәхәсле барҙы. Тотош илдә тартҡылашыуҙар, ығы-зығы, болғансыҡ мәлдә баш мөхәррир гәзиттең йүнәлешен асыҡ билдәләне, республика бөтөнлөгөн һаҡлауҙа гәзиттең роле ифрат та ҙур ине. Тәрән мас- ҡәҙерләп һаҡлайым. Гәзиттә биш кенә йыл эшләһәм дә, ул минең ғүмеремдең оҙон бер осоро кеүек тойола. Бәрәкәтле йылдар булды. Радиола эшләһәм дә, матбуғат баҫмалары менән араны өҙгәнем юҡ. Һәр хәлдә, "Киске Өфө"лә мәҡәләләрем йыш сығып тора.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Яҙғандарың араһында иң төп әҫәреңде ҡайһыһы тип атар инең?" тип һораныҡ яҙыусынан әңгәмә аҙағында. "Һәр әҫәр йөрәктән сығып яҙыла, - ти ине әҙибә.- Һинең йәнеңдең, күңелеңдең бер өлөшө булып ҡойола. Шуға ла "Төп әҫәрем шул!" тип береһен дә атағаным юҡ. Ә бына уҡыусылар ҡайһыныһын минең төп әҫәрем тип һанай икән? Быныһы ҡыҙыҡ. Иң уҡымлылылар иҫәбенә "Атай икмәге"н индерә алам. Шул уҡ ваҡытта, элек яҙған ҡайһы бер хикәйәләремде "Бөгөнгө көн ҡаҙағына һуға бит!" тип шылтыратып әйтеүселәр бар. Бына шул шаҡҡатыра мине. Һәр заман өсөн дә көнүҙәк булып ҡалыр әҫәрҙәр була, уны махсус рәүештә яҙмайһың. Был мөмкин дә түгел. Бер ваҡыт шул әҫәр "Бына мин һеҙҙең йөрәгегеҙгә бөгөн тәьҫир итәм, шуның өсөн алдан яҙылып ҡуйғайным", тигән кеүек ҡалҡып килеп сыға. Әҫәрҙәр тере йән кеүек икән ул..."**

**Әйткәндәй, Фәрзәнә Аҡбулатованың "Таш ҡәлғә" исемле фэнтэзи-хикәйәһе гәзитебеҙҙең киләһе һандарында донъя күрәсәк.**

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ
әңгәмә ҡорҙо.

**✓ Юлдары һаҙлыҡ ерҙән үткәнгә күрә, аттарына талдан ҡата ла үреп кейҙереп алдылар. Ирәндек буйында ғүмер иткән Буранбай өсөн ат тояҡтарындағы ҡаталарға ҡарауы оло кинәнес тә, мәрәкә лә ине.**

# БУРАНБАЙ

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**

**(Тарихи-фәлсәфәүи романдан өҙөк)**



Буранбай улы өсөн йәне өҙөләр сиккә етеп ярһыған атай кешене артабан тынысландырырға тырышыу, киреһенсә, ярһытасағын тамам аңланы. Быньдай саҡтарҙа ул һәр ваҡыт ундай кешенең урынына үҙен ҡуйып ҡарай. Ысынлап та, ошондай саҡта ни эшләр ине икән үҙе лә? Ныҡ ярҙам итә был хәләте. Шуға күрә ул Юлбарысты ыңғайына һыпырҙы.

- Эңер төшөүгә Верхнеурал яғына бергәләп ҡуҙғалырбыҙ, Юлбарыҫ ҡорҙашым, - шунан уландарына ишаралап, - Ҡыҙыл йылғаһына тиклем Ҡужәхмәт менән Баймөхәмәт беҙҙе оҙатып барыр, Ишмөхәмәт сәсәнгә лә һуғылырбыҙ...

- Килештек...

...Юлбарыҫ өсөн иң ауыры эңерҙе көтөп алыуы. Уландары аталарына ҡарап сабырһыҙлана. Буранбай иһә берсә ҡорҙашына, берсә Ҡужәхмәт менән Баймөхәмәткә ҡарап ала. Аталарының ауыҙына ғына ҡарап үҫкән аҙауандай уландары Юлбарыҫтың хәрәкәттәрен бермә-бер ҡабатлай. Имамға ҡарап ойоп намаҙ уҡыған мосолман кеүектәр. Артыҡ бер хәрәкәт тә яһамайҙар, хатта ым-ишаралары ла аталарыныҡы. Тауыштары ла оҡшаш. Мәмерйә эсендә эңер төшкәнсе аталы-уллы Бикбулатовтарҙы ситтән күҙәтеүенән оло кинәнес табып ултырҙы Буранбай. Юлбарыҫ үҙенә лайыҡлы алмаш булырлыҡ уландар үҫтергән. Улар аталарына оҡшап күп һүҙле түгелдәр, сәғәттәр буйына бер һүҙ ҙә әйтмәйенсә ултыра алалар...

Өйрәнгән ғәҙәте буйынса үҙе лә улдарын иҫләп, үҙен Юлбарыҫ урынына ҡуйып ҡараны. Егерме бишен тултырған Зөлҡәрнәйе хорунжий хәрби дәрәжәһен йөрөтә, утты-һыуҙы кисеп, Парижды яулап, күкрәгенә көмөш миҙал тағып ҡайтты. Егермеһе менән барған Нәүширбаны аң-белемгә ынтыла, уҡымаған китабы, белмәгән нәмәһе юҡ. Ағаһының үксәһенә баҫып килеүсе Йыһаншаһы ла йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтергәне, көрәштә тиңдәштәренә билен биргәне юҡ. Ун бишенсе йәше менән барған Мөхәмәтшаһына ҙур өмөттәр бағлай атаһы. Ул, моғайын, атаһы һымаҡ ҡурайға, йырға әүәҫ булыр. Бер йәше лә тулмайса сәңгелдәгендә ятып атаһын оҙатып ҡалған Йәҙгәрғужаһы, моғайын да, ағаларының береһенең артынан эйәреп йөрөр, ғәҙәт, ҡылыҡ үҙләштерер. Хәйер, бишектәге бишкә төрләнә. Нимә генә тимә, яҙмышының ошондай боролошонан һуң Йәҙгәрғужа атаһының артынан эйәреп йөрөй алмаҫ. Ошоларҙы уйлағас, Буранбайҙың күҙҙәренә йәш тығылды. Улдарын уйлап үҙәкһеп, бәғерҙәре ташып, йөрәге тулап китте. Юлбарыҫтың да уландары әле эргәһендә, улар бер-береһенә терәк, терһәктәре менән бер-береһен тоя ала. Кем генә белһен инде, иртәгә улар менән нимәләр булырын? Үҙҙәренә әйтмәй генә сыҙап ултыра Буранбай. Бер-береһенә ҡарап йыуанып, ара-тирә йылмайышып ултырған аталы-уллы өс ир-уҙаманы бер нисә һағыттан һуң мәңгелеккә хушлашасаҡ, хатта бәхилләшеп тә өлгөрмәйәсәктәр. Юлбарыҫтың тайшанмаҫ рухын, өҫтәүенә, ыҡҡа килтереп булмаҫтай холҡон белгәнгә күрә лә, алдағы көндәрен үтәнән-үтә күрә ул. Әммә ҡорҙашының яҙмышын бер нисек тә үҙгәртә алмаясаҡ.

Холҡоң ниндәй булһа, яҙмышың да шулайҙыр. Юлбарыҫ, Хаҡ Тәғәлә маңлайына яҙылғанды күрмәйенсә, туҡталып ҡала торған заттан түгел. Уның асылына бәйле был хәләтен һарылар араһынан әүлиә зат Ҡотлобай ҙа күргән. Был хаҡта Буранбайға Юлбарыҫ үҙе үк әйтеп ысҡындырҙы. Һөйләргә теләмәһә лә. Буранбай иждиһатын һалып, уландарынан аяҡ-ҡулдарын бәйләтеп, Юлбарыҫты Талҡалаға ебәрмәй ҙә алып ҡала ала. Тик улының азатлығы хаҡында Себергә үҙ теләге менән юлланыусы атайҙың юлын киҫеп, Буранбай Хаҡ Тәғәләгә ҡаршы бара алмай...

...Аҡшамдан һуң ҡуҙғалдылар. Тәүҙә шырлыҡ араһында асыҡлыҡҡа арҡанлап ҡуйылған Буранбайҙың атын барып табып алдылар. Юлбарыҫ юлдаштарын тик үҙенә генә билдәле булған йәшерен һуҡмаҡтан алып китте. Юлдары һаҙлыҡ ерҙән үткәнгә күрә аттарына талдан ҡата ла үреп кейҙереп алдылар. Ирәндек буйында ғүмер иткән Буранбай өсөн ат тояҡтарындағы ҡаталарға ҡарауы оло кинәнес тә, мәрәкә лә ине. Ат тояғы тауышы ишетелмәһен өсөн уларға күндән тегелгән ойоҡтар кейҙергәндәрен күргәне бар ине уның, ҡаталарҙы тәүге тапҡыр күреүе. Әле күрерҙәре бар икән был донъяла, шуға ҡыуанды ул. Хоҙай уның юлына әленән-әле мөғжизәләр сығарып һөйөндөрөп кенә тора.

...Төн уртаһы уҙыуға юлдары Ишмөхәмәт сәсәндең Балапан ауылына килеп төртөлдө. Буранбай ауылды янындағы тауына ҡарап таныны. Аттарын Саңдүҙәк буйында ҡалдырып торҙолар. Эйәр-өпсөндәрен ҡуйы таллыҡ араһына тыҡшырҙылар. Буранбай юлдаштарын Әйүкә тауына алып менде. Өйташҡа үҙ өйөнә ингәндәй әйҙүкләне. Усаҡ дөрләтеп ебәрҙеләр. Күңелле булып китте. Ишмөхәмәт Буранбайҙың тағы ла әйләнеп килерен белгәнгә күрә мәмерйәлә ҡапылда ятып йоҡларлыҡ түшәк, сәй ҡайнатып эсергә баҡырса, турһыҡта һыу, кипкән ҡорот, ҡаҡ ҡалдырған булған.

Ташөй ҡунаҡтарын иң аптыратҡаны шул булды. Көтмәгәйнеләр, ҡапыл мәмерйәгә Ихсан килеп инде.

- Саңдүҙәк буйында ҡалдырған аттарығыҙға ҡарап бында килгәнегеҙҙе белдем, һаумыһығыҙ, ағайҙар, - тип төнгө ҡунаҡтарҙың һәр ҡайһыһы менән күрешеп, исемен әйтеп танышып сыҡты Ихсан. - Ишмөхәмәт ағай ҡарауыллап торорға ҡушҡайны...

- Рәз буйынан бик тиҙ килеп еттек, Ихсан туғаным... - Буранбай уны күптәнге танышылай ҡосаҡлап уҡ алды ла, йылмайып. -Күрешмәй тороуыбыҙға теүәл бер тәүлек үткән...

- Иркенләп баш терәп алығыҙ. Үҙ өйөгөҙҙә һымаҡ булығыҙ, - Ихсан ҡулындағы төйөнсөгөн Буранбайға һуҙҙы. - Ҡапыл да тамаҡ ялғарлыҡ та ризыҡ бар бында. Ишмөхәмәт ағайға һеҙҙең килгәнде хәбәр итермен...

Ихсан хушлашып сығып киткәс, төнгө ҡунаҡтар ашанып алдылар ҙа, баш терәнеләр. Нисек тиҙ ойоп китһәләр, шулай уҡ уянып та киттеләр. Дөрөҫөрәге, уларҙы өйташҡа таңнамаҙҙан килеп инеп, үҙҙәренә ирәүәнләнеп йылмайып ҡарап баҫҡан Ишмөхәмәт сәсән уятты.

- Торналарҙан "Торайыҡ, торайыҡ!" сәләмдәр алып килдем... - Өйташтағылар алдан һөйләшеп ҡуйғандай бер юлы күҙҙәрен асты. Һәр ҡайһыһының иғтибары Юлбарыҫ йоҡларға ятҡан мөйөштәге буш урында ине, быға Ишмөхәмәт сәсән дә иғтибар итеп өлгөргән. - Ә дүртенсегеҙ, Юлбарыҫ ағай ҡайҙа булған? Ихсан, ул да килде, тиеп һөйөнсө сәйе эскәйне...

- Һай, күҙ-ҡолаҡ булалманыҡ, - Буранбай ҙа ыуалана башланы. - Ул Талҡалаға киткән, әйттем, тыңламаны. Улы Йәрмөхәмәтте Стәрлелә аманатҡа алып Ырымбурға оҙатҡандар. Юлбарыҫтың Верхнеуралға килеп етеүен талап иткәндәр...

- Верхнеуралға? Был мәкерле тоҙаҡ... - Ишмөхәмәт сәсән Юлбарыҫтың уландарына төбәп өндәште. - Уны ҡыуып етеп кире борорға кәрәк булыр, туғандарым...

- Беләгүрә...

Ул арала Ихсан мәмерйәгә аяҡ баҫты. Төнгө ҡунаҡтар менеп килгән аттарҙың эйәрҙәрен һалдырып тәрбиәләгәндә дүртенсе аттың тулмауын ул да еткерҙе.

- Тәүҙә ат ҡараҡтарылыр тип уйҙағайным. Әгәр ҙә улар буһа, бәйле торған аттарҙың барыһын да алып китерҙәр ине, - тине Ихсан мәмерйәлә бер кешенең юғалыуына ишаралап.

Осрашыу шатлығы нескәлектәренә бирелеп торорға ваҡыттары юҡ. Тиҙ генә хәл иттеләр. Ҡужәхмәт менән Баймөхәмәт аталары артынан Талҡала тарафына ҡыуа төштө. Уларға Ихсан, Ишмөхәмәт сәсән теле менән әйткәндә, "тапҡыр юл" күрһәтеп барырға булды. Ишмөхәмәт менән Буранбай мәмерйәлә уларҙы көтөп ултырып ҡалды. Ике сәсән өнһөҙ генә аралашты. Күңелдәренә килеп эркелгән борсолоуҙары ошолай өнһөҙ генә әңгәмәләшеүҙе талап итә. Хәйер, илгә дандары таралған ике йырау-сәсән тик тойғо аша ғына күңел-ара хәбәрләшеү маһирлығына икеһе лә күптәнән эйә ине. Телдәре бер нәмәне тылҡыр, күңелдәре икенсене тойор хәләттә лә түгелдәр. Шулай ҙа Ишмөхәмәт сәсән туғаны Ихсандың үҙенә бирелгән бер һорауына бәйле мәрәкәне иҫенә төшөрөп көлөшөп алдылар.

Ихсан Буранбайҙы Рәз яғына оҙатып ҡайтҡас, Ишмөхәмәт ағаһынан ни өсөн "айыуҙың айыуға һунар итмәүенең" серен һорашҡан икән. Өҫтөнән төшмәй төбәшкәс, сәсәнгә айыуҙарҙың кинәйәһен аңлатып бирергә тура килгән. Буранбай Ҡотосовтоң бөрйәндәрҙең Кинйәбулат ауылында "айыуҙар" араһына ҡарауын белгәндән һуң Ихсан сабыйҙарса ҡыуанып йөрөгән. Ихсан менән Баязиттың үҙе хаҡындағы һәр бер мәғлүмәткә уғата иғтибарлы булыуын ағалары Ишмөхәмәт сәсәндең йоғонтоло тәрбиәһенән килеүен Буранбай бик яҡшы аңлай. Алдағы йылдарҙа уларҙың ил таяныр ир-азаматтар, кәмендә йорт старшиналары, дистанция начальниктары булып китерен дә яҡшы төҫмөрләй.

Талҡалаға киткән сапҡындар төштән һуң ғына Балапанға ҡайтып еттеләр. Менгеләре ҡара тиргә батҡан. Егеттәрҙең күңелдәре төшөнкө, яурындары һәленке. Күҙҙәренә йәш тулған. Ҡужәхмәт менән Баймөхәмәт аталарын ҡыуып етә алмаған. Юлбарыҫ иртә таңдан Верхнеурал өйәҙ судына барып башын һалған. Уны көслө ҡарауыл аҫтында шунда уҡ ашығыс рәүештә Себер тракты буйлап Иркутск яғына алып киткәндәр. Буранбай менән Ибраһим ҡасып киткәндән һуң бер тапҡыр ауыҙҙары бешеп, ҡоттары алынған гарнизон командирҙары тимерҙе ҡыҙыуында һуғырға булған.

**(Аҙағы. Башы 4-5-се һандарҙа).**

*ТАРИХИ БЕЛЕШМӘ*

## КЕМ УЛ БУРАНБАЙ?



Буранбай сәсән Ҡотосовтоң тыуған йылы, урыны тураһында төрлө сығанаҡтарҙа төрлөсә яҙып килделәр. Уның хаҡында бихисап легенда-риүәйәттәр һөйләнелә, һәр береһендә шул мәғлүмәтте еткереүсенең Буранбайҙы үҙенең яғында тыуған тип күрһәтеүе лә аңлашыла.

Барлыҡ был буталсыҡтарға нөктәне атаҡлы тарихсыбыҙ Әнүәр Әсфәндиәров ҡуйҙы. Ул, ревизия мәғлүмәттәренә (архив документтарына) таянып, Буранбайҙың 1765 йылда хәҙерге Баймаҡ районының Кинйәбулат (хәҙер Буранбай) ауылында тыуыуын раҫланы. Ғалимдың был тикшереүҙәре "Буранбайҙың яҙған хатын уҡып" тигән баш аҫтында 2002 йылда "Йәшлек" гәзитенең 12-се һанында (2 февраль) баҫылып сыҡты. Ғалимдың вафатынан һуң, 2016 йылда, Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә шул исемдәге тик архив материалдарынан ғына торған китабы ла донъя күрҙе.

Буранбай Ҡотосов 1798 йылдан башлап тәүҙә 6-сы башҡорт кантонлығында, үҙәге Иҫке Сибай ауылында, резерв дистанция начальнигы - хеҙмәткә китеүсе команданы Ырымбур, Арал хәрби сик буйы линияларына оҙатып йөрөүсе хеҙмәткәр булып тора. 1811 йылда 1 мең яугирҙан төҙөлгән резерв команданы етәкләй. 1812 йылда ул ете ауылға йорт старшинаһы итеп һайланып ҡуйыла.

Артабан уның яҙмышы көтөлмәгән йүнәлеш ала. 1820 йылда Буранбай, ялған яла яғылып, Себергә һөрөлөргә дусар ителә. Каторгаға китеп барышлай юлда ҡаса һәм уның ҡасҡынлыҡта, билдәһеҙлектә үткән көнитмеше башлана.

Буранбай сәсән халыҡ араһында киң таралыу алған "Буранбай", "Ялан-Йәркәй", "Һыр", "Тәфтиләү", "Хажиғәли", "Иркутский", "Бөҙрә тал", "Сәлимәкәй", "Аҡ яурын сал бөркөт" йырҙарының авторы. Тыуған ауылы Буранбай исемен йөрөтә. Баймаҡ ҡалаһында Буранбай сәсән урамы бар. Тыуған ерендә уға стела асылған.

✓ "Хыялыңда ниндәй образ йөрөтәһең?" тигән һорауға яуап бирергә ҡыйынһынды шулай ҙа Гөлфирә. "Ниндәй роль бирәләр, шуны уйнайым", - тиеү менән сикләнде.



ИЖАДХАНА

**Башҡортостандың халыҡ артисы Гөлфирә Сафиуллина быйыл бер түгел ике юбилейын билдәләй: ғүмер үрҙәрен артылыуына - илле, Өфө дәүләт сәнғәт институтын тамамлап, ижад ғүмерен башлауына утыҙ йыл. Сәхнә алиһәһе Гөлли Мөбәрәкова йыйған төркөмдә уҡыуын, Хөрмәт Үтәшев, Нурия Ирсаева, Рәфил Нәбиуллин кеүек Мастерҙарҙан сәхнә һабаҡтары алыуын яҙмыш бүләге тип иҫәпләй. Тәүге ролдәре - Р.Киплингтың "Маугли"һындағы инә бүре Ракша, П.Кальдерондың "Мөхәббәт менән шаярмайҙар" спектаклендә хеҙмәтсе ҡыҙ Инесса. Ошо ролдәре менән Салауат башҡорт дәүләт драма театры сәхнәһенә аяҡ баҫа. Һәр образы аша сәхнәнән тормош дәресе биреүсе актрисаны сәхнә тигән мөғжизәле донъя менән тоташтырған, шәхес итеп үҫтергән ҡиммәттәр хаҡында әңгәмәләштек.**

# ҺӘР ОБРАЗЫ АША...

## сәхнәнән тормош дәресе бирә ул





Илай-илай, көлә-көлә, йырлай-йырлай сәхнәгә сығарған ролдәре - бихисап уның. Тамашасыларҙы ла илата, көлдөрә, йырлата, иң мөһиме, уйландыра. Бөгөн ул - һәр жанрҙа ла берҙәй уңышлы эшләп килгән актриса. Утыҙ йыл арымай-талмай хеҙмәт итһә лә сәхнәгә йылдан-йыл нығыраҡ ғашиҡ була бара. "Сәхнәне яратҡан кеүек, башҡа бер һөнәрҙе лә ярата алмаҫ инем. Сәхнә мине асты, үҫтерҙе, мин үҙемде сәхнәлә таптым", - ти ул күңеленә киңәнес, ләззәт, үҙ-үҙенә ышаныс биргән һөнәре тураһында.

Ә бала сағында "Минең артист булғым килә!" тигән уйын хатта үҙенә ҡысҡырып әйтергә лә ҡурҡа. Ғүмергә лә буй етмәҫлек хыял булып тойола уға сәнғәт донъяһы. Мәктәпкә лә төшмәгән ҡыҙын үҙе менән бергә фермаға эшкә йөрөткәндә: "Гөлфирәм Башҡортостандың халыҡ артисткаһы булыр!" - тип уйланымы икән әсәһе Хәҙисә апай? Хәҙер генә ул күп ғаиләләрҙә балаларына һөнәр һайларға йүнәлеш биреү, репетиторҙарға, кастингтарға йөрөтөү, белгестәргә күрһәтеп кәңәшләшеү яйға һалынды. Элегерәк, тәтеһә, ҡала балаларына тәтегәндер ул бәхет, ә ауыл әсәйҙәренең балалары менән кем булырға хыялланыуы тураһында һөйләшеп ултырырға ваҡыттары булдымы икән? Ай-һай... "Кырылмаһа ҡырҡ эш ярылып ята, ана, һыйыр һауылмаған, ниндәй хыял ти ул!" - ауыл ҡатындарының иңенә төшкән бурысты теүәл һәм күршенән артығыраҡ итеп үтәргә теләүҙә тыуған сәм ҡатыш эске ярһыуы, яҙмышҡа зарланыуы - ошолайыраҡ булды ауыл әсәйҙәренең балалар күңеленә асҡысы. Хыялланырға яратҡан бала сәйерерәк тә күренгәндер әле. Шуға ла ундай балаларҙың уй-хыялдары төпкәрәк йәшеренгәндер, мәңге буй етмәҫтәй тойолғандыр...

Хәҙисә апай балаларының хыялына ҡаты бәрелмәй бәрелеүен. Уҡырға төшкәнгә тиклем үк һыйыр һауырға өйрәнеү Гөлфирәнең үҙенең тыуымыштан килгән бөтмөрлөгөнән. Бәләкәс кенә Гөлфирәгә әсәһенең "Волга" ҡушаматлы һыйыры эйәләшә. "Волга"ның мине әллә ҡайҙан танып, көтөп тороуын мин дә һиҙәм. Биҙрәмде тотоп, эргәһенә барып баҫҡас, тәүҙә һаулыҡ һорашам, муйынынан, яурындарынан яратып алам. Арҡаһынан яратырға буйым етмәй, үҙем уның бото буйлыҡмын ғына бит әле. Һөйләшеп алабыҙ. Мине һағынып көтөүен аңлатырға теле генә юҡ ине уның. Шул тиклем аҡыллы, тыныс, матур холоҡло һыйыр ине", - тип һөйләп алып китте Гөлфирә бала сағы тураһында ауыл ҡыҙҙарына ғына хас ихласлыҡ менән. "Артист булыу тураһында хыялланыу түгел, уйларға ла ҡурҡтым", - тиһә лә, артист булыр өсөн яратылған булған ул, тигән уй тыуҙы миндә, сөнки артистар ғына ошолай тыуымыштан ҡуҙатеүсән бул, һәр ым, һәр ишараны аңлай, баһалай беләләр. Яратҡан һыйырына ғына ниндәй баһалама биреп ҡуйҙы! Хыялынды ҡысҡырып әйтергә ҡыйыулыҡ та кәрәк - ҡыйыулығы етмәгәндер, үҙбаһаһы түбәнерәк булғандыр - ауыл тәрбиәһе өсөн быныһы ла тәбиғи.

"Ә шулай ҙа әсәйем миңә йыш ҡына: "Үҫкәс, минең кеүек фермала йөрөмәҫһең инде, врач йә уҡытыусы булырһың", - тип әйтеп ҡуя торғайны. "Минең артист булғым килә..." тигән уйымды уға әйтмәйем. Әйтһәм, үҙе лә йырларға, бейергә яратҡан, ауыл клубы сәхнәһендә ҡуйылған спектаклдәрҙә ҡатнашҡан кеше мине аңлар ине, моғайын. Атайым да аңлар ине. Сәнғәт кешеләрен ихтирам итә ине ул. Гастролгә килгән артистар беҙҙә ҡуна ҡалһа, таң атҡансы йырлашып ултыра торғайнылар. Оҙон көйҙәрҙе ғәжәп матур йырлай ине. Ул да концерттарҙа ла, спектаклдәрҙә лә ҡатнашты. Әсәйемде лә, спектаклдәге бер роленән һуң "Ғәлиә" тип атап алып киткән, яратып, "Ғәлиәм", тип кенә өндәшә торғайны. Ошо исем әсәйемә лә оҡшанымы икән, исемен үҙгәрткәнгә бер ҙә ҡаршы булманы, бөтә ауыл уны атайым ҡушҡан исеме менән йөрөттө. Йәл, актриса булып китеүемде күрмәне атайым, ул донъя ҡуйғанда миңә ун дүрт кенә йәш ине әле".

Мәктәпте тамамлаған йылында Өфө ҡалаһында ашнаҡсы булып эшләп йөрөгән Райхана апаһы: "Кем булғың килә, туғаным?" - тип һорамаһа, хыялдарын ҡысҡырып һөйләргә ҡурҡҡан Гөлфирәнең ҡапыл ләһа асылып, "Артист булғым килә!" тип яуапларға көсө етмәһә, уның хыялы ла хыял ғына булып ҡалыр ине. Тырыш ҡыҙ ҡайҙа ла уҡырға инер ине барыбер, әсәһенең кәңәшен тотоп, уҡытыусы булыр йә журналистиканы һайлар ине. Филәрисә апаһы ла актриса булырға хыялланған, хыялына буйы етмәҫтәй тойолғас, медучилищеға уҡырға инеп, фельдшер булып киткән. Ә Гөлфирәнең, ғаиләләге иң кесе ҡыҙҙың, хыялы өсөн яуаплылыҡты оло апаһы үҙ өҫтөнә алған, әсәһенә лә әйтмәйенсә, Өфөгә алып сыҡҡан да киткән. Минең уйҙарымды Гөлфирә үҙе ҡеүәтләп ҡуя: "Документтарҙы ҡайҙа тапшырғанды уҡырға инеп ҡайтҡас ҡына әйттек. Асыуланманы әсәйем, әммә байтаҡ ҡына фекерен белдермәйенсә йөрөнө. Уҡырға китергә ваҡыт еткәс кенә, әйберҙәремде барлап, ятаҡта йәшәргә кәрәк-яраҡ тейәп, фатихаһын биреп оҙатып ҡалды. Хыялымды тормошҡа ашырыр өсөн тәүәккәл аҙым яһаған Райхана апайыма ла, фатихаһын биргән әсәйемә лә рәхмәтлемен. Юғиһә, сәнғәт институтының ишеген асып инергә үҙемдең генә ҡыйыулыҡ етмәҫ ине, Филәрисә апайым һымаҡ ғүмер буйы: "Их, әртис булып булманы", - тип үкенеп йәшәр инем...".

...Ҡасандыр әсәһе менән атаһының, Филәрисә апаһы менән ағайҙарының гармун тауыштарына гөрләп торған өй күптән бушап ҡалған - бикле тора. Гөлфирәнең бер генә премьераһын да ҡалдырмай театрҙарға йөрөгән, гастролгә килгән саҡтарында тотош театр коллективын тәмле аш-һыу әҙерләп ҡаршы алған Хәҙисә-Ғәлиә апайҙың гүр эйәһе булыуына ла ун йыл икән. "Йылына бер булһа ла тыуған өйөбөҙгә ҡайтып әйләнәбеҙ, ҡәҙерлеләребеҙҙең яҡты рухтарына доғалар уҡып, әсәйем менән атайымдың моңло тауыштары һеңгән бүрәнәләрҙе һыйпап-яратып, күңелебеҙгә тыуып үҫкән өйҙөң йылыһын алып китәбеҙ. Беҙҙең ауыл халҡы бигерәк ихлас бит ул, беҙ ҡайтып төшөү менән, күрше-күлән килеп инә. Уларҙың һәр береһендә әсәйем менән атайымдың һыҙаттарын таныған һымаҡ булам. Үҙебеҙҙең һөйләшкә генә хас моңдо тыңлаһаң да күңелгә рәхәт булып китә".

Һөйләшеүебеҙ үҙенән-үҙе Гөлфирә Сафиуллинаның тыуған ауылы - Ғафури районы Үзбәк ауылына барып ялғанды. Уның менән осрашыуға барырға әҙерләнгәндә үк: "Һеҙҙең ауылдан бер түгел өс артист (ағалыһеңлеле Юнир Ғәйнуллин һәм Айгөл Зөбәйҙуллина менән ауылдаштар улар) сыҡҡан. Өсөгөҙ ҙә Башҡортостандың халыҡ артистары тигән маҡтаулы исемгә лайыҡһығыҙ. Бәләкәй генә ауыл өсөн маҡтап һөйләрлек күренеш был. Нисек уйлайһың, уның сере нимәлә? Тыуып-үҫкән ер-һыуыңдың кеше тәбиғәтенә тәьҫире бармы икән?" - тип башлармын һөйләшеүҙе тип, һорауымды теркәп тә ҡуйғайным.

Ысынлап та, бер ауылдан әллә нисә ғалим йә сәсән, шағир йә яҙыусы, әллә нисә йырсы йә актер сыҡҡан төбәктәр Башҡортостанда байтаҡ. Ауылы-ауылы менән йырлаған йә бейегәндәр ҙә бар, элегерәк ҡайһы бер ауылдарҙа ҡурай йә гармун уйнамаған кеше булмай торғайны. Ошо турала һүҙ сығыу менән йәнде иретерлек ихласлыҡ менән: "Беҙ өсәү генә түгеел... - тип һүҙып ебәрҙе Гөлфирә. - Йырсы, шағир, композитор Рәмил Ғимрани менән режиссер Ҡәҙриә апай Ғәзизова ла беҙҙең ауылдан. Улар икеһе лә Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре. Башҡортостандың халыҡ артисы Гөлфиә Рафиҡова - беҙҙең күрше генә Бәләкәй Үтәш ауылынан, бер мәктәптә уҡыныҡ, уның менән дә бер йылға һыуын һыулап үҫкәнбеҙ. Быны хәҙер Юнир авызый менән бергә эшләйбеҙ. Бергә уйнаған ролдәребеҙ ҙә бар. Беҙҙең коллектив шул тиклем татыу, берҙәмбеҙ, дуҫбыҙ, шулай булһа ла Юнир авызый килгәс, мин үҙемде ышаныслыраҡ тоя башланым һымаҡ. Ауылдашым ғына түгел, бер туған авызыйым һымаҡ күрәм ул мин уны".

Күңеленә ҡанаттар ҡуйған һөнәре менән бәйле һәр мәлде мөкиббән китеп яратҡан Гөлфирә Зәки ҡыҙының яуаптарында халыҡ артистары тәрбиәләгән тупраҡтың көсөн тойҙом: ул төбәктә, уның күңел донъяһында йәшәгәндәр барыһы ла ихлас, эскерһеҙ, бер-береһенә итәғәтле, ярҙамсыл, сәмсел, тәүәккәл, егәрлеләрҙер, моғайын. Шулай булмаһа, буй етмәҫтәй тойолған хыялға үрләргә көстө ҡайҙан алаһың...

"Хыялыңда ниндәй образ йөрөтәһең?" тигән һорауға яуап бирергә ҡыйынһынды шулай ҙа Гөлфирә. "Ниндәй роль бирәләр, шуны уйнайым", - тиеү менән сикләнде. Генерал булырға хыялланмаған һалдат буламы ла, ниндәйҙер образ күңелен арбап-әүрәтеп тормаған актер буламы! Гөлфирәнең дә ундай образы барҙыр. Юҡ, тиһәм, алдашырмын, тигәндер; бар, тип дөрөҫөн әйтергә үҙе биҙрәнән саҡ ҡына бейек килеш һыйыр һауырға өйрәгән ҡыҙҙан Башҡортостандың халыҡ артисы яһаған көс - эске тотанаҡлылығы, баҫалҡылығынан уҙа алмағандыр. Хыялдары менән уртаҡлашып өйрәнмәгән ул: хыял үрҙәргә әйҙәп, йөрәк түрендә йәшәгәндә генә ҡанатлана.





**Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА.**

✓ *Яулыҡ - башҡорттарҙа иң киң таралған баш кейеме. Борон яулыҡһыҙ йөрөү бик һирәк күренеш булған. Әлбиттә, был динебеҙҙән дә килә - сәс күрһәтергә ярамаған. Өләсәйҙәребеҙ әйтеүенсә, яулыҡ шайтандан, зәхмәттән һаҡлаған.*



ИНТЕРНЕТТАН



## АҠ ИКМӘК ЗЫЯНЛЫ

■ Ҡайһы бер ғалимдар белдереүенсә, аҡ икмәк һәм макарон изделиеларын артыҡ күп ашау ҡатын-ҡыҙҙарҙың организмы өсөн зыянлы. 47 мең кеше ҡатнашҡан тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, был продукттар йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре хәүефен 2-3 тапҡыр ҙурайта. Әммә был үҙенсәлек ир-егеттәргә ҡағылмай, ти ғалимдар. Америка ғалимы Герберт Шелтон раҫлауынса, ике йәше тулмайынса балаларға бөтөнләй аҡ икмәк бирергә ярамай.

■ Татлы эсемлектәргә организм тиҙ күнегә, сөнки шәкәр баш мейеһенең ҡәнәғәтлек үҙәгенә майға ҡарағанда ла көслөрәк тәьҫир итә. Орегона ғилми-тикшеренеү институты тикшеренеүселәре 100 үҫмер ҡатнашлығында һынауҙар үткәргән. Шоколад өҫтәлгән һөтлө коктейль эскәндән һуң, уларҙың мейе әүҙемлеге баһаланған. Бар коктейлдәрҙең дә калориялары бер тигеҙ, әммә ҡайһыларында шәкәр, ҡайһыларында май күберәк булған. Асыҡланыуынса, ике төр коктейль дә баш мейеһенең ҡәнәғәтлек үҙәген әүҙемләштергән, әммә шәкәре күберәк булған эсемлектәр быны тиҙерәк башҡарған. Ғалимдар әйтеүенсә, шәкәрҙе ашаған һайын, уны күберәк ашағы килә башлай. Йәғни, уға өйрәнеү икенсе бер бәйлелекте - шәкәрһеҙ тора алмауҙы булдыра.

■ Ғалимдар билдәләүенсә, тәбиғи рәүештә уяныу будильникка ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ. Бының өсөн бер үк ваҡытта йоҡларға ятып, бер үк ваҡытта торорға ғына кәрәк. Ә ҡапыл уяныу организм өсөн оло стресс. Будильникты һүндереп, тағы йоҡлап китеү шулай уҡ насар, сөнки йоҡлап китергә ярҙам итеүсе гормондар уянырға ярҙам итеүселәре менән буталып бөтә, ә бынан кеше үҙен тағы ла насарыраҡ тоясаҡ.

■ Бер фармацевтик компания ҡыҙыҡлы тикшеренеүҙәр үткәргән. Һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусы ҡатын-ҡыҙҙарҙың 53 проценты үҙҙәренә иғтибар йүнәлтеү өсөн ирҙәр ауырыуҙары тураһында арттырып һөйләй, тип уйлай. Ир-егеттәрҙең 80 проценты иһә үҙҙәренең ауырыуҙарының етдилегенә ышана. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ирҙәрҙә йәлләү тойғоһо көслөрәк. Ауырыған саҡта ҡатын-ҡыҙҙарҙы бер аҙ йәлләһәң һәм ризыҡ әҙерләп ашатһаң, шул етә. Ә ир-егеттәр уларҙы кәрәкле дарыуҙар менән тәьмин итеүҙе, көнөнә өс тапҡыр яҡшы итеп ашатыуҙы көтә. Уларҙың 29 проценты ғына ауырыған саҡта яңғыҙ ҡалырға ярата.

■ Бер туҡтауһыҙ ашағы килеү организмға кремний һәм файҙалы матдәләр - триптофан һәм тирозин етешмәүе тураһында һөйләй. Глюкоза стресс гормоны - адреналин бүленеп сығыуҙа ҡатнаша. Нервы көсөргәнеше ваҡытында шәкәр тиҙерәк тотонолоп бөтә һәм организмға яңы порциялар кәрәк була. Аҙыҡ тоҙһоҙ тойола икән, организмда ниндәйҙер инфекция сығанағы бар. Иммунитет түбәнәйгәндә лә тоҙло ризыҡ ашағы килә. Әсе ризыҡҡа тартһа, ашҡаҙандың әселеге түбәнәйгән булыуы ихтимал. Борос кеүек тәмләткестәрһеҙ тора алмаһағыҙ, ашҡаҙан яйыраҡ эшләй, липид әйләнеше боҙолған, һөҙөмтәлә, организмда насар холестерин күбәйгән. Борос кеүек ҡырҡыу ризыҡтар ҡанды шыйығайта, ҡан тамырҙарын таҙарта. Хөрмә ашағығыҙ килеп китһә, тимәк, организмдың хәле бөткән. Әммә был емеш ҡанды ҡуйырта, варикоз, гипертония, ҡайһы бер йөрәк ауырыуҙары ваҡытында зыянлы.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# ЯУЛЫҠ - БАШЫБЫҘ ҠАЛҠАНЫ




**Халҡыбыҙ йолаларын тергеҙеүгә үҙҙәренең ҙур өлөшөн индергән районыбыҙ ағинәйҙәре, Өфөнән килгән ҡунаҡтар Убалар ауылына Әлмира Сәйетмырҙа ҡыҙы Юламанова етәкләгән "Мираҫ" ағинәйҙәр төркөмө ойошторған "Яулыҡ байрамы"на йыйылды.**

Сәхнә аллы-гөллө, күҙҙең яуын алырлыҡ яулыҡтар менән биҙәлгән. Өләсәй ролендәге Әлмира Сәйетмырҙа ҡыҙы әсәй-өләсәйҙәрҙән, ҡәйнәләренән ҡалған, зиннәтле ҡомартҡы итеп һандығы төбөндә һаҡланған боронғо яулыҡтарын сығара-сығара, ейәнсәрен уларҙың тарихы менән таныштыра. Яулыҡтар ниндәй туҡыманан яһалған, мәсеттәргә, ҡунаҡтарға, өйҙә йөрөгәндә уларҙың ҡайһыһын ябынғандар - барыһы тураһында ла мәғлүмәт бирелде. Сара йыр-бейеүҙәр, таҡмаҡтар, шиғыр юлдары менән үрелеп барҙы.

Яулыҡ ябыныу тарихы - бик тәрәндә. Ул күп халыҡтарҙың, дини йүнәлештәрҙең, шул иҫәптән Ислам диненең дә төп атрибуты, сағыу бер өлөшө булып тора. Яулыҡ - башҡорттарҙа иң киң таралған баш кейеме. Борон яулыҡһыҙ йөрөү бик һирәк күренеш булған. Әлбиттә, был динебеҙҙән дә килә - сәс күрһәтергә ярамаған. Өләсәйҙәребеҙ әйтеүенсә, яулыҡ шайтандан, зәхмәттән һаҡлаған. Яулыҡта йөрөү - хижаплы, бәрәкәтле булыуҙы аңлата, иман арта, медицина яғынан да хуплана. Сәсе ҡапланған ҡатын-ҡыҙ матур, йыйнаҡ һанала, башҡаларҙан айырылып тора, иғтибарҙы йәлеп итә, ихтирам тойғоһо уята, иманлы, тәүфиҡлы, инсафлы, тәрбиәле булыуҙы аңлата. Ул йөй көнө башҡа әҫе ҡағыуҙан, ҡышын һалҡындан, күҙ тейеүҙән һәм башҡа төрлө зәхмәттәрҙән араклай. Ошо ябай ғына әйбер иҫ киткес ҙур көскә эйә. Дөйөм алғанда, яулыҡ һәр бер диндә, культурала "катын-ҡыҙ ҡалҡаны", әҙәпте һаҡлаусы ролен биләй. Йәш килендәр яулыҡты маңлайҙан артҡа, елкә яғына тартып ябынһа, өлкән йәшкә еткәндәр, балалары ҙурайған ҡатындар яулыҡты алдан яҙып кейгәндәр, бөкләмәй эйәк аҫтына бәйләп ҡуйғандар.

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының яратып ябынған яулыҡ төрө - "француз яулыҡ". Халҡыбыҙҙа 19-сы быуатта киң таралған был кейем элементы Наполеон яуҙарынан һуң популяр булып киткән. Башҡорт яугирҙары үҙҙәренең әсәһе-һеңлеһе, һөйгән йәрҙәренә ҡәҙерләп бүләк итеп алып ҡайтҡан уларҙы. Шул осорҙан алып был яулыҡ - милли кейемебеҙҙең бер өлөшө. Ошо тураларҙы тарихты ла һөйләп ишеттерҙе ағинәйҙәр. Яулыҡ менән халҡыбыҙҙың күп йолалары, "Йәшерәм яулыҡ", "Яулыҡ осоро", "Яулыҡ йүгертеү", "Лыбыр-лыбыр" уйындары бәйле булыуы тураһында ла телгә алынды. Туй йолаларында ла яулыҡ төп урын биләй икәнен һәр кем белә хәҙер. Туйға барған сананың дуғаһында бер яғында таҫтамал, икенсе яғында иһә яулыҡ бәйләнә. "Килен һөйөү" йолаһында ҡәйнәһе килендә ҡаршылап, уның башына шәл яба, кейәүҙең еңгәйҙәре һәм апайҙары ла шуны уҡ ҡабатлай. "Йыуаса" йолаһында ла ҡунаҡтарҙы һыйлаған саҡта ҡоҙағый ҡоҙасаларға яулыҡ бүләк итә. Йортҡа беренсе тапҡыр ҡунаҡ булып килгән ҡатын-ҡыҙ затына ла яулыҡ бүләк иткәндәр, уны буш ҡул менән сығармағандар. Ошо йоланы һаҡлап, Әлмира Сәйетмырҙа ҡыҙы ла ҡунаҡтарға матур яулыҡтар бүләк итте.

Егет менән ҡыҙ араһындағы тоғролоҡ билдәһе лә булған яулыҡ. Тоғролоҡто һәм ғаилә ҡороу ниәтен белдереү маҡсаты менән "Ҡыҙ күҙләү" йолаһында егет ҡыҙға яулыҡ бүләк иткән. Әгәр ҡыҙ ҙа, егетте оҡшатып, кейәүгә сығырға риза булһа, бүләк яулыҡты ҡабул иткән. Шулай итеп, яулыҡ ныҡлы ғаиләнең башланыуына ла сәбәп булған.

Беҙҙең һалҡын климатта иң популяр яулыҡ төрө - ул дебет шәл. Башҡорт дебет шәле - затлы бүләк. Ул тик Башҡортостанда ғына барлыҡҡа килгән, әммә даны алыҫтарға таралған хазина. Кәзә дебетенән бәйләнгән күпереп торған йомшаҡ, йылы шәл республикаһын бренды тип аталыуға хоҡуҡлы. Әлеге байрамда ветеран-уҡытыусы Раҡыя Фәзлиәхмәт ҡыҙы Зәһиҙуллина оҫта ҡулдары менән бәйләнгән шәлдәрен килтереп, дебет шәл бәйләү серҙәре менән бүлеште.

Районың "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Зилә Фәйзуллина үҙе менән алып килгән таҫтарҙар тарихы һәм тубый ҡашмау менән таныштырҙы. Уның һөйләүенсә, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары, яулыҡтарҙан тыш, баштарына таҫтар ҙа (урама, урамал) ябынып йөрөгән. Ғәҙәттә, таҫтарҙың оҙонлоғо 3 метр самаһы тәшкил иткән. Остарының сигелгән өлөшө 50 сантиметр тирәһе булған. Улар айырым тегелгән. Сигеүҙә ҡыҙғылт-көрән төҫтәр өҫтөнлөк итә. Ҡайһы берҙә күк, һарғылт-йәшел төҫтәге ебәк ептәр ҙа ҡулланылған. Сигеүҙең өлгөләре күп төрлө. Таҫтарҙы ябыныу өсөн уны баш тирәләй бер нисә тапҡыр ураталар. Бер осо алғы яҡҡа төшөп торһа, икенсеһе арҡаға һалына.

Сарала ҡатнашыусы төрлө ауылдарҙан йыйылған ағинәйҙәр ҙә үҙҙәре алып килгән өләсәләренән һәм инәләренән ҡалған, күҙ ҡараһындай һаҡлаған боронғо яулыҡ төрҙәре тураһында бик ҡыҙыҡлы һәм фәһемле мәғлүмәт еткереп, матур-матур йырҙар менән дәртләндерҙе. Сараға ҡунаҡ булып килеүсе билдәле шағирә Фирүзә Абдуллина ла аҙаҡ үҙенең "Бәйләнештә"ге битләүенә осрашыуҙан алған тәьҫораттарын яҙып ҡуйып, Архангел районы ағинәйҙәренең күңеленә май яҡты. Мәҡәләмде уның һүҙҙәре менән тамамлайым әле: "Эх, белһәгеҙ икән минең бөгөн ҡайҙа йөрөп, кемдәр менән аралашып ҡайтҡанды! Архангел районы Убалар ауылында "Яулыҡ байрамы" үтте. Унда бөтә район ағинәйҙәре йыйылды. Ниндәй генә яулыҡтар, шәлдәр булмай икән! Әлбиттә, әсәйемдең яулыҡтары, суҡлы шәлдәре миндә лә һаҡлана, хатта шаҡмаҡлы һуғылған шәлем дә бар, ләкин сәхнәнән был турала тыңлау бөтөнләй икенсе күренеш булды минең өсөн. Төрлө яҡлы талант эйәһе Илүзә һылыуға һоҡландым, күҙ теймәһен үҙенә! Түшелдерек-ҡашмауҙарын да үҙе эшләгән, матур итеп йырлай ҙа. Ошондай йәштәребеҙ күберәк булһын ине!

Бөтә райондан йыйылған ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарап, иң рухлы, иң талантлы, матур күңелле кешеләр бында йыйылған икәнен аңлап була ине. Шул тиклем талант, ихласлыҡ, берҙәмлек, киң күңеллелек! Бейеүселәр ҙә, йырсылар ҙа, ҡул эше оҫталары ла улар. "Байыҡ"ҡа барып, Гран-при алып ҡайтҡан хатта бындағы ағинәйҙәр төркөмө! "Хазина" һәм "Ихлас" төркөмдәре тураһында һүҙем. Етәкселәре Рәсимә Мөхәмәтйәрова үҙемдең яҡташым булып сыҡҡас, айырыуса шатландым да, ғорурландым да. Арҡама ҡанаттар үҫеп сыҡҡандай булып ҡайттым. Донъя мәшәҡәттәрем онотолдо, күңелем үҫте, йәшәү дәртем ташып торҙы! Рәхмәт һеҙгә, ойоштороусылар, ҡатнашыусылар, йылы һүҙҙәрен йәлләмәүселәр! Шиғырҙарымды бик ихлас, йылы ҡабул иттегеҙ. Һәр берегеҙ һөйкөмлө, күҙҙәрегеҙ балҡып тора, һәр кемегеҙ талантлы, дәртле, рухлы! Һеҙҙең кеүек ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ барҙа ауылдар йәшәр әле! Тик донъялар ғына тынысланып китһен инде..."

**Зилә ШӘМСЕТДИНОВА.**
**Архангел районы.**

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

**"Һуғыш эҙһеҙ үтмәй, йөрәктә йәрәхәттәре, яралары ҡала. Уларҙы тик ғаилә һәм тыуған яҡ ҡына дауалай ала". Иңенә 20 йылдан ашыу хәрби хеҙмәт һәм дүрт "ҡыҙыу" нөктә ваҡиғаларын йөкмәгән Әбйәлил районында йәшәүсе Илнур Ҡарабулатовтың фекере шулай. Ул биология һәм химия уҡытыусыһы һөнәрен ала, әммә армияла хеҙмәт иткәндән һуң, Оборона министрлығы менән контракт төҙөй һәм шул ваҡыттан алып уның тормошо хәрби хеҙмәт менән тығыҙ бәйле. Абхазия, Ҡарабах, Сүриә… 2022 йылдың февралендә был исемлеккә Махсус хәрби операция ла инеп китә.**

# БЕҘ - ЛАЙЫҠЛЫ ВАРИҪТАР



Илнур Ҡарабулатов Рәсәй Президенты Владимир Путиндың Рәхмәт хаты, "Хәрби батырлыҡтары өсөн", "Хәрби ҡаҙаныштары өсөн" миҙалдары менән бүләкләнгән. "Махсус хәрби операция иғлан ителгән йылда Һамар өлкәһендә хеҙмәт иттем. Унан беҙҙе Донбасҡа, Чернигов йүнәлешенә, күсерҙеләр. Отделение менән етәкселек иттем. Биләмәгә ингәс, күнекмә үткәрелә, тип уйлаһыҡ тәүҙә. Бер кем дә Махсус операцияның Рәсәй тормошонда ҙур ваҡиға буласағын күҙалламаны. Ул саҡта Махсус хәрби операция зонаһында хәрби хәрәкәттәр булманы. Минск һөйләшеүҙәре бара ине. Әммә, билдәле булыуынса, Украина килеп тыуған мәсьәләне конструктив хәл итмәне. Ваҡиғалар артабан нисек үҫешеүен иһә беләбеҙ - Махсус операция башланды. Ауылдар һәм ҡасабалар буш ҡалды. Кешеләр өйҙәрен ташлап, Рәсәй төбәктәренә, ә кемдер Киевҡа китте. Оло йәштәгеләр генә ҡалды. Уларҙан бының сәбәбен һораныҡ. "Беҙҙең яҡтарға тыныслыҡ килеүен күрергә теләйбеҙ. Бында беҙҙең йорттар. Беҙгә бында йәшәргә кәрәк", - тинеләр. Хәлдәрен аңларға мөмкин, һәр кемдең һайлау хоҡуғы бар", - тип хәтирәләре менән уртаҡлаша ул.

Хеҙмәт иткән ваҡытта Ҡарабулатов, дуҫ булмаған илдәр Рәсәйгә ҡарата агрессияға күптән әҙерләнгән, тигән һығымтаға килгән. Уның әйтеүенсә, беҙҙең яугирҙар пилотһыҙ осоу аппараттарының өҫтөнлөктәрен һәм мөмкинлектәрен белә, әммә дрондар дошмандың һөжүм звеноларының береһе булыр тип уйламаған. "Минең уйлауымса, беҙҙең Ҡораллы көстәргә күптән пилотһыҙ осоу аппараттарын ҡулланыу талап ителә. Беҙ уларҙың эшен Сүриәлә күрҙек. Ҡарабахта тап төрөк "Байрактары"ның конфликттың һөҙөмтәһенә йоғонто яһауын иштеттек. Хәҙер, әлбиттә, беҙҙә лә бик яҡшы белгестәр бар. Әммә фронттың төүге айҙарында хәрби фәнде яңыса өйрәнергә тура килде. Шуға күрә контракт буйынса хәрби хеҙмәткә баҫҡандарға яңы технологияларҙы өйрәнергә, шул тема буйынса материалдарҙы уҡырға, заман менән бергә атларға кәңәш итәм. Һуғыш ялаһында туранан-тура бәрелештәр булыуға ҡарамаҫтан, ҡаршы яҡтарҙың коптерҙар, артиллерия, ауыр хәрби техниканың теүәллегендә ярышыуы сер түгел. Һуғыш характеры күптән үҙгәргән һәм беҙ бөтәһенән дә көслөрәк булырға тейешбеҙ", - тип билдәләне Махсус операция ветераны.

Илнур Ҡарабулатов әйтеүенсә, ул һәр ваҡыт шаян һәм мәрәкәсел булыуы менән айырылған, әкиәт, көләмәстәр һөйләгән. Уға тәүҙә холҡо үҙгәрмәгән кеүек тойолған, әммә, асыҡланыуынса, яңылышҡан. "Дуҫтарым, таныштарым, класташтарым менән осрашҡанда минең уйсан, етди, бәлки, хатта һиҙелерлек ҡартайғанымды әйтәләр. Хәҙер мин хеҙмәт итмәйем, әммә Махсус операция көнелемдән китмәй. "Ватанды һаҡлаусылар" дәүләт фонды Башҡортостан филиалының социаль координаторы булып эшләйем. Эш яуаплы, бурыстар күп. Минең ҡарамаҡтағылар араһында фронттан ҡайтҡан ветерандар күп. Уларға социализация, юридик, торлаҡ мәсьәләләрен хәл итеүҙә ярҙам күрһәтәбеҙ, янған документтарҙы тергеҙәбеҙ, дауаланыуға, шул иҫәптән шифахана-курортҡа ла урынлаштырабыҙ. Бынан тыш, гәмәлдәге яугирҙарҙың ғаиләләренә, уларҙың оло йәштәге ата-әсәләренә ярҙам итәбеҙ. Яугирҙар үҙҙәренең туғандары менән барыһы ла яҡшы икәнен аңларға тейеш".

Илнур ҡатыны Нәрисә менән ике бала - 15 йәшлек Илмир улдарын һәм 10 йәшлек Алина ҡыҙҙарын тәрбиәләй. Ғаиләһе гарнизон ҡаласыҡтарындағы тормош менән таныш. "Минең балаларым офицерҙар һәм контрактсылар балалары менән бергә үҫте. Уларҙың барыһы ла аталарының һөнәре ябай түгеллеген аңлай. Илмир менән Алина ул саҡта бәләкәй генә булғанлыҡтан, минең өҙәйлы юғалып тороуыма күнеккән. Командировкалар ваҡытында бер йыл, унан да оҙағыраҡ ғаиләмде күрмәгән саҡтар булды. Әммә ҡатынымдың нимә тойғанын яҡшы аңлайым. Бер, бәлки, ике-өс айҙан ҡайтам тип китәм дә, бер йылдан һуң ғына күрешәбеҙ. Нәрисә - минең өсөн ышаныслы тыл һәм ныҡлы терәк. Нәрисә бер тапҡыр ҙа һалдат ҡатынының ауыр өлөшөнә зарланманы. Улымдың да олатаһының һәм ҡартатаһының лайыҡлы вариҫы булып үҫеүе ҡыуаныслы. Уға бурыс, намыҫ һәм Ватанды һаҡлауҙың нимә икәнен аңлатырға кәрәкмәй. Әгәр Илмир минең юлды һайлаһа, ҡаршылыҡ күрһәтмәйәсәкмен.

Армия кешене күп нәмәгә өйрәтә. Атайым Дингеҙ флотында хеҙмәт итте, олатайым Мөждәбә Ғилметдинов Бөйөк Ватан һуғышын үткән. Уның исеме Мәскәүҙә Ҡыҙыл майҙандағы постаментҡа уйып яҙылған. Легендар маршал Жуков менән һөйләшкән, Брянск, Курск ҡалаларын азат иткән. Ҡустыларым да контракт буйынса хеҙмәт итте. Уртансыбыҙ Замир Сүриәлә бронетранспортер менән идара итте, мин командир булған подразделениела хеҙмәт үтте. Кесе ҡустым Рамазан Хәрби-һауа көстәрендә хеҙмәт итте, шулай уҡ водитель.

Минеңсә, беҙ яҡшы тәрбиә алдыҡ. Советтар Союзы Геройы Рәүеф Дәүләтов исемендәге Хәлил мәктәбе уҡытыусылары выждан буйынса йәшәргә һәм бурысты үтәргә өйрәтте. Быға үҫеп килгән быуын да өйрәнә. Улар тыуған илен яҡлай алыр, тип ышанам. Хәҙерге балалар аҡыллы, маҡсатҡа ынтылыусан, ҡыҙыҡһыныусан, спорт менән әүҙем шөғөлләнә, тарихты өйрәнә. Мин быға улар менән батырлыҡ дәрестәре үткәргәндә, ярыштарҙа, башҡа сараларҙа осрашыуҙарҙа күп тапҡыр инандым. Беҙ фронтовиктар өлгөһөндә үҫтек, улар ҙа үҙ аталарының, туғандарының Махсус хәрби операцияла ҡатнашыуын күрә. Улар ҙа һынатмаясаҡ", - ти Илнур Ҡарабулатов.

**Эдуард ҠУСҠАРБӘКОВ.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Утыҙ икенсе хат: "Сәнғәтте аңларға"

Шулай итеп, ғүмер - кеше эйә булған иң оло байлыҡ. Әгәр ғүмерҙе күп төрлө, бер-береһенә оҡшамаған сикһеҙ бүлмәләр теҙеме һүҙылған ҡиммәтле һарай менән сағыштырһаҡ, был һарайҙағы иң ҙур, ысын "тәхет залы" - ул сәнғәт хөкөм һөргән бүлмә булыр. Был - иҫ киткес мөғжизәләр бүлмәһе. Һәм ул тыуҙырған беренсе мөғжизәне һарай хужаһы ғына түгел, тантанаға саҡырылған барлыҡ ҡунаҡтар ҙа күрә.

Был бөтмәҫ-төкәнмәҫ байрамдар бүлмәһе, улар кешенең тормошон ҡыҙыҡлыраҡ, тантаналыраҡ, күңеллерәк, әһәмиәтлерәк итә... Мин сәнғәткә, уның әҫәрҙәренә, кеше тормошонда тотҡан урынына булған һоҡланыуымды тағы ла ниндәй эпитеттар менән аңлатырға белмәйем. Һәм сәнғәттең кешегә бүләк иткән иң ҙур байлығы - ул яҡшылыҡ ҡиммәте. Сәнғәтте аңлау һәләте менән бүләкләнгән кеше әхлаҡи яҡтан юғарыраҡ үрләй, тимәк, бәхетлерәк тә була. Эйе, бәхетлерәк! Сөнки сәнғәт аша донъяны, үҙен уратып алған кешеләрҙе, боронғоно һәм алыҫтағын яҡшылыҡ аша таный белеү һәләтенә эйә кеше башҡа кешеләр, мәҙәниәттәр, милләттәр менән тиҙерәк дуҫлашып китә ала, уға йәшәүе еңелерәк.

Е.А. Маймин үҙенең өлкән кластар өсөн тәғәйенләнгән "Сәнғәт образдар менән фекер йөрөтә" тигән китабында шулай тип яҙа: "Беҙ сәнғәт ярҙамында яһаған асыштар йәнле һәм тәьҫирләндергес кенә түгел, ә яҡшылыҡҡа ҡоролған асыштар. Сәнғәт аша ысынбарлыҡты таный белеү кешенең хис-тойғоһо, мәрхәмәтлеге менән һуғарылған. Сәнғәттең ошо сифаты уны баһалап бөткөһөҙ әхлаҡи ҡиммәте булған йәмғиәт күренеше итә лә инде. Гоголь театр тураһында: "Был - донъяға яҡшылыҡ тураһында әйтеп була торған кафедра", - тип яҙған. Бөтә ысын сәнғәт яҡшылыҡ сығанағы булып тора. Ул нигеҙенән үк әхлаҡлы, сөнки уҡыған кешелә, тамашасыла, ҡабул иткән һәр кемдә кешеләргә һәм барлыҡ кешелеккә ҡарата мәрхәмәтлек һәм көйөнөстәрен уртаҡлашыу теләге уята. Лев Толстой сәнғәттең "берләштереүсе башланғысы" тураһында әйткән һәм уның ошо сифатына ҙур мәғәнә биргән. Үҙенең образлылығы ярҙамында сәнғәт кешене кешелеккә ылыҡтыра: сит кешенең ҡайғыһына, сит кешенең шатлығына ҙур иғтибар һәм аңлау менән ҡарарға мәжбүр итә. Ул ошо сит ҡайғыны һәм шатлыҡты үҙенеке итә... Сәнғәт тәрән мәғәнәһендә кешелекле. Ул кешенән кешегә йүнәлтелгән - ундағы иң тере, изге, яҡшы нәмәгә. Ул кеше йәндәрен берләштереүгә хеҙмәт итә". Яҡшы, бик яҡшы әйтелгән! Һәм бындағы күп һүҙҙәр афоризмдар булып яңғырай.

Кешегә сәнғәт әҫәрҙәрен аңлау биргән байлыҡтарҙы унан тартып алып булмай, улар бөтә ерҙә, тик күрә белергә генә кәрәк. Ә кешеләге яуызлыҡ гел дә башҡа бер кешене аңлай алмаусанлыҡҡа бәйле, яфаландырғыс көнләшеү тойғоһо, унан да ауырыраҡ изгелекһеҙлек, йәмғиәттә үҙ урының менән ҡәнәғәт булмау, кешене эстән ашаған мәңгелек асыу, тормошта өмөтөндә юғалтыуға бәйле. Яман кеше асыуы менән үҙ-үҙен язалай. Ул тәү сиратта үҙен ҡараңғылыҡҡа ташлай.

Сәнғәт яҡтылыҡ алып килә һәм бер юлы кешенең тормошон да яҡтырта. Һәм тағы берҙе шулай тип ҡабатлайым: ул яҡшылыҡ алып килә, тимәк, бәхетлерәк итә.

Әммә сәнғәт әҫәрҙәрен аңлауы бик еңелдән түгел. Быға өйрәнергә кәрәк - ғүмерең буйы. Сөнки сәнғәтте аңлауыңды арттырыуҙа туҡталып ҡалыу мөмкин түгел. Ни бары артҡа сигенергә - аңлашылмаусанлыҡ ҡараңғылығына сумырға ғына була. Сөнки сәнғәт беҙҙе һәр ваҡыт өр-яңы күренештәрҙе күрергә этәрә һәм уның оло йомартлығы тап шунда. Беҙгә һарайҙың бер ишеге асылды икән, унан һуң икенсе ишек асылыу көтә.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**



## 17 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20 "Горячий лед". Фигурное катание. Финал Гран-при России. Мужчины. Произвольная программа. Трансляция из Красноярска. [0+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.10, 1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
13.00, 14.15, 16.00, 19.00, 23.35 Информационный канал. [16+]
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Натали и Александр". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.05, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Русская жена". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.26 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Профилактика.**
**14.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**14.45, 16.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Башкорттар. [12+]**
**16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Д/с "Герои". [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00, 4.30 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**0.15 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Шаймуратов генерал". [12+]**
**5.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 18 ФЕВРАЛЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 23.30 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Натали и Александр". [16+]
0.55 Д/ф Премьера. "Я не жалею ни о чем". К 80-летию Юрия Антонова". [12+]
1.55, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.05, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Русская жена". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Городок АЮЯ. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00, 22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Д/с "Герои". [12+]**
**23.00 Бишбармаҡ. [12+]**
**2.30 Спектакль "Моя звезда". [12+]**
**4.30 Защитники Отечества. [12+]**

## 19 ФЕВРАЛЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Натали и Александр". [16+]
0.10 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.05, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Русская жена". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Дорога к храму. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 22.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15, 13.45, 16.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 23.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Физ-ра. [6+]**
**15.30 Зерно. [6+]**
**16.00 Үткән гүмер. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00, 4.30 Автограф. [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**19.50 Хоккей. "Лада" (Тольятти) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**23.00 Историческая среда. [12+]**
**2.30 Спектакль "Суд матери". [12+]**
**4.15 Письма солдатам. [12+]**
**5.00 Тайм-аут. [12+]**

## 20 ФЕВРАЛЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Натали и Александр". [16+]
0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.05, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Русская жена". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 12.15, 13.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Дознание. [16+]**
**16.45 Мегасело. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Йома. [6+]**
**19.00, 4.00 Телецентр. [12+]**
**19.45 Мама. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 "Башкорт йыры" представляет... [12+]**
**20.45 Д/с "Герои". [12+]**
**22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**2.30 Спектакль "Семь девушек". [12+]**

## 21 ФЕВРАЛЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
14.40 "АнтиФейк". [16+]
15.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.30 Т/с Премьера. "Первый номер". [18+]
1.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 Х/ф "Бременские музыканты". [6+]
23.40 Х/ф "Золотой папа". [16+]
3.15 Х/ф "Весомое чувство". [12+]
4.56 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.30 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Йома. [6+]**
**11.30, 16.30, 20.45, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**12.15 Ҡурай даны. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 0.00, 2.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**13.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**14.00, 1.15 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Торжественное собрание и праздничный концерт, посвященные Дню Защитника Отечества.**
**16.45 Ради добра. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Башкорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 СВОих не бросаем. [12+]**
**21.20 Хоккей. "Витязь" (Чехов) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**2.45 Спектакль "Бэндэбикэ и Ерэнсэ Сэсэн". [12+]**
**4.30 Ете егет. [12+]**
**5.15 Мама. [12+]**

## 22 ФЕВРАЛЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Я не жалею ни о чем". К 80-летию Юрия Антонова". [12+]
11.05 Поехали! [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Они выбрали Родину". [16+]
12.55 Т/с "Участок". Кинопоказ. "30 лет вместе". [12+]
17.05 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Народный ледниковый". [0+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.00, 23.45, 2.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
1.00 Бокс. А. Бетербиев - Д. Бивол. Чемпионский бой за титул Чемпиона мира по версиям WBA, IBF, WBC и WBO. Прямая трансляция из Саудовской Аравии.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 Х/ф "Бременские музыканты". [6+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Подруги". [12+]
1.05 Х/ф "Срок давности". [12+]
4.20 Х/ф "Приказано женить". [16+]
6.06 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45, 3.45 Мегасело. [12+]**
**8.30 Хазина. [6+]**
**9.00 Ҡурай даны. [12+]**
**9.15 Квадратные метры. [12+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 Книга сказок. [6+]**
**10.15 Әкиәтсе. [6+]**
**10.30 Атайсал. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Преград. Net. [6+]**
**11.30 Ат уйнатып. [12+]**
**12.00 Елкән. [6+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Все песни о прекрасном... [12+]**
**18.15 Легенды Урала. [12+]**
**19.00 Специальный репортаж. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Байык представляет... [12+]**
**20.45 Д/с "Герои". [12+]**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 2.15 Новости недели (на баш. яз.). [12+]**
**23.15 "Башкорт йыры" представляет... [12+]**
**0.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.30 Спектакль "Матери ждут сыновей". [12+]**
**3.00 Бишбармак. [12+]**
**4.30 Защитники Отечества. [12+]**
**5.00 Башкорттар. [6+]**
**5.30 Д/ф "Инсан". [12+]**

## 23 ФЕВРАЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 Премьера. "Своих не бросаем". Концерт, посвященный году защитника Отечества. [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф Премьера. "Живи, брат, мы едем". [16+]
13.10 Т/с "20/22". [16+]
17.05 Д/ф Премьера. "Герои". Специальный репортаж". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 Премьера. Концерт ко Дню защитника Отечества. [0+]
21.00 "Время".
23.00 Т/с Премьера. "Территория". [18+]
0.00 Премьера. Литературно-музыкальный спектакль "Новороссия". [16+]
1.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

6.10, 2.20 Х/ф "Мой папа лётчик". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.50 "Наши. Военкоры". [12+]
12.20 Праздничный концерт ко Дню защитника Отечества.
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт. [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.35 Д/ф "Братья Газдановы. Семьеро бессмертных". [12+]
4.00 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Концерт "С Днём защитника Отечества!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Я вернусь... [12+]**
**8.45 Күстәнәс. [12+]**
**9.15 Мама. [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 Легенды Урала. [12+]**
**10.00 Концерт ко Дню Защитника Отечества. [6+]**
**10.30 Атайсал. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Сулпылар. [6+]**
**11.30 Герои среди нас. [6+]**
**12.15 История в граффити. [6+]**
**12.30 Д/ф "Место силы визит-центр "Тура-хан".**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.45 Дорога к храму. [6+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "ЦСКА" (Москва). КХЛ.**
**19.00 Д/ф "Рождение истории". [12+]**
**20.15 Патриот РФ. [12+]**
**20.30 Д/с "Герои". [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Концерт Рушана Биктимирова. [12+]**
**0.45 Спектакль "Страна Айгуль". [12+]**
**3.00 Колесо времени. [12+]**
**4.00 Письма солдатам. [12+]**
**4.15 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**4.45 Башкирские каникулы. [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1446 һижри йыл.*

| Февраль (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 17 (18) дүшәмбе | 6:54 | 8:34 | 13:30 | 16:33 | 18:28 | 20:07 |
| 18 (19) шишәмбе | 6:52 | 8:31 | 13:30 | 16:35 | 18:30 | 20:09 |
| 19 (20) шаршамбы | 6:50 | 8:29 | 13:30 | 16:37 | 18:32 | 20:11 |
| 20 (21) кесе йома | 6:48 | 8:27 | 13:30 | 16:38 | 18:34 | 20:13 |
| 21 (22) йома | 6:45 | 8:25 | 13:30 | 16:40 | 18:36 | 20:15 |
| 22 (23) шәмбе | 6:43 | 8:22 | 13:30 | 16:42 | 18:38 | 20:17 |
| 23 (24) йәкшәмбе | 6:41 | 8:20 | 13:30 | 16:44 | 18:40 | 20:19 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ФЕВРАЛЬ ЮБИЛЯРҘАРЫ



**Февраль айының беренсе көнөндә актер, режиссер Ғабдулла Ғиләжев, шағир Рамаҙан Шағәлиев, табиптар, медицина фәндәре докторҙары, профессорҙар бер туған Альфред һәм Мәлс Түрйәновтар, билдәле композитор, башҡорт халыҡ уйын ҡоралдарын һәм ауыҙ-тел ижадын тергеҙеүгә күп көс һалған ғалим Айрат Ҡобағошов донъяға килгән. Был ай башҡорт халҡына бик күп арҙаҡлы шәхестәрҙе бүләк иткән: РСФСР-ҙың һәм БАССР-ҙың халыҡ рәссамы Мөхәмәт Арыҫланов, Башҡортостан Республикаһының Беренсе Президенты Мортаза Рәхимов, Башҡортостанда профессиональ операға нигеҙ һалыусыларҙың береһе Хәбир Ғәлимов, Башҡортостандың халыҡ артисы, йырсы Роза Аҡкөсөкова, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан шағир Ҡадир Даян, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғарипов та тап февралдә тыуған.**

**"Тоҡос" булһа ла, йомарт икән февраль айы. Үрҙәге исемлек - быға асыҡ дәлил. Илгә һәм йәмғиәткә файҙалы булырға ынтылышлы, маҡсатлы шәхестәрҙе йәлләмәй "бүләк иткән" ул. Башваҡыста ла февралдә донъяға килгән билдәле милләттәштәребеҙҙе танырығыҙ. Ә беҙ, уңайҙан файҙаланып, ошо даһиҙар айында тыуған барлыҡ гәзит уҡыусыларыбыҙҙы ҡотлайбыҙ һәм ныҡлы һаулыҡ, ғаилә именлеге, бәрәкәтле тормош теләйбеҙ!**




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**3-сө һанындағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Метод. Үтәбаев. Әпсен. Барҙа. Аслыҡ. Йә. Флот. Юлбаҫар. Аулаҡ. Арауыҡ. Сиҡан. Мал. Ир. Уҡ. Иләк. Карл. Маҡар. Аҡтау. Ай. Балиғ. Карта. Адмирал. Ереван.

**Вертикаль буйынса:** Юнысова. Бабсаҡ. Ат. Ун. Куб. Үгеҙ. Атташе. Айран. Миәкә. Милли. Ғәлиев. Сафиуллина. Йылға. Диван. Ля. Ата. Икмәк. Убыр. Айыу. Ҡаҡ. Ҡарға.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**15 февраль "Мөхәббәт ҡоштары"** (И. Йомағолов, Ф. Ғарипов), музыкаль комедия. 16+
**18 февраль "Ах, был мөхәббәт!.."** (А. Чехов, А. Абушахманов, А. Әмиров). 12+
**19 февраль "Заятүләк менән Һыуһылыу"** (М. Ғафури, М. Малухина, И. Ҡаҙаҡбаев). 6+
**20 февраль "...Ат уйнатып алдан бара..."** (З. Бураҡаева, Х. Үтәшев), театрлаштырылған тамаша. 12+
**21 февраль "Йәш йөрәктәр"** (Ф. Бурнаш, Ф. Ғарипов). 12+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**15 февраль "Поджигатель"** (Г. Горин, М. Ҡулбаев), трагикомедия. 16+
**16, 19 февраль "Всегда один"** (А.Полярков, Э. Шрайнер), трагифарс. 16+



**20, 21 февраль "Бер ғүмер етмәй икән..."** (М. Кунафин, Р. Хәкимов), ватансылыҡ тураһында драматик поэма. 16+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**15 февраль "Винни-Пух"** (Д. Гәрәева, Д. Щербакова). 0+
**16 февраль "Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди). 0+
**20 февраль "Снеговик и солнышко"** (А. Малахов). 0+

## Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**15 февраль "Хыялыма табан"** Миңзифа Исҡужинаның юбилей концерты. 12+
**16 февраль "Воскресный концерт для всей семьи"**, Владислав Муртазин, орган. Бәләкәй зал. 12+
**18 февраль "Легенда Янтарного города"**, "Амбер" рок-төркөмө, рок-опера. 12+
**20 февраль** Башҡортостан Республикаһының ҡурайсылар ансамбле концерты. 12+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**18 февраль "Көтмәгәндә булған хәл"** (Э. Йәһүҙин), комедия. 16+
**19 февраль "Ярлыҡау"** (М. Кәрим, И. Ҡаҙаҡбаев), баллада. 12+
**20 февраль "Эх, Өфө ҡыҙҙары!"** (И. Абдуллин), музыкаль комедия. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**15 февраль "Дала буйлап икаү бара"** (Э. Йәһүҙин), музыкаль комедия. 12+
**21 февраль "Һөйәрҙәргә ҡапҡан"** (И. Йомағолов), комедия. 12+

## БР Милли музейы

**21 февраль "Башҡортостан халыҡтары"**, тематик экскурсия. 12:00. 6+
**21 февраль "Сильные духом"**, И. Балеевтың фотокүргәҙмәһен асыу. 15.00. 12+

## А.Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**20 февраль "Вариҫ"** (В.Жеребцов, Д. Нурғәлин), драма. Баймаҡ ҡалаһында. 12+

ӘЙТӘГҮР!

# БЕҘҘЕҢ ФАКУЛЬТЕТ БЫЛ!




**Быйыл Башҡорт дәүләт университетының (хәҙер Өфө фән һәм технологиялар университеты) башҡорт теле факультеты ойоштороулуға - 95 йыл, башҡорт теле, шәрҡиәт һәм журналистика факультетына 35 йыл тулды. Ошо иҫтәлекле ваҡиғаларға арнап ойошторолған байрам алдынан факультетта бөгөн эшләп йөрөүсе бер нисә уҡытыусыға мөрәжәғәт иттек:**

***Хәҙисә СОЛТАНБАЕВА, филология фәндәре докторы, профессор:*** Мин уҡытыусылар династияһынан. Атайыбыҙ Башҡортостан мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы ине, әсәйебеҙ балаларға математиканан белем бирҙе, алдынғы уҡытыусы булды. Уларҙың өлгөһөндә беҙ, балалары ла, ошо һөнәрҙе һайланыҡ. Беҙҙең өйҙә әҙәби мөхит, китап культы көслө ине. Республикала башҡорт телендә сыҡҡан баҫмаларҙың барыһын да алдыра инек. Китап уҡырға яраттым. Әҙәбиәткә булған һөйөүем, телгә булған ҡыҙыҡһыныуым менең ошо факультетты һайлауыма этәргес булды. Өфө мине маяҡ кеүек бала саҡтан үҙенә тартып торҙо, тик унда ғына уҡыйым, тигән теләк көслө ине миндә. Ә Өфөлә иң юғары уҡыу йорто менең өсөн ул Башҡорт дәүләт университеты ине. Ошо уҡыу йортон һәм ошо факультетты һайлағаныма бер ҡасан да үкенгәнем булманы, киреһенсә, әле лә һөйөнөп бөтә алмайым.

Был факультетта минең студент йылдарым үтте, был - һәр кем өсөн иң матур осор, йәшлек осоро. Байтаҡ йылдар төрлө урындарҙа эшләгәндән һуң, мине яҙмыш тағы ла ошо яратҡан уҡыу йортома алып килде, тик хәҙер инде икенсе сифатта, уҡытыусы сифатында. Элекке уҡытыусым, беҙ университетта уҡыған осорҙа факультет деканы булып эшләгән күренекле ғалим Марат Вәли улы Зәйнуллин, мине башҡорт һәм дөйөм тел ғилеме кафедраһына эшкә саҡырҙы. Марат Вәли улы етәкселегендә кандидатлыҡ һәм докторлыҡ диссертациялары яҡланым. Ошо көнгә өлгәшелгән бөтә уңыштарым өсөн мин остазыма сикһеҙ рәхмәтлемен. Ул бик көслө ғалим һәм күп яҡлы шәхес ине. Тағы шуныһы минең өсөн ҡыуаныслы: университетта уҡыу йылдарында төплө белем һәм тормошта дөрөҫ йүнәлеш биргән хөрмәтле уҡытыусыларым Ғәли Ғәли улы Сәйетбатталов, Роберт Нурмөхәмәт улы Байымов, Нәғим Хажиғәли улы Ишбулатов, Мөхтәр Хөснөлхаҡ улы Әхтәмовтар менән бергә иңгәиң терәшеп, уларҙың йылы мөнәсәбәтен, ярҙамын тойоп эшләү бәхете тейҙе миңә.

***Айгөл СӘҒИТОВА, филология фәндәре кандидаты, доцент:*** Башҡорт дәүләт университетына килгәнгә тиклем миңә урау-урау юлдар үтергә тура килде. Шуға ҡарамаҫтан, белем тауҙарына үрләргә тигән уйым бер ваҡытта ла һүрелмәне һәм, 1995 йылда бер туған һылыуым Гөлназ Ғәни ҡыҙы менән Башҡорт дәүләт университетына килеп, имтихандарҙы уңышлы тапшырып, башҡорт филология һәм журналистика факультеты студенттары булып та ҡуйҙыҡ. Бында мин башҡорт-ғәрәп төркөмөн һайланым, һәм 5 йыл буйы ошо төркөмдөң старостаһы булдым. Беҙҙең төркөм бәләкәс кенә булһа ла, бик көслө ине, шуға күрә 3 фән кандидаты сыҡты: Әлфирә Нурислам ҡыҙы Бәхтийәрова, Айһылыу Ғәлинур ҡыҙы Вәхитова һәм мин. Шулай уҡ башҡа төркөмдәштәр ҙә үҙ юлдарын тапты.

Беҙҙе 5 йыл буйы ғәрәп теле серҙәренә Рәшит Ғүмәр улы Ғилманов, Валентина Ивановна Аллакаева өйрәтте. Артабан ғәрәп теле белгесе булып китеүемә, әлбиттә, улар сәбәпсе булды, рәхмәт уларға. Факультетҡа ғәрәп теле уҡытыусыһы итеп эшкә лә уҡытыусым Рәшит Ғүмәр улы саҡырҙы. Уҡыу йортон ҡыҙыл дипломға тамамлағас, киләсәгем фән менән бәйле икәне асыҡ ине инде, һәм мин артабан юлымды аспирантурала дауам иттем. Бына хәҙер инде 25 йылға яҡын факультетыма тырышып хеҙмәт итәм, барлыҡ уҡытыусыларға, факультетыбыҙҙың деканы Гөлфирә Риф ҡыҙы Абдуллинаға оло рәхмәтемде еткерәм. Факультетыбыҙ үҫешә, яңынан-яңы йүнәлештәр барлыҡҡа килтерә, яңы быуын студенттар тәрбиәләнә, тормошомдо факультетһыҙ күҙ алдыма килтерә лә алмайым.

***Илшат ЯНБАЕВ, филология фәндәре кандидаты, доцент:*** Беҙҙең студент йылдарыбыҙ ҡыҙыҡ ваҡиғаларға бай осорға тура килде. Ни өсөн ҡыҙыҡлы осор тип әйтәм, сөнки элек СССР составында булған республикалар, союздаш, автономиялы республикалар, үҙбилдәләнеш юлына төшөп, үҙҙәренең киләсәген үҙҙәре хәстәрләргә булып киттеләр. Бөтә өлкәлә лә ҙур үҙгәрештәр башланды, милли үҙаңдың уяныу осоро булды ул, шуға күрә беҙ СССР осоронда тыйылып торған темаларҙы үҙләштерә, революцияға тиклемге осор тарихы менән ныҡлап ҡыҙыҡһына башланыҡ. Элек тыйылған китаптар, монографиялар, ҙур-ҙур хеҙмәттәр баҫылып сыҡты. Хәҙерге быуын студенттарына ҡәҙимге булып күренгән материалдар беҙҙең өсөн яңылыҡ булды. Бына шул ваҡытта уҡыныҡ беҙ. Беҙҙең осор өсөн тағы бер бөгөнгөнән айырмалы күренеш - егеттәр күп килде уҡырға. Ҡыҙыҡһыныу ныҡ көслө булды тарих, филология, туған тел менән, сөнки республика бит үҙаллылыҡ яулаңы, халыҡтың күҙе асылды, шуға егеттәр милли рух менән һуғарылған мөхиткә уҡырға килеп инделәр, күптәре армиянан һуң ине.

Беҙ уҡыған осорҙа факультетыбыҙҙа республикаға ғына түгел, ә илгә билдәле ҙур ғалимдар эшләне. Минең кандидатлыҡ диссертацияһының етәксеһе профессор, филология фәндәре докторы, Башҡортостан Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы, билдәле прозаик Роберт Нурмөхәмәт улы Байымов булды, шуға ла уның ҡул аҫтында эшләү ҙур бәхет ине. Марат Вәли улы Зәйнуллин - билдәле телсе, шулай уҡ профессор, филология фәндәре докторы. Ул башта Башҡортостан Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы булды, аҙаҡтан академик итеп һайланды, декан булды, утыҙ йылға яҡын беҙҙең факультетты етәкләгәне. Тағы билдәле шәхестәрҙән Эрнст Фәйзрәхмән улы Ишбирҙин - телсе ғалим; Мөхтәр Хөснөлхаҡ улы Әхтәмов - телсе ғалим, шулай уҡ профессор, фән докторы; Рафаил Ғәйнетдин улы Аҙнағолов - педагогия фәндәре докторы, профессор; Нәғим Хажғәли улы Ишбулатов - филология фәндәре докторы, профессор. Һәр береһенең ҙур-ҙур хеҙмәттәре яҙылды, һәр береһе фәндә ҙур эҙ ҡалдырҙы. Бына ошондай остаздар тәрбиәләне беҙҙе.

**Рәзил ШӘМСЕТДИНОВ яҙып алды.**

---

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ДУҪТАРЫҢ ҠАРҒА БУЛҺА...

### күҙең емтектә булыр

Дөрөҫлөк үҙе генә еңә алмағас, ярҙамға ялғанды саҡырған, ти.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Әле кәрәкмәгән ваҡытта дуҫтар һәм намыҫ һәр ваҡыт кеше эргәһендә, кәрәккәндә иһә улар юҡҡа сыға.

**(Габриэль Лауб).**

Күп идеялар бер кеше аңындағыға ҡарағанда, күптәр аңына күсереп ултыртҡанда яҡшыраҡҡа, камилыраҡҡа әйләнә.

**(Оливер Холмс).**

Кеше ни тиклем бөйөк булған һайын, шул тиклем иғтибарлыраҡ һәм һынамсылыраҡ.

**(Альфред Теннисон).**

Һин бейеккә күтәрелгән һайын яуыз бәндәләрҙең көнләшеүенә дусар ителәһең. Шуға ла һин юғарыға күтәрелеүҙән түгел, ә унан осоп төшөүҙән һаҡлан.

**(Андре Жид).**

Ниңә кисәге ҡайғыларға һәм хаталарға йәбешеп ятырға? Әйҙәгеҙ, алға киттек!

**(Будда).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кешенең өйөнә Бәхет килә. Шатлығы эсенә һыймаған кеше өйөндә генә ултырып сыҙай алмай, Бәхете тураһында бар ғәләмгә белдерергә теләп, донъя ҡыҙырып сығып китә. "Миңә Бәхет килде, Бәхет килде!" тип ҡысҡыра-ҡысҡыра йүгереп йөрөй-йөрөй ҙә, тынысланғас, тирә-яғын байҡап, Бәхетен эҙләй. Ләкин таба алмай. Хужаһы сабып йөрөгәндә, Бәхете артта тороп ҡала ла, аҙаша. Хәҙер инде был кеше үтелгән юлынан артҡа табан йүгерә, ләкин Бәхетен яңынан осрата алмай. Ул үҙенең ниндәй ҙур хата эшләгәнен аңлап, илай башлай.**

**Шул саҡ кеше эргәһенә бер аҡһаҡал килә һәм:**

**- Бәхетеңдән алда йүгерһәң, уның артта тороп ҡаласағын белмәнеңме ни?.. - ти. - Бәхетең менән йәнәш барырға, уның аҙымдары менән самалап атларға кәрәклеген, шул саҡта ғына ул һинән ҡалышмаясаҡ һәм юғалмаясаҡ икәнен белмәнеңме ни?.. Башыңа төшкән ҡайғы тураһында ҡысҡырырға мөмкин, ләкин шатлыҡты шым ғына кисереү кәрәк, сөнки донъяла көнсөл кешеләр бик күп. Кешеләрҙең башҡалар ҡайғыһына иҫе китмәй, сөнки ҡайғылар уларҙың үҙҙәрендә лә етерлек. Ә башҡалар шатлығы һәр саҡ кемдеңдер күҙен ҡыҙҙыра. Шатлыҡ, бәхет менән уртаҡлашыу йыш ҡына уларҙың юҡҡа сығыуына ла килтерә. Шуға ла, кемдәрҙер ишетһен һәм ярҙам итһен өсөн ҡайғыларың тураһында ҡысҡырырға була, ә бына алып китмәһендәр өсөн шатлыҡты шым кисерергә кәрәк...**

**Бына шунда ла шул йәшәйеш аҡылының асылы..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 25006

**Баш мөхәррир:** **Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 13 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2857
Заказ - 296